# ЕР ҺӘМ ЙЫР УЛЫ



# ЕР ҺӘМ ЙЫР УЛЫ

Ғилем

Өфө-2014



**Мөхәмәтйән Абдулла улы Ҡаҙаҡбаев**

УДК 82-4=512/141
ББК 82(2Рос.Баш)
Е 69

Төҙөүсе-авторҙар:

*Раушания Ҡаҙаҡбаева,*
*Бүләкбикә Ҡаҙаҡбаева*

Баҫманы әҙерләүҙә күрһәткән ярҙамы өсөн Ҡәҙим Әбделғәлим улы Аралбаевҡа оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

Е 69 **Ер һәм йыр улы**. – Өфө: Ғилем, Башҡ. энцикл., 2014. – 224 бит.

ISBN 978-5-88185-164-4

Китапта йырсы, сәсән, йыраусы Мөхәмәтйән Абдулла улы Ҡаҙаҡбаевтың ҡатмарлы һәм фәһемле тормош юлын сағылдырған хәтирәләре тасуирлана, халыҡ йырҙары, мөнәжәттәр, таҡмаҡтар, ил ағаһы хаҡында төрлө йылдарҙа донъя күргән мәҡәләләр килтерелә.

Китап киң ҡатлам уҡыусыларына тәғәйенләнә.

**УДК 82-4=512/141**
**ББК 82(2Рос.Баш)**

ISBN 978-5-88185-164-4

© Ҡаҙаҡбаева Р., Ҡаҙаҡбаева Б., 2014
© «Башҡорт энциклопедияһы» ҒНК «Ғилем» нәшриәте, 2014

## Авторҙарҙан

Хәйбулла районының Һаҡмар-Наҙаргол ауылында йәшәүсе Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Мөхәмәтйән Абдулла улы Ҡаҙаҡбаев, иншалла, 2014 йылда 90 йәшен тултырасаҡ. Ул үҙенең үҙенсәлекле тауышы, башҡарған мөнәжәт-бәйеттәре, боронго оҙон көйҙәрҙе һаҡлап ҡалыуы менән бөтә Башҡортостанға билдәле шәхес. Бөтә донъяны урап сыҡҡан этномузыковед япон профессоры Танимото Кадзуйуки «Мөхәмәтйән ағайҙы тыңланы ла иланы. Ғүмере буйы эҙләгәнен ул Һаҡмар Бүреһе ауылында тапты», – ти билдәле ҡурайсы Юлай Ғәйнетдинов.

Был китапта Мөхәмәтйән Абдулла улы яҙмышындағы мөһим осор – колхозлашыу трагедияһы, ата-бабаларының раскулачиваниеға эләгеүе, нәҫел ебе өҙөлә яҙып, бер ир бала ғына тороп ҡалыуы, унын күтәрелеүе тураһындағы хәтирәләре менән уртаҡлаша; шулай уҡ бында ғаилә фотографиялары, документаль материалдар, мәҡәләләр тупланған.

*Әсәйем Шәмсибаһарҙың яҡты иҫтәлегенә арнайым*

## ҺАҠМАР БҮРЕҺЕНЕҢ ТАРИХЫ

Мин, Ҡаҙаҡбаев Мөхәмәтйән Абдулла улы, 1924 йылдың 22 декабрендә дүшәмбе көн Хәйбулла районы Һаҡмар Бүреһе ауылында тыуғанмын. Беҙҙең ауыл Һаҡмар йылғаһы буйында туғайҙа, Аҡъюл менән Сик (Ҙур Арыҫлангол) ауылдары араһында ултырған. Ауылға нигеҙ һалған Наҙарғолдоң 7 улы булған, тип һөйләгән Ырымбур өлкәһенең Башбүре ауылы уҡытыусыһы Кәрим Ҡәйепҡолов атаһы Юныстан ишеткәндәрен. Шул малайҙары үҫеп етеп, таралышып, үҙ аллы ауылдарға исем биргән, һәм һәр ауыл исемендә «Бүре», «Наҙарғол» атамалары ҡабатланған, барыһы ла ике исем йөрөткән: Башбүре – Үрге Наҙарғол, Ҡатралы Бүреһе – Түбәнге Наҙарғол, Һаҡмар Бүреһе – Һаҡмар-Наҙарғол.

Был легенда. Ысынында иһә, элек-электән беҙҙең ата-бабалар йәшәгән Һаҡмар-Наҙарғол ауылына (халыҡ уны Һаҡмар Бүреһе тип атаған) XVII быуат аҙаҡтарында Наҙарғол исемле кеше нигеҙ һалғанын беҙҙең шәжәрә буйынса, 1995 йылда Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында «История рода Казакбаевых» тигән темаға диплом яҡлап сығыусы, хәҙерге ваҡытта Ғәлиәхмәт ауылында йәшәүсе минең ике туған ҡустымдың улы Илһам Рафаил улы Ҡаҙаҡбаев өйрәнгән.

1816 йылғы иҫәп буйынса, ауыл тәүге тапҡыр исемлеккә индерелгән, Наҙарғол ҡарт үҙенең уландары менән иҫәпкә алынған.

Беҙҙең ата-бабаларҙан 1816 йылда Наҙарғол ауылында 29 йәшлек Хәлит Ҡаҙаҡбаев (ҡатыны Ҡотлобикә менән), ҡустыһы 22 йәшлек Баязит (ҡатыны Тутыя менән), 17 йәшлек Байназар һәм 15 йәшлек Байтүрә Ҡаҙаҡбаевтар йәшәгән.

Батша Павел I указы менән 1798 йылдың 16 апреленән башҡорттар һәм мишәрҙәр хәрби сословиеға күсерелеп, идара итеүҙең кантон системаһы индерелгән һәм 1861 йылға тиклем дауам иткән. 1816 йылғы иҫәп буйынса, Наҙарғол ауылы 9-сы кантонға индерелгән. Кантон үҙәге хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы Буранғол ауылында булған. 1798 йылдан 1817 йылға тиклем 264 ауылды берләштергән иң ҙурҙарҙан һаналған 9-сы кантон менән Буранғол Ҡыуатов етәкселек иткән (уның менән беҙҙең ата-бабалар араһында туғанлыҡ бар). Үҫәргәндәрҙән тыш, кантонға түңгәүерҙәр, ҡыпсаҡтар, бөрйәндәр ҡараған. Наҙарғол ауылында *ҡунаҡтар* араһына ҡараған үҫәргәндәр йәшәгән. Наҙарғол ауылы тарихында ла ауыл старшинаһы, поход старшинаһы вазифаһын биләүсе кешеләр булған. Мәҫәлән, Дәүләткилде Ҡәйепҡолов поход старшинаһы тип билдәләнгән. Ҡаҙаҡбаевтар шәжәрәһен тәүгеләрҙән булып өйрәнеүсе Рәхимов Рафаил Сәләхетдин улының Хәйбулла район гәзите биттәрендә 1993 йылда донъя күргән материалдарында беҙҙең районда ла башҡорт атлы казактары күп булыуы иҫбатлана («Песнь о степи». Уфа, 2003, с. 56—57). Шуға күрә, беҙҙең ауыл кешеләре лә башҡалар менән бер рәттән хәрби бурыстарын теүәл үтәгәндәрҙер тигән фекер тыуа.

1859 йылғы 10-сы иҫәп буйынса, ауыл әкренләп ҙурайған: унда 179 ир-ат, 167 ҡатын-ҡыҙ көн күргән. Ул саҡта инде Наҙарғол ауылы Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең 3-сө башҡорт кантонының биш ауыл йәмғиәтен берләштергән 9-сы йорт йәмғиәтенә ингән:

1) Ибраһим ауыл йәмғиәте (7 ауыл);
2) Иҙелбай ауыл йәмғиәте (6 ауыл);
3) Сабыҡлы ауыл йәмғиәте (4 ауыл);
4) Ялсынбай ауыл йәмғиәте (4 ауыл);
5) Сурай ауыл йәмғиәте (Сурай, Наҙарғол, Арыҫланғол, Әбеш, Аҡсура, 1-се Йомағужа, Байназар).

## Ҡаҙаҡбаевтарҙың шәжәрәһе

1859 йылда беҙҙең ата-бабаларҙан Наҙарғолда 73 йәшлек Хәлит Ҡаҙаҡбаев (1787 йылғы), уның улы Йәнтүрә, Йәнтүрәнең улы 23 йәшлек Мохәмәткәрим, Баязит Ҡаҙаҡбаевтың (1794 йылғы) улы 43 йәшлек Йәнғол (Ейәнғол) Баязитов (1816 йылғы), уның улы 5 йәшлек Ҡотлогилде (1854 йылғы, киләсәктә уны Ҡотой бай тип атаясаҡтар) теркәлгән. Шулай уҡ үҙ ғаиләләре менән Хәмит һәм Баязит Ҡаҙаҡбаевтарҙың ҡустылары Байназар менән Байтүрә Ҡаҙаҡбаевтар йәшәгән.

Илһам Ҡаҙаҡбаевтың архив материалдарын өйрәнеүенән тыш, элек өлкәндәр әйтеүе буйынса, беҙҙең нәҫелдең башында Ураҙғол, уның улы Ҡаҙаҡбай торған. Ҡаҙаҡбай, Илһам Ҡаҙаҡбаев фаразлауынса, 1757—1762 йылдар араһында тыуған булырға тейеш. Ураҙғол, Ҡаҙаҡбайҙар сығышы менән Ырымбур өлкәһе Байғаҙаҡ ауылы шәжәрәһенә барып тотоша: Тойгон — Ишмаҡ батыр — Ташбулат — улдары Һөйәрғол — Үтәғол — Наҙарғолдарҙың береһенең нәҫел ебен дауам итеп, Ураҙғол тора (Рафаил Рәхимов төҙөгән шәжәрә). Ураҙғол, моғайын, Һөйәрғол, Үтәғол, Наҙарғолдарҙың береһенен улылыр, тип уйларға була. Баязит — Ҡаҙаҡбайҙың улы, фамилия, боронғо ғәҙәт буйынса, атаһының исеменән сығып яҙҙырылған. Шулай итеп, минең ата-бабалар быуыны ошонан ғибәрәт: Ураҙғол — Ҡаҙаҡбай — Баязит — Ейәнғол — Ҡотлогилде һәм уның өс улы: Әбделмән, Абдулла, Хәким.

Кантон системаһы индерелгәнгә тиклем ата-бабаларыбыҙ, йыл һайын йәйләүгә сығып, 100-әр саҡрымға тиклем күсеп китер булған, мал аҫраған, хатта етерлек иген дә иккән. Ҡартатайҙарҙың ерҙәре Ырымбур өлкәһенең Гөбөрло йылғаһы буйҙарына тиклем барып еткән (Байғаҙаҡ ауылы ла шул тирәлә). Ундағы ҡайһы бер урын атамалары Ҡаҙаҡбаевтар менән бәйле. Гөборлө йылғаһындағы бер үҙәкте Салыр үҙәге тип йөрөтәләр. Ҡотой бай бер өйөр байталға (5 йәшлек ҡолонһоҙ бейә) Салыр исемле айғыр ҡушып ебәргән. Биш йыл буйы эҙләп, ишәйгән өйөрҙө Гөбөрлөнән табып алғас, үҙәкте Салыр үҙәге тип атағандар, хатта эргәһендәге Новокиевка утарын Салыр утары тип йөрөткәндәр.

1834 йылда Ырымбур хәрби губернаторы В.А. Перовский йәйләүгә күтәүселәр менән малды ғына сығарып, халыҡты ауылда ҡалдырырға бойорған. Был фармандың башҡортто ерһеҙ ҡалдырғанын аңлап алған ата-бабалар йәһәтләп йәйләүҙәре урынына сығып, ауылдар һала башлаған. Урыҫтар килеп, ерҙе тартып ала башлағас, бөтәбеҙ Һаҡмар соҡоронда ятып ҡалмайыҡ тип, беҙҙең ауылдан Башбүре, Ҡатралы Бүреһе айырылып сыға. Ҡатралы йылғаһының үрендә, уға Төлкө үлгән тигән йылға ҡушылған ерҙәге ауыл Башбүре, йәки Төлкө үлгән Наҙарғол исемен йөрөтә башлай. Икенсе ауыл Ҡатралы-Наҙарғол, йәки Ҡатралы Бүреһе, рәсми рәүештә Түбәнге Наҙарғол, Ҡатралы йылғаһының түбәнге ағымында урынлаша (ул ауыл 50-се йылдарҙа бөтә). Ә Наҙарғол ауылы 1866 йылдағы иҫәптә Һаҡмар Бүреһе тип аталған.

Артабан күбәйеп киткәс, беҙҙең арала Хәлитов, Баязитов, Байназаров, Байтуриндар барлыҡҡа килгән, һәр тармаҡ үҙенең ҡартатаһының исемен фамилия итеп алған. Хәлит Ҡаҙаҡбаевтың улдары Йәнмерәк, Йәнтүрә, Йәнтүрәнең улы Мөхәмәткәримдәр Йәнтүрин фамилияһы менән Ҡатралы Бүреһендә йәшәгән, Байтүрәнең улдары Сәйетгәфәр, Ғәбделфәиз, Ғәбделғәни, ҡыҙҙары Мөхипъямал, Нәсихә, Нәзифә Байтуриндар фамилияһы менән Ҡатралы Бүреһендә төпләнгән.

Беҙҙең нәҫел Баязит Ҡаҙаҡбаевтан: Ейәнғол, Ҡотлогилде Баязитов фамилияһын йөрөткәндер. Ҡотой байҙың өлкән улы Әбделмән (Ғәбделмән) Беренсе донъя һуғышында ҡатнашҡан һәм үҙенең фамилияһын Ҡаҙаҡбаев тип яҙҙырған, Баязит ҡартатаһының фамилияһын ҡустыһы Абдуллага ла кире ҡайтарған. Ә Ҡотлогилденең өсөнсө улы Хәким Ҡаҙаҡбаев фамилияһына күсмәй, Баязитов булып ҡалған.

Ауылдар айырылғас, Һаҡмар Бүреһендә Йәнғол (Ейәнғол, Янғол) ҡарт улы Ҡотлогилде менән тороп ҡала. Йәнғол ҡарт ул хәтлем бай булмаған, ул ҡурайсы булыуы менән дан тотҡан. 2–3 йыл үткәс, күсеп киткән туғандары: «Ҡуй, Йәнғол, әйҙә, бында яңғыҙ ятып ҡалма, беҙ һине үҙебеҙ менән алып китәбеҙ», – тип килгәс, ауылдан Ҡушый тигән ҡарт: «Ярай, Йәнгол, беҙҙән дә бер бәхетле бала тыумаҫмы икән әле, киткәс, китһендәр, беҙ һине ебәрмәйбеҙ, һин китмә», – тип

алып ҡалған. Ҡурайсылар шулай ҡәҙерле, кәрәкле кеше булған. Йәнғол күсеп китмәгән. Иркенерәк ҡалған ерҙә егәрле ҡарт йыл һайын тырышып бесән сапҡан, унын запаста һәр ҡышты 12 кәбәне булған. Бер ҡоролоҡ йылда мал өсөн йотлоҡ булып киткәс, ялан яҡтарынан байҙар бесән алырға килгән. Бер кәбәнгә бер байтал алмаштырып, Йәнғол 12 байтал алған. Боронго башҡорттоң байлығы – йылҡыһы – күбәйеп киткәс, Йәнғол улы Ҡотлогилдегә байтаҡ мал ҡалдырған. Уларҙың ерҙәре хәҙерге Сембер аръяғында булған. Туҡмаҡта Сәгитә (Сәғиҙә) һаҙы бар, Сөрөккә боролған ерҙә, шул һаҙ Йәнғолдоң ҡатыны исемен йөрөтә. Урыҫ ауылының (Сөрөк-Петровка – ул ауыл хәҙер юҡ) Әбей үлгән тип аталған урыны булған, шунда ла йәйләгәндәр. Минең үҙемдең өйөмдөң тупһаһында ятҡан яҫы таш шунан алып киленгән.

Урыҫтар ул яҡтағы ерҙәренән ҡыҫырыҡлап сығара башлағас, йәйләүҙәрен Тимербай яғына, Ҡарагай йылға башына күсергәндәр.

Ҡотой бай заманында Һаҡмар буйында унын кеүек хәлле кешеләр күп булған: Ураҙбай ауылында – Фәхри, Башбүрелә – Фәткулла, Аҡъярҙа Әптрәхмән бай йәшәгән. Шуға күрә уларҙың килен алып, ҡыҙ биреп, үҙ-ара ҡоҙалашыуҙары гәҙәти күренеш һаналған.

1854–1929 йылдарҙа йәшәгән Ҡотлогилденең әбейе Фатима Ҡаҫмарт буйынан, Ҡыуатовтар ҡыҙы, Буранғол кантон нәҫеленән, Батый әбей тип йөрөтә торғайнылар. Бик шәпле, байлыҡ менән идара итеүсе булды ҡартәсәйем. Батый әбейҙең туғандары бик ғилемле, йырсы, ҡурайсы кешеләр булған, йырсы һәләте минә улар яғынан күскәндер, тип уйлайым. Ҡартәсәйҙең атаһы менән Өфөлә «Башкирхлебопродукт»тың генераль директоры булып эшләгән Ҡыуатов Дамир Моҙәрис улының ҡартатаһы Харистың атаһы бер туғандар ине.

Ҡартатай менән ҡартәсәйҙең 5 балаһы булған: Әптелмән, Хәҙисә, Абдулла (1897–1941), Хәким, Нәфисә.

Хәҙисә Ураҙбай ауылындағы Фәхри байҙың улына кейәүгә сыҡҡан, тик кейәүе бик иртә үлеп ҡалып, Нәғимә исемле ҡыҙы ҡалған. Ире үлгәс, Хәҙисә инәй Әбеш ауылындағы Әптелмәнов Шәйәхмәткә тормошҡа сыға. Улар Күсей ауылында ла йәшәгән, шунда ерләнгәндәр. 1929 йылда Фатима

ҡартәсәй үлгәс, олатай Хәкимдең улы Шәкирҙе үҙҙәренә алып ҡайтҡан. Шәйәхмәт олатайҙы 1935 йылда «халыҡ дошманы» тип тормәгә япҡандар. Уларҙың 1925 йылғы Фазләхмәт исемле улдары фронтта баш һалды. Сәлимә, Нәғимә исемле ҡыҙҙары менән көн итте Хәҙисә инәй. Ә инәйҙең ҡайныһы Фәхри байҙы Боторозда (Ибраһим) большевиктар атып үлтергән. Ҡотой байҙың өлкән улы Әптелмән Башбүренән Ибраһим Ҡәйепҡолов байҙың ҡыҙы йырсы Рабиғаға өйләнә. Балалары күп булһа ла, ауыр аслыҡ йылдарҙа ауырып үлеп бөтәләр. Әптрәхмән, Разия, Назия, Шәрифә, Дәүләткилде (Дәүләт), Ғифран, Мәрзиә, Мәрфүға тигән балаларҙан Разия, Шәрифә, Әптрәхмән, Дәүләт кенә тороп ҡала. Ҡотой байҙың иң өлкән улы Әптелмән үҙенең 2 ҡустыһының – Абдулла менән Хәкимдеке кеүек фажиғәле яҙмышҡа дусар ителмәй. Ул ниндәйҙер мәрхәмәтлелек арҡаһында Себергә ебәрелмәй ҡала. 1933 йылдағы аслыҡта Мәрзиә, Мәрфүға исемле 2 ҡыҙы үлгәс, ҡалған Шәрифә менән Дәүләтте, астан үлтермәйем, тип ялан яғына, Хәлилгә, алып сығып китә. Шул ялан яғына китеп барғандамы, әллә ҡайтып килгәндәме, 1934 йылда юлда үлә.

Әптелмәндең өлкән улы Әптрәхмән 1906 йылда тыуған. Тоҫҡә матур, дәрәжәле кеше булды. Өс көн эсендә бер һыйырға етерлек ҡышлыҡ бесән саба ла ҡуя торғайны. Уларға байлыҡ әләкмәне, колхоздың яңы ғына ойоштороло башлаған осорона тура килде тормоштары. Бәлки шуғалыр, уны ла Себергә һөрөлөү урап үтте. Әптрәхмән ағай бер үҙе өс норма үтәп, ат менән көнөнә 3 гектар ер һөрөп, ударник булып, Мәскәүгә колхозсыларҙың I съезына, ВДНХ-ға барып ҡайтты (әле ул ваҡытта норма 1,5–1,2 гектар ғына ине). Әптрәхмәндең тәүге ҡатыны Мәрфүға еңгәй Акъярҙан Нураев Әптрәхмән байҙың ейәнсәре ине. Мәрфүғанан булған Мәһинур һуғыш ваҡытында башаҡ ауырыуынан үлә, ә Мәрфүға еңгәй үҙе һуғышҡа тиклем гүр эйәһе була. Ул үлгәс, икенсе ҡатынлыҡҡа еңгәһен – тол ҡалған Сабираны ала, Рафаил тигән малайҙары була (Ҡаҙаҡбаевтарҙың шәжәрәһен төҙөүсе Илһам Ҡаҙаҡбаевтың атаһы). Сабира хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районына ҡараған Саҡмағош ауылынан Тойғонов Хәлил мулланың ҡыҙы булған. Әптрәхмән 1941 йылда фронтҡа китте, Ленинград яғында артиллерист булды. Хәбәрһеҙ юғалды тигән

ҡара ҡағыҙы ғына ҡайтты. Улы Рафаил бик иртә, 40 йәшендә генә гүр эйәһе булды. Унан 4 малай ҡалды — Илһам, Айҙар, Илнур, Айнур.

Әптелмәндең Разия тигән ҡыҙы Аҡъюл ауылынан Аҡкужин Ғәббәскә кейәүгә сыға, тик тәүге бәпәй тапҡандан һуң ауырып үлә. Шәрифә Әптелмән ҡыҙын Йәнтеш ауылынан Мөрфәйез исемле егеткә кейәүгә бирәләр, уларҙың Рәйлә, Дәүләт, Яңыбай, Булат тигән балалары була. Булат менән Яңыбай шунда уҡ йәшәй. Минең менән йәштәш Дәүләткилде (Дәүләт) менән хеҙмәткә бергә киттек, япондарға ҡаршы һуғышта ҡатнаштыҡ, ул Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән наградланды. Өйләнеп, 1980 йылда үлгәнгә тиклем Свердловск ҡалаһында йәшәне, Рима, Надит тигән балалары бар.

Ҡотой байҙың өсөнсө улы Хәким (Хәкимйән) Баязитов фамилияһын йөрөткән. Ике ҡатыны булған. Тәүге ҡатыны Ғәрифә Башбүренән Сәлмән ҡарттың ҡыҙы булған. Унан Фазыл, Шәкир, Фәтих тигән малайҙар тыуған.

Йәш ҡатыны Сабиранан Мөхәммәт тигән ул, Зәйнәп тигән ҡыҙ тыуа.

Хәкимде ике ҡатыны, балалары менән бергә 1931 йылда «кулак» мөһөрө баҫып, Абдулла ағаһы менән бергә беренселәрҙән булып Себергә алып китәләр. Шәкир менән Фазыл ғына ауылда Фатима ҡартәсәй менән тороп ҡалған.

Кеше ҡырыла башлағас, Хәким ағай Сабира еңгәй менән, Фәтих улын Ғәрифәгә ҡалдырып, ҡасып ҡайтҡандар. Ҡыуандыҡта йәшеренеп көн иткәндәр. Себерҙәге ауыр тормош Фәтихте, Зәйнәпте, өлкән ҡатыны Ғәрифәне ер ҡуйынына тыҡҡан, Мөхәммәт улдарының яҙмышы билдәһеҙ. Хәким ағайҙың яҙмышы ла аянысլы тамамлана: Себерҙән ҡайтҡас, Башбүре ауылынан бер кеше ялыу итеп, уны ҡабаттан алып китеп, Йылайыр төрмәһендә 30-сы йылдарҙың аҙағында вафат була. Был ваҡытта Әптрәхмәндең ҡатыны Мәрфуға үлгән булған, «Сабира еңгәбеҙҙе ситкә ебәрмәйбеҙ» тип, Әптрәхмән еңгәһен ҡатынлыҡҡа алған. Хәкимдең тәүге ҡатыны Ғәрифәнән тыуған Фазыл Сталинград өсөн барған һуғышта взвод командиры булған, уның батырҙарса һәләк булыуы тураһындағы ҡағыҙ Һаҡмар Бүреһендә йәшәгән туғандарына килгән.

Хәкимдең Шәкир тигән улы Орскиҙа эшләгән, шунда ерләнгән. Полина исемле ҡатыны менән Мәфрүсә менән Зәйтүнә исемле ҡыҙҙар үҫтерҙеләр.

Ҡотой байҙың иң кесе ҡыҙы Нәфисәне Йәнтеш ауылынан Заһит хәҙрәттең улы Сәлихйәнгә бирәләр. Уларҙың Рим, Хәмдиә, Хәмиҙә тигән балалары хәҙерге ваҡытта юҡ, ә Фәнүзәләре Йәнтештә, Розаһы Бүреләә тора. Аталары ғүмер буйы уҡытыусы булды.

Минең атайым Абдулла – Ҡотой байҙың өсөнсө балаһы. Тәүге ҡатыны Хәлимә Сик ауылында йәшәгән Әптелмән мулланың ҡыҙы, ә Хәлимәнең әсәһе Бикбау ауылынан Бикбовтар ғаиләһенән булған. Хәлимә 20-се йылдарҙа гүр эйәһе була. Абдулланың Хәлимәнән тыуған тәүге балаһы – Ғәйшә. Ул Йәнтештә Моталов Сәйфетдингә кейәүгә бирелә, хәҙерге ваҡытта Ашҡаҙар ауылында йәшәүсе Ибраһим Солтанғужиндың ҡатыны Зәкиә – уның ҡыҙы.

Икенсе ҡыҙы Сәмиға Аҡсура ауылына Рысаев Сәйфуллаға кейәүгә сыға. Уларға заман еле тейеп, пыран-заран туҙҙырып бөттө. Сәмиғаның ҡыҙы Фәүзиә Медногорскиҙа төпләнә, Юлай һәм Бәхетйән, Фәтих тигән улдары бар, Фәрит тигән улы булып, күп тормай, үлә. Гәүһәр Сибайҙа тора, Зәйнулла 70-се йылдарҙа үлә. Ғәйфулла Волгодонскиҙа йәшәй.

Абдулланың өсөнсө ҡыҙы Маһира үгәй әсәһе Шәмсибаһар һәм атаһы менән Себергә һөрөлгәс, үлә. Миңнурҙың яҙмышы билдәһеҙ.

Хәлимә үлеп ҡалғас, атай икенсегә өйләнә. Уның икенсе ҡатыны Шәмсибаһар, Аҡһыйыр (Ишкилде) ауылынан (хәҙер ул ауыл юҡ) 1871 йылғы Ғәлиәкбәров Сәйетгәрәй Бәхтегәни улының һәм уның ҡатыны Шәмсикамалдың берҙән-бер ҡыҙы була. Минең бер туғандарым: мин иң өлкәне, унан Мөхәмәтхан, Себерҙән ҡасып ҡайтҡас, үлә, шунан Рауза – Себерҙә ҡала, Маһира – Себерҙә үлә, Шәмсинур – Себерҙә үлә, Өммөгөлсөм – Себергә китмәҫ борон үлә, Әмир – Себерҙән ҡайтҡас тыуа һәм күп тә үтмәй 1933 йылғы аслыҡта үлә. Рәшит – Себерҙән ҡайтҡас, 1936 йылда тыуа. Саҙиҡ, 1938 йылғы, ангинанан үлде. Шулай итеп, бөтә балаларҙан мин һәм Рәшит кенә иҫән ҡалдыҡ. Минең – бер ҡыҙ, биш малай, Рәшиттең 1 ҡыҙы, 2 малайы бар.

## Әсәйемдең ата-әсәһенең Аҡһыйырҙағы йәшәйеше

Мине, бер йәш тулыр-тулмаҫтан, әсәйемдең аталары Аҡһыйырға алып ҡайтҡан, һәм мин әсәйемдең тәүге иренән булған Зәйнәп апайым менән 16 йәшемә тиклем уларҙа тәрбиәләндем.

Сәйетгәрәй ҡартатай указлы мулла булды. Ул, Мекетәләге (Ырымбур өлкәһенең Мөхәмәтйәр ауылы) Минһаж хәҙрәттең мәҙрәсәһендә дини белем алғас, Өфө дини идаралығының указы менән Аҡһыйыр ауылына мулла итеп тәғәйенләнә (фотоға ул шул указ ҡағыҙын тотоп төшкән). Ҡартатайҙың атаһы Бәхтегәни — мулла табип, уның ҡустыһы Шәкир — Аҡташта мулла булып торғандар. Ҡартатай бушлай малайҙар уҡытты: яҙыу танытты, дин ғилемен дә өйрәтте, ҡартәсәй өйҙөн икенсе яртыһында ҡыҙҙарҙы йыйҙы. Бик ғилемле булмаһа ла, боронғо яҙыуҙы танып уҡырға өйрәткәндер инде. Боронғо китаптары бик күп булды. Ҡартатай ниндәй генә китапты ҡулына тотмаһын, һыу шикелле уҡыр ине, һүҙҙәргә лә тәржемә яһай торғайны. Әсәйем дә боронғоса бик ғилемле ине. «Мөхәммәҙиә» китабына «12 йәшемдә уҡып сыҡтым», тип яҙып ҡалдырған.

Ҡартәсәйҙең тағы бер һөнәре булды — ул элек-электән им-том итте, ҡан алды банка менән, кеше баҡты. Уның Тибет китабы тип аталған китабы бар ине. Шул китапҡа ҡарап, кеше баға торғайны. Ә унда төрлө үләндәр тураһында яҙылған кеше һауыҡтыра торған рецептар булды. Шул шөғөлө алып ҡалды беҙҙе асҡа үлеүҙән. Ҡартәсәй ҙә сығышы менән Мекетәнән, ҡыҙ фамилияһы — Даминева, атаһының ике ҡустыһы ла мулла була, Вәхит исемлеһе Аҡъярҙа йәшәгән. Вәхиттең Муллахмәт, Ғәлиәхмәт исемле ике улы, репрессиялар башланғас, Үзбәкстанға ҡасып сығалар, унда уҡытыусы, мәктәп директоры булып эшләйҙәр, Даминевтан Аминев булып китәләр.

Ҡартатайҙар кешегә һүҙ ярҙамы менән генә сикләнмәнеләр, мохтаждарға ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торҙолар. Үҙ ғүмерендә 3 етемде тәрбиәләп үҫтергәндәр. 1921 йылдағы аслыҡта үлергә ятҡан бер ҡыҙ баланы (Фәтхиә исемле) үҙҙәренең өйҙәренә алып инеп, бағып, тәрбиәләп үҫтереп, кейәүгә биргәндәр.

Тоүге кейәүе үлгәс тә ул ҡартатайымдарға кире ҡайтҡан. Икенсеһе Аҡнаҙар ауылынан Байсурин Әхмәткә кейәүгә барып, унан 5 улы була: Сәлих, Булат, Яныбай, Хәким, Азат. Булат һуғышта ятып ҡалды, Сәлих уҡытыусы булып эшләне, хәҙер ул да, Яңыбай ҙа гүр эйәһе, Хәким — инженер, Азат — журналист, Өфөлә йәшәнеләр.

Мин 1 класҡа Аҡнаҙар ауылына барҙым, Килдебаева Мәсүрә апайҙа йәшәнем, Ыласынов Лотфулла уҡытты, 2-сене Аҡһыйырҙа, 3—4-сене Сик ауылында, ә 5-сене Аҡъюл ауылында уҡыным, Ишемғолов Рөстәм тигән олатайҙарҙа торҙом. Атайәсәй, тугандарҙы ҡабат-ҡабат Себергә һөрөү башланып, миңә башҡаса уҡыу эләкмәне. Шул 5 класс менән минең белем алыуым тамамланды.

Ул ваҡытта мин ике арала йөрөнөм. Бүреләә минең тиңдәштәрем Фазыл, Дәүләт менән уйнай торғайнығ. Хәким ағайҙың артлы санаһы йәй көнө һарай ҡыйығы эсенә ултыртыла торғайны. Иҫемдә, шуның эсенә ултырып алып өсәүләп заман таҡмаҡтарын, йырҙарын йырлайбыҙ.

Бәләкәсерәк инек әле. Бер көнө сейәнән ҡайтып килгән әсәйҙәргә, ҡынаға барабыҙ, тинек тә, үҙебеҙ Аҡһыйырға йәйәүләп киттек тә барҙыҡ. Барһаҡ, ҡартатайҙар ҙа сейәгә киткән. Көнө буйы Һаҡмарҙа күшегеп йөрөп, кис еткерҙек. Төнөн Әптрәхмән ағай менән атай беҙҙе эҙләп килделәр, Дәүләтте менгәштереп алып ҡайтып киттеләр. Иртәгеһенә әсәй, Алаҡайҙы егеп килеп, ҡырандас менән беҙҙе алып ҡайтты.

Аҡһыйыр ауылы тәбиғәттең бер хозур урынында урынлашҡан ине. Эргәһендә генә Һаҡмар аға, уға тирә-яҡтан ваҡ йылғалар ағып төшә. Яҙ көндәре шаулап-гөрләп тора торғайны ауыл тирәһе. Аҡһыйырҙа йырсылар күп булды. Унда мин йыр ишетеп үҫтем. Зәйнәп апай ҙа йырсы булды, тауышы матур ине. Ҡаршыла ғына Ғәли исемле ағай булды, күп йырҙы унан оттом. Нәбирә апай ҙа йырсы ине, «Сәлимә», «Зөлхизә», «Һандуғас» — шул ваҡытта унан өйрәнгән йырҙар. Беренсе тапҡыр сәхнәгә Аҡъюл ауылында сыҡтым — «Урал»-ды йырланым. Ул көйҙө Йәнтеш ауылында Моталов Һаҙый ағайҙан отҡайным.

Мин иҫ белгәндә ҡартатайҙың бер аты, ҡырандасы бар ине, өйҙәре ҡабыҡ менән ябылғанын иҫләйем. 2—3 һыйыр,

6–7 баш һарығы булды. Тимәк, ул заман өсөн етеш тормошло, хәлле кешеләр булғандар.

Ҡартатай, ҡартәсәй, әсәй бигерәк тә – ғаиләһе менән дин яғына шәп булдылар, фанатиктар, дин юлынан һис тайпылманылар, аҙаҡҡаса тоғро ҡалдылар. Улар үҙ заманының бик ғилемле, аҡыллы кешеләре булдылар, боронғоса бик яҡшы белделәр – Аҡмулла, Бабич шиғырҙарын яттан һөйләйҙәр ине. Ҡартатай урыҫса ла яҡшы белде, килгән кешегә ҡағыҙҙарҙы яҙып бирә торғайны. Мине бик тырышып боронғоса өйрәттеләр, тормош һабаҡтары бирҙеләр, уҡытырға тырыштылар. «Балам, бел дә эсеңә һал да ҡуй. Кеҫәлә яткан аҡса менән бер ул, ҡайһы ваҡытта кәрәк, алаһың да тотонаһың, белем дә шулай», – тинеләр.

Юлай Ғәйнетдинов минең турала Башҡортостан юлдаш телевидениеһының «Хазина» тапшырыуын алып барғанда, Мөхәмәтйән ағай миҫалында ҡанбабалар тәрбиәһен күрергә була, тип әйтеп киткәйне. Ҡанбабалыҡ ул – ырыуҙан өмөтлө баланы һайлап алып, уға кәрәгенсә тәрбиә биреү, һаҡлап ҡалыу, тип аңлайым. Мин уларҙан, ысынлап та, нисек йәшәргә, ниндәй кеше булып үҫергә тигән төшөнсә алдым. Ҡартатайымдарҙың нишләп мине һайлауҙары миңә ҡараңғы, шулай ҙа тәрбиәләүгә бар көстәрен һалдылар; мине һәм апайымды Себерҙән ҡотолдорҙолар. «Яҡшы бул, балам, яҡшы кешене яман кеше лә ярата. Тәкәббер булма», – тип өйрәттеләр. «Тәкәбберлек арҡаһында Ғазазил фәрештә ожмахтан ҡыуылған, иблис булып киткән», – тиерҙәр ине. Суфый Аллаяр хәҙрәттәре «Сыбатыл ғәзизин» тигән китабында шулай тип әйткән, тип өҫтәп ҡуйырҙар ине. Нәфселе булма, яман кеше менән ҡатышма, яҡшы кешенән уның яҡшылығы һиңә күсә, унан үрнәк ал, ямандан ғибрәт ал; яҡшының – шарафаты, яманның – касафаты, тинеләр. Рух ҡомарын алға ҡуйҙылар. Инәнән тыуған ике төрлө менез менән тыуа: берәүҙәр, эсһәм, ашаһам, ултырһам, ти, уларҙа – тән ҡомары; икенселәре, күрһәм, белһәм, өйрәнһәм, ти, уларҙа – йән ҡомары, тип өйрәттеләр. Үҙем өсөн йәшәйем, тиһәң, кеше өсөн йәшә; алдама; таш менән орғанға ла аш менен ор, тип өйрәттеләр.

Мулла ҡартатайым тарихты яҡшы белә ине, атайымдарҙы Себергә алып киткәс, «Аҡылға һыя торған эш түгел был, та-

рихта быңдай әхлаҡһыҙлыҡ, насарлыҡ ҡылынғанын ишеткәнем юҡ, киләсәккә ғибрәт булһын» тип, «Төн ҡараңғы» тигән мөнәжәт сығарған, уны тетрәнмәй уҡып булмай:

*Төн ҡараңғы, дөм ҡараңғы, яҡты шәм янмаҫ микән,*
*Ямғыр урынына хоҙаның рәхмәте яумаҫ микән.*
*Ҡандан эшләнгән бағаналар тамам аумаҫ микән,*
*Донъяның шайтандары етер, бер-бер бығауланмаҫ микән.*
*Йөҙ түбән китмәҫме афәт, аҫҡа ҡапланмаҫ микән,*
*Ҡанлы диңгеҙ фаяз, рахман* берлә пакланмаҫ микән.*
*Бөттө өлфәт бәндәләрҙең тәндәрендә ҡан менән,*
*Тапһа рәхәтлек, хозурлыҡлар таба ғисьян менән.*
*Иң түбән эттәр, бесәйләр уйнайлар ғирфан менән,*
*Сарпушалар мең зобаныйлар был көн ризуан* менән.*
*Тарлана йән илә анлар йән әсеткес ғаз(а)* микән,*
*Ил ҡоторҙо, әллә инсанлар бары ханнас микән.*
*Ер менән күктең араһын ҡапланы хур, әр был көн,*
*Күрмәйһеңме һәр бер инсан, ки Нөкир Мөнкир был көн.*
*Һәр сәмәүи изгелекте тап-тап иҙҙе шәр был көн,*
*Ер йөҙөндә бер ҡиәмәт ер был көн, мәхшәр был көн.*
*Кипте ерҙәр, ҡороно күлдәр, тамсы һыу таммаҫ микән.*
*Юҡ, өмөтһөҙ булмай мәле, һәр хыялым — бер өмөт,*
*Мин фәҡир булһам әгәр, күңелемде йыуаталыр өмөт.*

Совет власы хәллеләрҙе бөтөрөргә тигәс, таланыуҙы мин тәү башлап Аҡһыйырҙа күрҙем. Һаҡмар Бүреһендә береһе ситләтһә, икенсеһе эскә тартыр ине. Аҡһыйырҙа ҡыйын булды. Муллаларҙы талай башланылар. Әле алып китеүен китмәнеләр, мәсетте лә тартып алмағандар ине, шулай ҙа әйләнәһенә килеп, өйҙәге бар нәмәне һыпырып алып сығып китәләр ине.

Аҡъюл сельсоветында кеше талаусылар Аҡъюлов Сабир, Усман, Игебаев Әхмәт булды. Бик күп кешене төрмәгә ултырттылар.

Иҫләйем, бер ваҡыт Усман тигән кеше таларға килде. Өй эсендә бер нәмә лә юҡ. Алдараҡ талап алып сыҡҡан фарсы келәме аҫтына ҡартәсәй кәзә балаҫы түшәй ине, шул алама кәзә балаҫын ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып сығып китте.

Беҙҙе талай торғас, өй эсендә бер нәмә лә ҡалманы. Ҡулдан аҡса китте, хәйерсегә, ярлыға ҡалдыҡ, ләкин шул белемдәре менән, кеше бағыу менән үлмәй йәшәп яттылар ҡартатайҙар. Өҫкә кейергә кейем дә ҡалманы, ҡартатайҙар әҙерәк һағыҙ ҡайнатып, ҡырға сығып китеп һатып, 2 метр ыштанлыҡ аҡ тауар, Зәйнәп апайға күлдәклек 3–4 метр ҡыҙыл тауар алып килде. Шуны кейергә насип булманы. Иртәнсәк сәй эсеп ултыра инек, ҡартәсәй ырғып торҙо ла, шул төргәкте мейес артына, утын араһына ташланы, үҙе һерелдәшеп китте. Усман килеп инде, улай-былай ҡаранды ла, тура мейес артын тентеп, йәшергән тауарҙарҙы алып сығып китте.

Беҙ Зәйнәп апай менән Аҡһыйырҙан 3–4 километр Аҡназар яғына сығып, еләк йыя торғайныҡ. Шул еләктән ҡартәсәй ҡаҡ ҡоя, ҡартатай шуны һатып, беҙҙең өҫкә кейем алмаҡ була. Кеше бағалар, һәр килгән кеше йомортҡа һ.б. алып килә. Шулай итеп, хәйергә 40–50 йомортҡа йыйылды. 4–5 кило ҡаҡ киптерелде. Шуны Аҡһыйырҙан Ишем (налог агенты) тигән кеше килеп инеп тартып алды. Шаһимгәрәй (Ишкилдин М.С. ҡартатаһы) менән алып сығып китте, үҙҙәре ашанылар. Өндәшеп булмай, ҡайҙа инде ул өндәшеү. Һине яҡлаған кеше юҡ, хөкүмәт: «Әйҙә, быларҙы бөтөрөгөҙ», – тип рөхсәт биргән.

Беҙҙең өйҙә һандыҡ аяғы (подставка) бар ине. Шуны әллә нисә тапҡыр алып сығып китер инеләр, һаталар, ә һатып алған кеше кире алып килеп бирә. Бибекәй исемле апай: «Абыстай инәй, һеҙҙең һандыҡ аяғығыҙҙы алып килделәр», – тип 4-се тапҡыр ҡайтарҙы беҙҙең мөлкәтте. Аптырағас, Йосоп ағайҙарға алып барып ултырттыҡ, 5–6 йыл торҙо шунда. Күршеләге Ғәббәс ағайҙың атаһы Ишкилдин Әптрәхмән олатай эшләгән был әйберҙе һуңғы йылдарҙа мин район музейына бирҙем.

Таланып, аптырап ултырған бер мәлдә шул Бибекәй апай (хәҙерге Сайпанов Йомағәлиҙең әсәһе) ҡартәсәйгә: «Һинең изгелегеңде онотмайым», – тип бер сеүәтә ярмамы, онмо алып инеп бирҙе. Бер ҡасан да шуны онотмайым. Ә ул апайҙар ҡартатайымдар һәйбәт йәшәгән саҡта уларҙа ашап-эсеп йөрөнөләр; шуны онотманылар.

Ҡаршыла ғына Хаммат тигән олатай йәшәне, әбейе Шәрифә ҡаты булды, ҡартәсәйҙе ныҡ йәберләне. Инә лә

орлəй, əйберҙəрҙе тартып алып сығып китə торғайны. Уларҙың балалары күп булды. Беренсе ҡатынының балаһы Ишкилдин Йосоп (1906 йылғы) армиянан ҡайтып килеп, Сиктəн Заһит тигəн ҡарттың ҡыҙы Орҡоя еңгəйҙе алды. Шул Орҡоя еңгəйҙе һыйҙырманы үгəй бейем. Аптырағас, йəштəр ҡартатамдың солан ашаһындағы бəлəкəй өйҙəренə сыҡтылар. Ҡартатайҙар уларҙы үҙҙəренең балалары кеүек күреп, кəнəш биреп, аҡыл өйрəтеп торҙолар. Бик арыу, һəйбəт кеше булды Йосоп ағай. Һыйырҙарының башмағын ҡартатайымдарға биреп, уларҙы һыйырлы иттелəр. Шул башмаҡҡа тип Аҡһыйыр башынан, хəҙерге беҙҙең яҡтағы ерҙəн, бесəн сапты ҡартатай. Шуны ҡартəсəм менəн бергə сығып өйҙөк. 3—4 күбəлəйен алып ҡайттыҡ. Ҡартатайымды төрмəгə алып киткəс, ҡырҙағы бесəн ултырып ҡалды, һыйырға насип булманы: Мөхəмəтша тигəн ҡарт бесəнде урыҫтарға һатты. Юлдың ҡырынан ҡарама ҡырҡып, ҡараманың ҡабығын һыҙырып, ашатып, башмаҡты ҡыш сығарып ебəрҙек. Ҡыш буйы бəлəкəй сапа һөйрəп йөрөнөк.

Ҡартатай төрмəлə саҡта шул танаға тип күршелəге Ишкилдин Хəсəн (минең тиндəш) менəн Ябал башынан бесəн сабабыҙ. Иң ҡурҡҡаныбыҙ бүре, беҙҙе бүре килеп ашап китмəһен, тибеҙ. 11—12 йəшлек балаларбыҙ бит инде. Шул бесəнде бер көнө Зəйнəп апай менəн, үгеҙ егеп, алып ҡайтып килəбеҙ. Ауылға инеү менəн Ғəбделхəй тигəн бер яманы тартып алып, дөйөм кəртəгə ҡутарҙылар ҙа ҡуйҙылар. Беҙҙең һыйыр тағы ас тора. Дөйөм кəртə ҡартатайҙың кəртəһенең артында ғына ине, Зəйнəп апай менəн бер тишек аша инеп, төндə бесəн урлайбыҙ. Ишкилдин Шəрифулланың атаһы ат ҡараусы ине, ул һиҙһə лə, өндəшмəне. Бригадир ҙа һиҙҙе, əлбиттə, əллə йəллəнеме, тауыш ҡуптарманы.

Шул һыйырға, йəй сыҡҡас, нисек бесəн əҙерлəп ҡалырға тип аптырап, мин, 12—13 йəшлек малай, əрəмəнəн 4—5 күбə бесəн саптым. Һыртта эшлəп яткан кешелəр: «Мөхəмəтйəн бөтə бесəнде сабып ташлаған», — тип Ишкилдин Исхаҡ олатайға бесəнде тартып алырға ҡушҡандар. Ул минең күбəлəрҙе барып ҡараған да, шул хəтлем һəйбəт итеп өйөлгəн күбəлəрҙе күреп: «Кит, мин был баланың күбəһен тартып алырға ҡурҡам, тартып ала алмайым», — тип ҡайтып киткəн. Боронғоса

кеше ине ул. Ә икенселәр ҡурҡманы – килеп тейәп алып киттеләр. Тағы йөрөнөк, юл ситендә ятып ҡалған бер устай бесәнде ҡыш буйы йыйып.

30-сы йылдар башында ҡартатай мәрхүм һуғымға тип ҡайҙандыр ат алып ҡайтты. Күрше Йосоп ағай менән, талап алып китмәһендәр тип, мул йылҡы итен тау ҡыуыштарына йәшерҙеләр, әҙ-әҙләп кенә алып килеп, ашап йөрөнөк. Беҙ генә түгел, халыҡ та ас-яланғас ине. Бер йылы ауылға отряд килеп, ырғаҡлы тимер һөңгөләре менән кешеләрҙең өй тирәләрен, келәт эстәрен тишкеләп, йәшерелгән ашлыҡ эҙләнеләр. Бер нәмә лә тапмай кире киттеләр.

Өлкәнерәк аҡыллы кешеләр ҙә булды. Әсәйем ҡартатайҙар һөйләгәнен еткергәйне: ул ваҡытта Ишкилдин Заһит тигән ҡарт йәшәгән Аҡһыйырҙа. Элек ҡунаҡҡа саҡырһалар, беҙ, бала-саға, ололарҙың артынан эйәреп барып, мейес артында торабыҙ. Балаларҙы берәмләп саҡырып, устарына ит һалғанда, Заһит олатай минең турала: «Был бала бер өлөшлө бала булыр», – тигән. Уның шулай тип әйткәнен йыш иҫкә төшөрәм. Мин хәҙер үҙемде бәхетле һанайым. Балаларҙы үҫтерҙем, уҡыттым, ғүмер буйы миңә бөтә нәмә лә уң килеп торҙо. Заһит ҡарт шуны мин бала ғына саҡта алдан иҫкәрткән. Ҡайҙан белгән икән ул уны? Уны бер кем дә әйтә алмай.

Вәзәмдә Ғәлләм олатай, Йәмилә инәй (ҡартәсәйемдең туғандары) йәшәй ине. Шәберәк ваҡытта ҡартатайҙар уларға иген биргән, тайлы иткән. Шулар мине бер йәй аҫранылар. Вәзәмдә Ғәлләм олатайҙың ҡустыһы Әүхәҙиҙең Ишбулды, Аллабирҙе тигән улдары менән уйнап йөрөгәндә, балалар мине ситләтмәк булһа, Әүхәҙи олатай килеп: «Теймәгеҙ уға, һеҙҙең шикелле түгел ул, ата балаһы», – тип минең башымдан һыйпап китер ине. Шуны бер ваҡытта ла онотмайым.

Аҡһыйырҙа булған хәл-ваҡиғаларҙа бөтә илдәге ҡот осҡос хәлгә ҡалдырылған ябай халыҡтың яҙмышы көҙгөләгеҙ кеүек күренә. Беҙ ас булһаҡ та, йәберләнһәк тә үҙебеҙҙең еребеҙҙә инек. Тыуған ер ашатты, ҡурсаланы һымаҡ. Ә бына ғәзиз ереңдән көсләп айырып, көтөү һымаҡ ҡыуып алып китһәләр? Атайҙарҙы «ҡулак» тиеп, тар-мар итеп ташлау, ғаиләләре менән юҡ итеү ҙә шул ваҡытта эшләнде.

## Атайымдарҙың Бүреләге томошо, раскулачивание

Мин иҫ белгәндә, атайымдарҙың бер ат сапҡысы бар ине, шуның менән иген сапҡандарын хәтерләйем. Әсәйҙәр көлтә бәйләй торғайны. Бесәнде лә шуның менән сабыр инеләр. Ҡәртә аҫтында ғына ырҙындары булды. Көлтәләрен ырҙынға ташып, кәбән итеп һалып, үҙҙәренең ҡулы тейгәндә, ҡыш кәнә һуға торғайнылар. Пар ат егә торған фургондары бар ине. Шуның менән яҙ көнө, һыу ташып бөткәс, ағас әҙерләп, Орскиға алып барғандарын хәтерләйем. Колхозлашыу башлангас, атайҙар ҙа колхозға инде, тырышып эшләп йөрөнөләр. Шулай ҙа иң беренселәрҙәр булып раскулачиваниеға эләктеләр.

Себергә алып китер алдынан бөтә мөлкәтте тартып алдылар. Бына атай яҙып ҡалдырған исемлек:

1931 йыл, 6 август. Себергә һөргөнгә ебәргән ваҡытта Ҡаҙаҡбаев Абдулланан тартып алынған мал һәм ҡаралтылар:

1. 2 быҙаулы һыйыр
2. Ике тана
3. Дүрт ат
4. 200 иҙән таҡтаһы
5. 100 ҡыйыҡ таҡтаһы
6. 8 баш һарыҡ
7. 200 бүрәнә
8. 2 өй, ҡыйыҡтары ҡарағай таҡта менән ябылған
9. 4 ултырғыс (ҡамыш, талдан эшләнгән)
10. 1 һандыҡ
11. Стенага элә торған 1 сәғәт
12. Стенага элә торған 1 көҙгө
13. 2 самауыр
14. 6 һарыҡ тиреһе
15. 1 һыйыр тиреһе
16. 1 фургон
17. 1 ҡаҙаҡ ябаға (яҙғы йөн) (*15 ҡаҙаҡ = 4 кг*)
18. 20 ҡаҙаҡ көҙгө йөн
19. 1 өҫтәл
20. 1 ҡаҙан
21. 2 күнәк

22. 5 майтабаҡ *(тәрилкә)*

23. 1 ат сапҡысы.

Атайҙарҙың ала танаһын, Сәйфуллин Ғәлиәхмәт алып китмәк булғас, беҙҙең ауылдан Кәли бирмәгән. Шуны Әбештән Илембәтов Хисам (Ҡыҙыл үңәс ҡушаматлы) тигән комсомолец алып китеп, һуйып ашағандар.

Шул Ғәлиәхмәт тигән кеше әсәйҙәрҙе килеп талағанда иң тәүҙә әсәмдең беләҙеген тартып алып, үҙенә кейеп алған. Әйберҙәрҙе бер ҡат алып китеп һатҡандар.

1931 йылдың августына иң тәүҙә атам менән Хәким ағайҙы алып киткәндәр. Беҙҙең ҡаршыла, хәҙерге Зөфәрҙең өйө урынында, тимерлек ине, атам шунда тимерсе булды. Милиционер килеп, атайҙы эшләп торған ерендә йоҙаҡлап ҡуйған. Әсәй мәрхүм уға әйтеп, астырып, уны ла, атамды ла алып ҡайтып, сәй эсереп ебәргән. Уларҙы алып барып, Әбешкә бер келәткә бикләп ҡуйғандар, артабан Ҡыуандыҡҡа төрмәгә япҡандар. Әбештәге келәткә япҡанда, Вәзәмдән сельсовет секретары Шәрип, Үрнәктән Ҡужин Ҡатау – председатель – елкәләренә бер төртөп: «Һеҙгә шул кәрәк!», – тип үсәп ҡалғандар.

Атайымдарҙы Ҡыуандыҡҡа алып барып бикләгәс, сират әсәйҙәргә еткән. Үҙҙәренең фургондарына тейәп, Хәким ағайҙың ҡатындарын балалары менән, әсәм, Маһира һеңлем, Мөхәмәтхан ҡустым, Рауза һеңлем (1927 йылғы), имсәк Шәмсинур һеңлемде Ҡыуандыҡҡа алып киткәндәр. Мин ырғып төшөп, Вәзәм эргәһендә ҡапҡыҡ араһында ятып ҡалдым. Төндә 20 километрҙа ятҡан Аҡһыйырға йүгерҙем. Бүренән дә, бигенән дә ҡурҡыу бөттө. Кешенән ҡурҡтым!

Китеп барышлай Әбеш, Вәзәм урамында туҡтаттылар, артистар килгәнме ни, кешеләр арыу кейемдәрен кейеп, балаларын күтәреп, беҙҙе килеп ҡарап торҙолар, тип һөйләй торған ине әсәм.

Ҡотлогилде ҡартатай 1929 йылда был мәхшәрҙән алда донъя ҡуйған ине. Хәҙерге баҡса урынында бәләкәй өйҙә 80 йәшлек Фатима ҡартәсәй һәм Фазыл менән Шәкир тороп ҡалдылар. Шул өй, келәт (әле лә бар), бер шкаф ҡалды бөтә мөлкәттән. Ә үҙебеҙҙең өйҙө атайҙарҙы алып киткәс үк боҙоп алдылар, өйҙө, һарайҙарҙы Сиккә ферма итеп күсереп һалдылар. Өйҙө боҙоусы Вәзәмдән Күскилдин Ниғәмәт тигән кеше булды.

«Китегеҙ, эт балалары, хәрәм башығыҙға төшө», — тип әрләгәне хәтерҙә ҡалған.

Атайҙар шунда, Ҡыуандыҡта, бикле ултырғанда мулла ҡарттатайым менән икәүләп ат менән барҙыҡ. Беҙҙекеләрҙән башҡа, төрлө райондарҙан йыйылған кешене тимер юл складына бикләгәндәр. Бәҙрәф юҡ, ҡатын-ҡыҙ шәл ҡуйып тышҡа сығалар (ярау итәләр) ине. Аҙна-ун көн шулайтып яҙалағандар. Атайҙарҙы алып барып ҡыуғын ағасын сығартҡандар. Конвой уратып алып китә торған булған.

Һоргонгә уларҙы йөк вагондарына тейәп алып киттеләр. Беҙ ҡартатайым менән беҙҙекеләрҙең вагондары тапҡырында ҡойма тишегенән ҡарап ултырҙыҡ. Әллә нисә ғаиләне шул бер вагонға тығып, ишектәрен шарт ябып, Себергә алып киттеләр. Беҙ илап тороп ҡалдыҡ. Әсәй мәрхүм һөйләй торғайны: «Бер ай тирәһе алып барғандарҙыр. Балалар илаша, бәҙрәф юҡ, күнәк кенә. Анда-бында туҡтатып, тамаҡ ялғатып алалар». Шулай итеп барып, Кемеров-Кузнецкий өлкәһенә (хәҙерге Кемерово өлкәһе), Кузнецк тигән ҡалаға төшөргәндәр. Йәйәүләтеп, Кузнецкиҙан 10 километр ергә тайғаға алып киткәндәр. Ваҡ балаларын, әйберҙәрен йөкмәтеп, Обь йылғаһының аръяғына, Толзос тигән йылғаның буйына ҡыуғандар. Унда ҡара урмандан башҡа бер нәмә лә булмаған. Сентябрь айы, һыуыҡ төшкән ваҡыт. Атайҙар үҙҙәре ағас ҡырҡып, бура бурап, ҡышҡа ҡар яуыуға саҡ барактар өлгөртөп, шунда ингәндәр. Аслыҡ-ялангаслыҡ — кешеләр себен шикелле ҡырылған. Мәһира һеңлем барған йылда уҡ үлгән, Шәмсинур һеңлемдең үлемен әсәй: «Бахыр ныҡ итеп тороп имсәгемде тешләне лә, шунда уҡ йән бирҙе», — тип күҙ йәше менән һөйләр ине. Сабира еңгәйҙәрҙең Мөхәмәтйән тигән малайы юғала, шикелле, Зойнәптәре үлә. Әсәйҙең үҙе сығарған бәйетендә ул ваҡыттағы хәл-ваҡиғалар асыҡ сағылдырылған:

*Илебеҙҙән сығып киттек иҫәнләшеп,*
*Атам-әсәм илап ҡалды бәхилләшеп,*
*Ҡайтһаҡ ине беҙ — меҫкендәр әйләнешеп,*
*Шулай итеп, хәйер-доға ҡылғыл инде.*
*Сәүитеский ф(ы)лагларын кем буяған,*

*Был сәфәрҙең оҙаҡларын кем уйлаған,*
*Хисабы юҡ был донъяла ҡан илаған,*
*Бер хоҙайым фазыл менән ҡотҡар инде.*
*Балта, бысҡы тотоп талды беләкләрем,*
*Иҫкә төшһә, яна минең йөрәкләрем,*
*Ҡабул итһен бер хоҙайым теләкләрем,*
*Бер хоҙайым, үҙең генә ҡотҡар инде.*
*«Йософ» китап көйө менән мин көйләйем,*
*Башҡа төшкән хәсрәтемде мин һөйләйем,*
*Был хәсрәттә нисек ғүмер кисерәйем,*
*Бер хоҙайым, үҙең генә ҡотҡар инде.*
*Беҙ меҫкендән был хәсрәтләр китәр микән,*
*Хәсрәт бөтөп, рәхәт көндәр етәр микән,*
*Ҡайтып күреү шулай насип булыр микән,*
*Бер алланан шуны өмөт итәм инде.*
*Уҡырһығыҙ был ҡағыҙға яҙған һүҙҙе,*
*Бер күрергә насип булһын йөҙөгөҙҙө,*
*Был ҡазаны бирҙе беҙгә мәүләм жәлил,*
*Йә, хоҙайым, үҙең ярҙам биргел инде.*
*Был бәйетте мин яҙамын һеҙҙең өсөн,*
*Яна төрган утҡа ҡарап ғибрәт алам,*
*Бер хоҙайым, үҙең ярҙам биргел инде.*
*Әсир булып айырылды ғәзиз башым,*
*Хәл һорарға юҡ бит минең ҡәрендәшем,*
*Туғандарым, беләгеҙме минең хәлем,*
*Хәҡиҡәт шул миҫалда минең хәлем.*

Аҡһыйырҙағы ҡартатайым икенсе йылына йәй коно әсәйемде күрергә тип, эҙләп китте. Берҙән–бер ҡыҙын шул хәтлем йәндәй күргәндер инде. Барып, күреп, 6 йәшлек Мөхәмәтхан ҡустымды эйәртеп алып ҡайтам тип етекләп килгәнендә, Васильев тигән милицонер, фашист, баланы алып ҡалған.

Кеше ҡырыла башлағас, Хәким ағай менән Сабира еңгәй өлкән еңгәй Ғәрифәне һәм Фәтих улын ҡалдырып, ҡасҡандар, сөнки Ғәрифә еңгәй ул ваҡытта аяҡтары менән яфаланып, йөрөй алмаған. 1932 йылда атайҙар ҙа ҡасырға йыйынғас, бисара еңгәй: «Раузаны ҡалдырмаһағыҙ, ҡайнаға, һеҙҙе

барып әйтәм, ебәртмәйем. Рауза ҡалһа, ҡайнаға килер, шунда мин дә ҡайтырмын уның менән», – тигән. Ике бәләкәй бала менән ҡаса алмаҫтарын самалап, атай үҙе лә Раузаны аҙаҡ барып алырмын тип уйлаған. Әсәй мәрхүм үлгәнсә илап һөйләне: «Бер яулығымды йоҡлап ҡына ятҡан балам өҫтөнә ябып, илап сығып киттем». Рауза 1927 йылғы 4–5 йәшлек кенә бала ине. Йәйәүләп тайгала китеп барғанда, бер ауылды үткәндә: «Әсәй, бына, һыйыр тиҙәге ята», – тип ҡыуанды – тип әсәй мәрхүм илай торғайны. Ҡайтҡас, атай мәрхүм 2–3 мәртәбә Раузаны алып ҡайтам тип уҡталып, юлда таланып, барып етә алманы. Хәбәрһеҙ юҡҡа сыҡты бәләкәй ҡыҙ. 60-сы йылдарҙа Рамазан Ҡотошов исемле журналист, аҙаҡҡы ваҡытта Фәтих улым да эҙләтеп ҡараны – таба алманылар. Ул урында тайгала хәҙер бер нәмә лә юҡ, тип яуап бирҙеләр. Крапивинский балалар йортона урынлыштырылғаны билдәле булһа ла, яҙмышы билдәһеҙ.

1925 йылғы Мөхәмәтхан ҡустымды йокмәп, 2 ҙур һыу кисеп, 1932 йылда ҡайтып йығылғас, атайҙарҙы, мине, Сабира еңгәйҙе кире алып китергә тип Әбештән Рәшитов Далха, күрше Яхыянан 2 арбаға ат ектереп, килгәйне, әсәй молодец булды, ыҙғышып, талашып, ултырманы. Мин тағы ҡасып ҡалдым. Шул Далха һуғышта Власов армияһына эләгеп, һуңынан төрмәлә үлде: кеше ҡаны ебәрмәне, күрәһең. Ә атайҙы алып киттеләр: Беломорканалға ебәрҙеләр. Ул унда 1935 йылға тиклем булды. Балаларҙың ҡырылыуы ауылда ла дауам итте. Мохәмәтхан ҡустым ҡайтҡас та, ауырып үлде. Һөргөндән ҡайтҡас, Әмир тигән ҡустым тыуғайны, 1933 йылғы аслыҡта үлде, бахыр. 1938 йылғы Саҙиҡ тигән ҡустым гел минең шикелле көйләп йырлап йөрөй торғайны. Хисапҡа шәп булды, мөнәжәт көйләй торғайны әсәйгә. Ғүмере генә ҡыҫҡа булды.

1933 йылда әсәйем Аҡһыйырға ҡартатайымдарға ҡайтты. Ул йылдағы аслыҡ иген үҫмәгән өсөн булманы. Иген үҫте, тик ураҡ ваҡытында бер туҡтауһыҙ ямғыр яуҙы. Йыйған игенде лә хөкүмәт ҡырып-һыпырып тартып алды. Урылғандан ҡалып сүпләнгән башаҡты ла тартып алдылар. Халыҡ ас. Биҡолов Әлмәт, Бәҙри тигән ярлылар үлде. Бәҙриҙең Ырыҫбикә әбейе тороп ҡалды.

1933 йылда әсәйгә, Әмир ҡустымды һөйрәп, хәйерселәргә тура килде. Ауылдан ауылға тамаҡ хаҡына банка ултыртып, ҡан алып йөрөнө. Шул ваҡыттағы бер ҡурҡыныс ваҡиғаны әсәйем ғүмеренең аҙағына тиклем бер ғәжәйеп тарих итеп һөйләр булды.

Ҡаҙыршалағы Ураҡов Уйылдандарҙа булып, Йәнтеш аша Аҡнаҙарға килешләй, Һаҡмар аша үткәндә, боҙ уйылып, һыуға төшөп китә. «Әмирем санала, мин сыға алмай сәбәләнәм. Шул саҡта ап-аҡтан кейенгән бер ҡарт килеп сыҡты ла, мә, тип таяғын һуҙҙы. Йәбешә һалдым, үрмәләшеп мәкенән сыҡтым. Хызыр Ильяс шунда уҡ юҡҡа сыҡты», — тип Йомабикә менән Аҫылбикәнең атаһы Акъюлов Сәләхетдин ҡартты Хызыр Ильяс дәрәжәһенә күтәреп, ололай торғайны. Бер кемдән дә изгелек көтмәгәндә — ябай кеше тарафынан ҡотҡарылыу! Үҙенә-үҙе ышанмай, әсәм ҡотҡарыусыны ап-аҡтан «кейендереп», Хызыр Ильяс ҡотҡарҙы, тип һөйләгәндер.

Кеше ас, хәйерселек менән менән көн күрә. Юл буйҙарында кешеләрҙең аслыҡтан үлеп ятҡанын күрҙек. Аҡһыйырҙа бергә уйнап йөрөгән Ғәфүрйән тигән тиңдәшем бар ине. Яҙ көнө урманға нәмә булһа ла ашарға табырға тип сығып йөрөгәндә, ҡышын өкө ашаған ҡуян тиреһенең йәбешеп ятып ҡалған киҫәген табып алып, өйгә ҡайтҡас, утҡа өтөп, шатырлатып ашап ултырғанын күрҙем. Ул ваҡытта башҡорт бәшмәкте белмәне; беҙҙән башҡа бер кем дә картуф сәсмәне, нишләптер. Яҙға сығыу менән үлән ашай башлайҙар, йыуа, әтлек, һарына тамыры, балтырған — барыһы ла ашала.

Беҙҙең дә ашау яғы наҡыҫ. Әсәй, Зәйнәп апай өсәүләп сүмесбаш һоҙөп ашарға Һаҡмарға киттек бер көндө. Әбйәлил олатай һеүән һала торғайны, шуның һеүәнен барып ҡараһам, йәйен төшкән! Шул йәйенде урлап алып ҡайттыҡ, ул беҙҙе аслыҡтан ҡотҡарҙы.

Алайтып-былайтып ҡыш сыҡҡайныҡ, Аҡһыйырҙың Ишем тигән аламаһы сельсовет председателе татар Дәүләтшинға, бында кулак бисәһе йәшеренеп ята, тип ошаҡлап, өйгә килеп, тағы таланылар. Элек талағанда, алданыраҡ тоғро кешеләргә алып барып ҡуйған әҙ-мәҙ кейем, ҡаралтымы — шуларҙы Дәүләтшин алды. Әсәйемдең еләне Ғәлиәхмәт клубында

йороп туҙҙы, ҡартатайҙың сапаны, шарфы, бейәләйенә хәтлем тартып алып, сапанды Аҡъюлға Ибраһимов Ғәйнетдингә, шарфын Шарап тигән кешегә, бейәләйҙе урыҫ ауылына бирҙеләр. Ҡартәсәйҙең бер сатин ҡыҙыл юрғаны бар ине, уны Аҡъюлдан Сөләймән ҡарттарға тапшырҙылар. Өйҙә тағы бер нәмә лә ҡалманы. Ауылда Зөлхизә тигән инәй бар ине. Шул инәй бер ваҡыт илап килеп ингән: «Уй, абыстай, анау ваҡытта талап алғандарына нисек түҙҙең?», — ти. Баҡтиһәң, уның һуғым итен урлап сығып киткәндәр икән. Тартып алған әйберҙәр үҙ хужалары өсөн үс алған һымаҡ булды ҡайһы саҡ. Атайҙарҙы раскулачивать итеп, әйберҙәрен һатҡанда, көҙгөләре Әбештән Үзбәков Ғәйнетдин тигән кешеләргә эләгә. Ҡатыны Вазифа, Бүре ауылынан Дәүләткилдиндарҙың ҡыҙы, бер көнәк картуфҡа көҙгөгөҙҙө алығыҙ, тиһә лә, ҡартәсәй, күңелдән сыҡҡан, кәрәкмәй тип, баш тартҡан. Мәхмүзә әбей ул көҙгөнө һатып алып, өйөнә ҡуйған. Бер ваҡыт уларҙа йыйылып эскәндә, Дәүләтша менән Вазифаның улы Динислам ҡалғандарға бәйләнеп, һуғышып киткәндәр. Теге көҙгө ярылған, ярсығы Динисламдың муйынына тейеп, ауыҙы ҡыйшайып ҡалған.

Ҡартатай-ҡартәсәйҙәрҙең шул ваҡытта үҙҙәренең кешегә, донъяға ҡараштарын үҙгәртмәүҙәренә хәҙер ҙә аптырайым. Үҙҙәрен талаған кешеләрҙең балалары беҙгә килеп ишек төбөндә торһа, шуларға ашарға берәр нәмә бирә торғайнылар. Шунда мин, нишләп уларға бирәһең, бирмә, ҡартәсәй, аталары беҙҙе таланы бит тип, ҡаршы төшәм. «Балам, хоҙай уларҙыҡын күрһәтмәһен, биргән менән бөтмәй, кешегә биргән менән, кешегә ашатҡан менән бөтмәй, хоҙай тағы ла үҙенең өмөрөнән ҡалдырмай», — тип әйтер ине.

Дәүләтшин менән Ишем әсәйгә, кулак бисәһе, тип төрмә менән янай башлағас, берәү: «Һеҙҙе бында сыҙатмаҫтар, кире Бүрегә ҡайтығыҙ», — тип кәңәш биргән. Иҫләйем, әсәм менән бәләкәй арбаға Әмир ҡустымды һөйрәп, Бүрегә Батый ҡартәсәйҙәргә ҡайтып киләбеҙ. Урамда ирҙәр күп ултыра ине, ни тип уйлап ултырғандарҙыр, белмәйем, һеҙгә шул кәрәк, тинеләрме икән?

Ҡайтҡас, оҙаҡ та тормай, Әмир ҡустым үлде, бахыр. Әсәм бригадир булып йөрөүсе Шәрипов Уйылданға, минең балам

үлеп ҡалды, Уйылдан, ерләшергә бер кеше биреп тор, тиһә, яллап күмдер, тип әйтте, тип илай торғайны.

Был аслыҡ ваҡытында атай Беломорканалда тотҡонлоҡта ине. Ҡайтҡас, ундағы мәхшәрҙе үҙебеҙгә генә һөйләй торғайны. Унда, тиер ине, эшләһәң дә үләһең, эшләмәһәң дә үләһең. Эшләһәң — ауыр эштән, эшләмәһәң — астан үләһең, сөнки норма үтәй алмаһаң, ашатмайҙар. Себерҙең эҙемтәһе инде — йайлап көс китте; «доходяга»лар рәтенә инергә генә торам. Хәл бөтөп ултыра инем, десятник-бригадир: «Нишләп ултыраһың?», — тип һораны. «Хәл юҡ», — тип әйтҡәйнем, ярар, ҡаҙма ерҙе, тип китте. «Шул кеше мине яҡланы, тине атам, — норма үтәмәгәнемде күрһәтмәне. Әкренләп көс керҙе, хәл йыйҙым». Бер ай ваҡыт үткәс: «Әйҙә, эшләй башла яйлап», — тине әлеге мәрхәмәтле кеше. Милләте менән еврей ине, ул мине үлемдән алып ҡалды; һәйбәт эшләнең, тип мине ҡайтарҙылар, тип һөйләне атам. Унда булғанда атам туғандарға: «Ҡалайтһағыҙ ҙа Мөхәмәтйәнде үлтермәй алып ҡалығыҙ», — тип хат яҙған. Атай Беломорканалдан 1935 йылда ҡайтты. Хәлһеҙ ине, саҡ-саҡ атлап йөрөй. Колхозға эшкә сыҡты.

Баҡсалағы бәләкәй өйҙә бер нәмә лә юҡ. Үрнәктән Мәхүп еңгәй бер ҡыҙыл упыҡ тауыҡ (йөнө күҙен ҡаплап торған тауыҡ), Сиктән Мәрхиә еңгәй сыбар тауыҡ бирҙеләр. Шул тауыҡтарҙы ҡуйырға урын юҡ, сөнки кәртә-ҡураны, өйҙө алып киткәндәр, нигеҙ таштары ла юҡ. Раскулачивание мәхшәре алдынан кешеләр, хәлленәрҙе бик ҡыҫалар, ти, нишләп уның менән булаһың, тиһәләр ҙә, атай хәҙерге Салауаттар йәшәгән урынға «Г» хәрефенә оҡшатып, бейек нигеҙ эшләгәйне, уның да таштарын алып китеп бөткәндәр ине. Һайғау ҡырҡып, ҡыуыш ҡороп, тауыҡтарҙы шунда ҡышлаттыҡ. Яҙ сыҡҡас — тауыҡтың аҡылы бармы — күрше Шәкирйәндәрҙең ишек алдына ингән. Шәкир уны үлтерә һуғып, беҙҙең ишек алдына алып килеп бырактырҙы. «Бына һеҙҙең тауығығыҙ!», — тип аҡырынды.

Тауыҡтан эш сыҡмағас, беҙ йорт ҡуяны алдыҡ. Ҡуян үрсеп китте, беҙгә ит булды. Тиреһенән атам күн эшләне, кәпәс текте. Шул ҙур кәпәсте бер тоҡ арышҡа алмаштырғаныбыҙ хәтерҙә.

Атай менән балыҡ тоторға булдыҡ бер заман. Балыҡты бороноо ҡымыҙ тәпәндәрендә тоҙлап, мөгәрәпкә ҡуябыҙ. Атай, минс теркәп, бәләкәй арба менән балыҡты Сембергә алып кито. Һәйпән ҡоҙоғона етеп йоҡлайбыҙ ҙа иртәгеһенә Сембергә Калугиндарга барып етеп, балыҡ һатабыҙ. Шул балыҡ аҡсаһына Медногорскига барып, тауар, ваҡ-төйәк алабыҙ. Шул уҡ балыҡ аҡсаһына Әлекәй ауылындағы Бәхтийәр Ырыҫкоповтан бәләкәс кенә башмаҡ алып ҡайтып, һыйырлы булдыҡ. Әсәй мәрхүм әрһеҙ булды инде, бахыр. Ул ҡеше үҫтермәгән картуфты, кеше ултыртмаған кәбеҫтәне үҫтерҙе. Тормошобоҙ шулай яйлана башланы. 1936 йылда Рәшит ҡустым тыуҙы.

Атай ҡәҙимге шәбәйеп, колхозда эшләй башланы, бесән сапты, ураҡта лобогрейка менән иген урҙы. Хәмзә ҡарттың ҡара бейәһен гел егеп йөрөй торғайны. Ә Хәмзә ҡарт, ат ҡараусы булып эшләне, игенде тиҙ сабыу өсөн һәйбәтерәк аттарҙы айырым баға торғайны. Элек атайҙарҙа эшләп, тамаҡ аҫрап йөрөһә лә, уларға ҡаршы булды. Ғәни менән икәүләп атам өҫтөнән ялыу яҙғандар, элекке кулак, игенде өҫтән-моҫтән сапты, ҡалдырып бөттө, спекуляция менән булыша, тигәндәр. Был 1937 йыл — күпләп репрессиялар башланған йыл — атайҙы Йәрмөхәмәтов тигән милиционер алып китеп, Йылайыр төрмәһенә алып барып бикләп тә ҡуйҙылар. Бер ваҡыт быларҙың өҫтөнә атамдарҙы Себергә ебәрткән, ул ваҡытта ҡолас ташлап йөрөгән Ҡатау менән Шәрипте алып килеп бикләгәндәр. Береһе элекке сельсовет секретары, икенсеһе председателе. Атай түҙмәгән: «Яңылыш килеп индегеҙ бит, бында һәйбәт кешеләр ултыра, һеҙҙең кеүек кешеләр урыны түгел был», — тип әйткән. Ҡатау оҙаҡ ултырмаған, ҡайтыу менән үлгән, ә Шәрип һуғыш бөткәс, ҡайтып килеп үлгән.

Әсәйемдең атаһын да 1937 йылда «халыҡ дошманы» тип ҡулға алдылар. Дини китаптарын, алып китеп барғанда, Атингән ауылы эргәһендә таш ҡыуышында ҡалдырып киткән. Йылайыр төрмәһендә атайым менән ҡартатайым тап килгәндәр. Ҡартатам бахыр: «Мөхәмәтйәнде уҡытып булманы», — тип илаған. Ғүмере 1938 йылда Өфө төрмәһендә өҙөлдө, ҡәбере билдәһеҙ.

Ялыуҙа күрһәтелгән спекуляция – беҙҙең балыҡ һатыу булған икән. Атай, мин спекулировать итмәнем, ауылда һәйбәт эшләнем, тикшерегеҙ, тигәс, ауылға барып, һорау алғандар. Шәрипов Ибраһим бригадир булған ул саҡта, һәйбәт эшләне, тип яуап тотҡан. Атай һөйләүенсә, «по линии НКВД» тип колонна-колонна кеше алып киләләр икән, атай ул «линияға» тап килмәгәндер – оҙаҡламай сығарҙылар. Ләкин Йылайыр төрмәһенән ул аяҡтарын тундырып, билен биртендереп, ауырыу булып ҡайтты. Бик ҡыйналып, яҙаланып ултырһа ла, атам шул ултырған еренән кешегә быйма табанланы, итек ремонтланы. Итек тегеүен текмәне, шулай ҙа ҡулынан килмәгән шөғөлө булманы, нисек булһа ла көн күрергә бер сәбәбен табып торҙо инде, мәрхүм.

Атай ауырыһа ла, донъяһын барлап ултырҙы. Әлеге бәләкәй генә һыйырҙы ҙурыраҡҡа алмаштырырға кәрәк тип, бәләкәй һыйырҙы һуйып, Кәли менән Медногорск баҙарына алып барып һатып, аҡса алып ҡайтты. Шул ваҡытта председатель Асҡаров Тимербулат ағай (Сәлимдәрҙең атаһы) килеп, атама: «Ағай, аҡса кәрәк, колхозда 40 тана бар, шулар араһынан оҡшағанын һайлап ал», – тип шул аҡсаны алып китте. Атам менән әсәм барып, аҡ башлы күк тана алып ҡайттылар. Һөтлө һыйыр беҙҙе һуңғы ваҡытҡа тиклем аҫраны. Мин армиянан 1948 йылда ҡайтҡанда ла бар ине ул һыйырыбыҙ.

Колхоз председателе Тимербулат ағайҙың тағы бер изге эше иҫтә ҡалған. Сик ауылы менән Бүре ғүмер буйы бер колхоз булды. Сиктән хисапсы Бикмөхәмәтте эйәртеп килеп, Тимербулат ағай атама айына бер бот иген бирергә, тип тәғәйенләп китте. Беҙ бик оҙаҡ аптыраныҡ. Ә ғүмер буйы ҡарама төбөндә хырылдап йоҡлап ятҡан, ғөмүмән, аяҡ өҫтө йоҡомһорап йөрөгән Хөсәйен: «Ә миндә бер нәмә лә юҡ, миңә нишләп бер нәмә лә бирмәйһегеҙ», – тип дау ҡуптарҙы.

Һуғыш алдынан да кеше бик наҡыҫ йәшәне. Әбешкә тауар килә тигән хәбәр сыҡҡас, халыҡ бер аҙна әҙерләнде. Пайка атай исеменә яҙылһа ла, ул ауырып ятҡас, Әбешкә мин киттем. Барһам, башбүреләргә хәтлем тулып китҡәндәр, сират хәҙерге Әхмәтша магазинынан алып Һаҡмарҙың яр башына тиклем һуҙылған. Сиратҡа торҙом, тик тәүге көн миңә сират етмәне, сиратты яҙлыҡтырмайыҡ тип, шунда урамда

йоҡланыҡ. Иртәгеһенә төшкә мин дә барып еттем. Комиссияла бер нисә эре-эре ир ултыра, тауар дөрөҫ биреләмеюҡмы, шуны тикшерәләр, имеш. «Ах, алама малай, һинең бит атаң Абдулла, беҙ беләбеҙ һинең атаңды, үҙе килһен!», — тиҙәр. «Атай ауырып ята, бында килерлек түгел», — тием мин. «Кемгә “бай” тип яҙылған, ул үҙе килергә тейеш!» — яуап шулай булды. Ике көн сират тороп, төндә урамда йоҡлап, иртәгеһенә бер ниндәй тауарһыҙ, илай-илай ҡайтып киттем. Ә бирмәгәне 3 метр байковый күк тауар ине.

Өйҙәге биш-алты тауыҡтың һалған йомортҡаһын әсәй бахыр ашамай йыйып, йәйәүләп китер ине Саҡмағош ауылына (Ырымбур өлкәһе) Хәйрулла исемле агентҡа һатырға. Нимә алып булғандыр инде ул 40—50 йомортҡаға.

Февраль айында Медногорск баҙарына бесән һатырға киттек. Үгеҙ еккәнбеҙ. Һыртка сыҡҡас, буран башланып китте. Көслө ел бесәнде ауҙара ла ҡуя. Медныйға саҡ барып етеп, бесәнебеҙҙе һатып, бесән аҡсаһына бер шәм филтәһе, бер буханка икмәк алдым. Тағы нәмәләр алғанмындыр хәтерҙә юҡ, барып этләнеүҙең хаҡы ла сыҡманы.

1939 йыл, миңә 15—16 йәштәр тирәһе, эшсе тип һаналам, колхозда һәйбәт кенә эшләп йөрөйөм. Ат менән ер һөрәбеҙ, иген сабабыҙ. Сиккә йыш ҡына эшкә ебәрәләр. Унда ат менән иген баҫа торғайныҡ, һалам ышыртабыҙ. Шул ваҡыттағы бер ваҡиға хәтерҙә ныҡ уйылып ҡалған. Аттың ҡамыты ла эшкә ашмай, арҡаны ла өҙөлә лә китә. Өлкәндәр: «Малай, һалам төшөртмә, һалам күбәйеп китә!», — тип асыуланалар. Мин, йәнем көйөп, илай-илай өҙөлгән арҡанды төйнәп, үҙемсә йүнәтеп торһам, Сиктең Байбулатов Ғиҙелхаҡ тигәне: «Ә-ә, боронғо ваҡыт булһа, бөйөргә таянып, бойороп торор инең, бына һиңә, кулак балаһына, хәҙер шул кәрәк!», — тип үсәне. Унын һүҙен мин мәңге онотмайым. Сиктәр насар булманы, Байбулат тигәндәре насар булды, тип һөйләп йөрөнөм.

Бала саҡ, бигерәк тә үҫмер саҡты иҫләһәм, һаман да күңелем тула. Һин дә ас, улар ҙа ас — тигеҙләндек, ә шулай ҙа улар араһында мин яңғыҙ булдым, «Кулак балаһы», «ҡан эскес», «мошенник мулла тоҡомо» икәнемде гел иҫемә төшөрөп торҙолар. Аҡһыйырҙа торғанда, 1937 йылдыр, һабантуй булды әрәмәлектә. Аҡъюл менән бер колхоз инек, унан да кеше күп

килде. Мул итеп бутҡа бешереп, кешеләргә ашаттылар, балаларға айырым бүлделәр. Минә шунда бутҡа һалманылар. Өйгә мин илап ҡайтып индем дә абыстай ҡартәсәй менән төн буйы иланыҡ. Ҡартатай төрмәлә ине инде ул саҡта.

Бер заман урамда балалар менән уйнап йөрөйбөҙ. Рысаев тигән бөкрө Сик уҡытыусыһы (Ҡыуандыҡ районы Рысай ауылынан), беҙҙең ауылдан Наҙарғолов Хәмит (ҡарттар) һыбай тороп алғандар ҙа, мине, бер бәләкәй баланы, мыҫҡыл итәләр: «Мулла, бына мулла балаһы, ул намаҙ уҡый», — тиҙәр. Мин торҙом да йүгерҙем, улар минең арттан баҫтырып тороп ҡалдылар. Йүгереп инеп әсәй алдына тәгәрәнем, әсәй ҙә ныҡ көйәләнде.

— Һеҙгә шул кәрәк! — был Хәмиттән йыш ишетелгән һүҙ.

— У, кулактар! — тине әбейе, теш ҡайрап.

Шул уҡ ваҡытта Хәмиттең ҡартәсәһе, ете быуын туғаныбыҙ тип, ҡартәсәй менән ҡатышты, элек ғаиләләре менән беҙгә һыйындылар.

Үҫә төшкәс, тырышып эшләйем тиһәң, һаман да байығырға теләйһеңме, тинеләр, егәрле кешене кулакка оҡшаған, тип мыҫҡыл итеп, бер-береһен артҡа һөйрәнеләр. Тәртиплерәк, әҙәплерәк йөрөһәң, бына, мулла инде, мулла, тип көлдөләр. Нишләптер кем яман, эскесе, һуҡыр, бөкрө, ата ялҡау — шулар алға сығып киткән заман булды. Етешерәк кеше үҙенән-үҙе насарҙар рәтенә ҡуйылыр ине. Шулай ҙа мин ҡартатай-ҡартәсәйҙәр күңелгә һалғанды иҫләргә, шуларға тоғро ҡалырға тырыштым.

## Бүреләә колхоз ойоштороу

Һин нишләп ошо ваҡиғалар тураһында беҙгә элек үк һөйләмәнең, тип һорау бирҙеләр минә балаларым. Минең шикелле кулак балалары тип кәмһенеп үҫмәһендәр, күңелдәре ҡатмаһын, бер яғы китек булмаһын, тип уйлап, һөйләмәнем мин күп нәмәне. Кулак — хаҡлы рәүештә юҡ ителгән синыф тип ышанып үҫте беҙҙән һуңғы быуындар.

«Йәшлек» гәзитенең 2012 йылдың 13 ғинуарында донъя күргән һанында Рәшит Кәлимуллиндың «Хеҙмәткә дан йыр-

лаnык та ул..» тигән мәкаләһендә «Фани донъяға бәхет өсөн яралган күпме быуынды ауыр яҙмышҡа дусар итеп, көсөн һурып, хәйерселектә интектерә-интектерә, баҡыйлыҡҡа оҙатып китте ул колхоз», — тип яҙҙы. Совет власының 70 йыл йәшәүенең сере — уның таяныр нигеҙе барлығында; ә нигеҙе 2 таштан ғибәрәт — ул халыҡтың бер ҡатлылығы һәм ҡурҡыу хисе, ти Р. Кәлимуллин. «Бер ҡатлы булмаған ҡатлам НЭП заманында күтәрелә башлағас, уны социаль ҡатлам булараҡ юҡҡа сығаралар» (*Р.К.*) — кулактар Себергә оҙатыла, ҡалалағыларҙың мөлкәте тартып алына. «Матди яҡтан хәлле кешеләр менән идара итеү ҡыйыныраҡтыр ахыры» (*Р.К.*). Ҡалғандары ҡайҙа барһын. Яңы тормош төҙөү менән арбап, лозунгылар менән алдап, ҡоро энтузиазм менән кешене ҡол урынына әйләнә екте совет власы. Власть тарафынан ситкә тибәрелгәндәрҙең аянысла яҙмышы барыһының да күҙ алдында торҙо, ҡурҡыуға һалды.

«Ә бит хосуси милеккә ынтылышты барыбер бөтөрә алманы! Шуны белеп, төрлө рәхимһеҙ сикләүҙәр менән ыҙалатты халыҡты. Һәр төрлө сикләү, мәжбүр итеүҙәр юҡҡа сығарҙы инде колхоз ҡоролошон. Кеше эт урынында булды, кешеләрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡуйыуҙа совет власы оҫта етәксе ролен уйнаны», тип билдәләй Р. Кәлимуллин.

Кулак балаһы булараҡ үҙем күргән йәберләү-кәмһетеләүҙәр, кешеләрҙең башҡа һыймаҫлыҡ эштәре, әсәй-картәсәйҙәрҙең сеңләп илауҙары, ас балаларҙың ыҙаланып үлеүе, ҡартатай, атайҙың язалы үлеме — быларҙың барыһы ла мәңге онотолмаҫлыҡ булып хәтерҙә уйылып ҡалған. Етеш йәшәгәне, бөтмөр, егәрле булғаны өсөн күптәрҙе ҡаты язаға тартты совет власы! Ә беҙҙең ата-бабалар, һис шикһеҙ, ошондай кешеләр рәтендә торған, булмышы менән яңы властка дуҫ була алмағандыр. Йәнгол ҡартатай улы Ҡотлогилдегә арыу уҡ мал ҡалдырған. Атайым һөйләүе буйынса, тағы ла ишәйгән малдың иҫәбе-һанын белер өсөн ҙур ғына туғайға ҡыуып төшөргәндәр. Әгәр ҙә туғай буйы тулһа, йылҡы теүәл булған. Йәиһә Һаҡмарға һуғарырға тип ҡыуаланған аттарҙың тәүгеһе һыуға барып еткәндә һуңғыһы һарайҙан сығып килә икән, тимәк, мал теүәл. Ҡартатайҙарҙың ялсылары булманы, бөтә эште үҙ костәре менән башҡара торғайнылар, бик егәр-

ле, эшлекле кешеләр булдылар. Ә шулай ҙа «кулак» мөһөрө баҫылды барыһына ла.

«Кулак» тигән һүҙҙең мәғәнәһе бик фәһемле. Иртәнсәк иртәрәк торор өсөн, иҙрәп йоҡлап китмәйем тип, баш аҫтына яҫтыҡ һалмай, үҙ йоҙроғон яҫтап йоҡлаған тырыш кешегә әйткәндәр, имеш, кулак, тип.

1930 йылда баҫылып сыҡкан кулак хужалыҡтары билдәһе итеп түбәндәгеләр һанала:

– тирмәне, ярма ярҙырыу, май бешеү һәм механик двигателдәр ҡуллынылған башҡа ҡоралдар булыу;

– ҡорамалландырылған бинаны йәшәү өсөн йәки предприятиеға биреп тороу;

– сауҙа эше, ростовщиклыҡ, коммерцияла аралашлыҡ менән шөғөлләнеү.

Әгәр хужалыҡта юғарыла күрһәтелгән билдәләрҙең береһе генә булһа ла, һәм ул кеше башына йылына 300 һум килем алһа, ул кулак булып иҫәпләнгән. Колхозлашыу ваҡытында 3–4% кулак категорияһына инеүселәр урынына 15% крәҫтиән раскулачиваниеға эләгә, еренән айырыла, буш эшләүсе көскә әүерелә. Коллективлаштырыу ифрат ҙур ҡорбандар иҫәбенә тамамлана (И. Казакбаев. Дипломная работа на тему «История рода Казакбаевых», БГУ, 1995).

Беҙҙең ата-бабалар «кулак» категорияһына тап килгәнме икән; уларҙың ни тиклем ҙур фажиғәгә дусар ителеүен киләсәктәге ниндәй әкиәттәгесә тормош менән аҡлап булғандыр, белмәйем. Тик совет власының терәге – ҡурҡыу һәм бер ҡатлылыҡ – ауылдаштарҙы ҡот осҡос һүрәткә инергә мәжбүр итеүе беҙҙең күҙ алдында үтте. Колхоз тигән яңы нәмә ябай кешене ҡырҡҡа түкмәстерҙе.

20-се йылдар аҙағында Һаҡмар Бүреһендә лә колхоз ҡороп ебәрҙеләр. Кешеләрҙе илатып, һыйырын, атын, киләттәрен тартып алып, уртаҡ иттеләр. Беҙҙең ҡарағай келәт бар ине, шуны алып китеп, колхозға ҡуйҙылар. Кулактарҙы Себергә һөрөп бөттөләр, муллаларҙы таланылар – рәхәтләнеп йәшәргә лә йәшәргә! Бына ошонда башланды ла инде колхозсыларҙың елкәһенә бер төртөп, артына бер тибеп, эшкә ҡушыу! Колхозда көн-төн эшләргә кәрәк, аслыҡ-яланғаслыҡ, ашарға юҡ. Утынға барайым тиһә, бригадирға әйтер кәрәк. Бер бар-

ғында ғына булмай, 2—3 тапҡыр бараһың, бер ағас та утын юҡ, тип инәлоһең. Шунан бригадир көн бирә. Колхоз атын тотайым тиһә — йүгәне юҡ, йүгәне табылһа — ҡамыты юҡ, ҡамыты булһа — ыңғырсағы юҡ, ыңғырсағы табылһа — дуғаһы юҡ. Бөтәһен йыйып алһа — сана юҡ, санаһын тапһа — тортоһе юҡ. Шулай итеп эт күрмәгәнде күреп, сығып китәһең ҡыш көнө һыуыҡта ағас ҡырҡырға. Ә йәй көнө ҡайҙа инде ул утын әҙерләү! Үҙено йәй көнө утын ҡырҡты, тип Себергә ебәреүҙәре бар, кеше шунан ҡурҡты.

Кешеләр, аптырағас, былай булмай, тип кем йүгән ишеп, кем дуға бөгөп, йүнен таба башлағайны, тыйҙылар, капиталистик рухты ҡыуаһығыҙ, тинеләр, кулак булаһығыҙ, тип ҡурҡыттылар. Беҙҙең башҡортта быйма баҫыу булманы, ә урыҫтарға ул шөғөлдө тыйҙылар, тире эшкәртеүселәрҙе төрмәгә тыҡтылар. Кеше үҙендә йүгән, ҡамыт, дуға тота алманы. Атамдың бер матур өйөңке дуғаһы булған, ҡартәсәй шуны йыйып ҡуйған икән, Суфиян тигән бабай әрләшеп, талашып, шул дуғаны тартып алып сығып китқән.

Колхозлаштырыуҙың тәүге йылдарында ат бөттө. «Ә, был теге байҙың, был байҙың аты», — тип үлтереп бөттөләр.

Минең иҫләүемсә, атайымдың 2 айғыры бар ине, береһе ерән, икенсеһе һоро. Тағы ҡара бейәләре, тайы ла булды. Шул ерән айғырҙары шул тиклем шәп була торғайны. Атай менән Әптрәхмән ағай икәүләп ултыралар; айғыр ҡапҡанан пуля һымаҡ атылып сығып китә; кәртә аҫтында, ҡырҙа йөрөп килеп, шунан әҙерәк атты тынысландырып, сығып китерҙәр ине юлға. Ерән айғыр менән һоро айғырҙы фургондарға егеп, атайҙарҙы һөргөнгә алып киттеләр. Ул айғырҙы аҙаҡтан Бәкәтәрҙән НКВД кешеләре менеп йөрөгән. Ҡара бейәне бында һуйып ашанылар. Ҡола ат ҡалды, йәш тай. Уны ауылдың Заһит тигән таҙына бирҙеләр. Бер ваҡыт Заһит Аҡһыйыр ауылына Ҡолаҡайҙы егеп барғайны, абыстай ҡартәсәйҙәр мине ултыртып ебәрҙеләр. Ҡайтып еткәнсе, миңә ҡарышып, туҡманы Заһит Ҡолаҡайҙы. Бахыр малҡай сананың башын тибеп, емереп бөттө.

Мәрхәмәтле кем булғандыр, атты Аҡһыйырға ҡартатайға биреп ебәргәндәр. Тик унда ла Вәлиев Ишем тигән ямандары көн һайын Ҡолаҡайҙы менеп ала ла, эсеп, урам буйлап бер туҡтауһыҙ сабып йөрөй икән. Ишем көн күрһәтмәй, тип атты

кире Бүрегә ебәргәндәр. Был юлы Хәмзә исемле ат ҡарауысы язаһына эләккән ул. Туҡмай-туҡмай ҙа, тибешһә, артына һәнәк ҡуйып, шунда типтерә торған булған, шулайтып язалаған «кулак» атын Хәмзә. Хәмзә ҡарт Сорөккә сығып урыҫтарҙан тартырға, эсергә, урлашырға өйрәнгән бер яман кеше булды. Төндә кешеләр уның аҡырынған иҫерек тауышынан уянып китәләр ине. Көнө буйы йоҡлай, төндә «һунарға» сыға. Ауылда ул урламаған өй ҡалмағандыр. Һуңғы ваҡытта атайымды ялыу итеп ҡуйыусы ана шул Хәмзә ҡарт булды.

Аҡһыйыр ауылында Ишкилдин Әхмәтғәлим тигән бер ярлы кеше булды. Уга халыҡ Һөртөй тигән ҡушамат бирҙе. Колхоз ойошторолғас, иң ышаныслы кеше тип, Һөртөйҙө бригадир итеп Аҡъюлға ебәрҙеләр. Иң беренсе эше — ҡул тирмәндәрен вата башлаған. Имеш, ҡул тирмәндәре булһа, колхоздың ашлығын урлайҙар, шуны он итеп тартып алалар, икмәкле булалар. Өй беренсә йөрөп, таш тирмәндәрҙе вата-емерә икән был. Уга ҡарата таҡмаҡ сығарҙылар:

*Яңы тормошто төҙәткән,*
*Иҫке тормошто ҡыйратҡан,*
*Аҡъюлдарҙың бригаты —*
*Алтмыш тирмәнде ватҡан.*

Ғәлиәхмәт менән Ботороз араһында Ҡорған тигән бәләкәс урыҫ ауылы бар ине. Шунда барып, кеше ҡурҡытып, тамаҡ туйҙырырға өйрәнеп алған Һөртөй. Уга ошондай таҡмаҡ сыҡты:

*Һөртөй килә Ҡорғандан,*
*Борола-борола юлдарҙан,*
*Ауыҙынан төтөн борлай*
*Һөртөй — хоҙай орғандан.*

*Һөртөй менән һор(о) ҡашҡа*
*Йөрөмәһә, ор башҡа,*
*Һис берәүгә оҡшамаған,*
*Һөртөй үҙе бер башҡа.*

Аҡъюлда күпме эшләгәндер, кире Аҡһыйырға ҡайтты. Ул үлгәндә, мин Бүреләә инем. Астан үлгән, тип һөйләнеләр. Үҙе

ишләп апарлыҡ бер ниндәй һөнәре лә, белеме лә юҡ ине, шуңа апарға байҙар бөткән. Совет власы бөтә кеше тигеҙ булһын тип, байҙар, муллаларҙы ҡырҙы, бөтәһе лә бер тигеҙ — ярлы ғына ҡалды, ул үҙе ас ине.

1934 йылда Аҡъюл сельсоветына Дәүләтшин тигән бер татар кешеһен председатель итеп ҡуйҙылар. Шул Дәүләтшин Аҡъюл сельсоветын «тотош культура»ға күсерҙе. Мунса шикелле бәләкәй, баштары һалам, ҡабыҡ менән ябылған өйҙәрҙә урындыҡтарҙы алып ташлатты, өйҙө яртыға бүлдерҙе. Таҡта булмағас, ҡайһы кеше ағасты ярып, һайғауҙы юнып, өйөн икегә бүлде. Культуралы кеше карауатта ятырға тейеш, тип, председатель фарман сығаргас, ағастан алайтып-былайтып мөйөшкә карауат эшләп ҡуйҙылар. Уның менән генә культураға күсеү бөтмәне. Дәүләтшин ҡайҙандыр алып килеп йорт ҡуяны ебәрҙе. Барып инһәң, карауат аҫтында ҡуян йөрөр ине һаҫып. Культуралы булам тиһәң, өҫтәле лә кәрәк, ултырғысы ла.

*Уфаларға барыр өсөн*
*Автомобиль ярыша (ла)*
*Культураға күсер өсөн*
*Ударниктар ярыша, —*

тигән таҡмаҡ ҡалды халыҡта.

Эште үтә боҙоп ташлағас, кешеләрҙе йәберләгән өсөн дә, Дәүләтшинды хөкөмгә тарттырҙылар.

Иҫләүемсә, 1933 йылда аттар бөткән ине. Бөтә эшкә үгеҙ егә башланылар. Атты председатель генә, ҡайһы саҡ бригадир ғына менеп йөрөнө. Бер аҙҙан һыйыр егеү ҙә модаға инеп китте. Кешенең яңғыҙ һыйырын да кослэп колхозга ер тырматырға алдылар.

Кейем юҡлыҡ үҙәккә үтте. Аяғыңа сабата кейһәң, өс көндән тишелә. Өҫкә кейергә кейем юҡ. Кешеләр һағыҙ ҡайнатып һатып, ҡаланан алама йыйғыстан иҫке кейем алып ҡайта торғайнылар. Машинистың майлы комбинезонын алып ҡайтып, колдә ҡайнаталар, уныһы тетелеп китеп, ямаулыҡҡа ғына эшкинә. Кешенең кейгән әйберен бер нәмәгә лә оҡшатып булмай торғайны, көпө инде. Кеше эшләне инде, эшләне.

Ас-ялангас булһа ла эшләне, яҡшы тормошҡа өмөтон өҙмәне. Икмәкте ураҡ ваҡытында ғына ашап ҡала торғайнылар. Ураҡ менән иген урыусы ҡатындар бер-ике килолай башаҡты ыуып, сепрәккә төрәләр ҙә билдәренә эстән быуып алып ҡайталар ине. Ҡул тирмәнендә тарта һалып, ошә, өйрә бешереп ашаталар ғаиләһенә. Әгәр бригадирға тотолһаң — төрмә! Шуға ҡул тирмәндәрен, тауышы ишетелмәһен тип, мөгәрәпко төшөрөп, он тартҡан ҡатындар ҙа булды. Колхоздан көнөнә килолап ҡына иген ҡалдығы бирелә торғайны. Председатель үҙе генә яҙып бирә алды. Шуны әсәйҙәр нисектер ашамлыҡҡа әйләндерәләр ине.

Ҙур итеп һалым һалдылар (һуғышҡа тиклем дә, унан һуң да). Бер һыйырға 8 кг май, 1 һарыҡ тиреһе, йөҙ йомортҡа. Һарығың, тауығың бармы — был бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмай, түләргә тейешһең — вәссәләм шуның менән!

Урыҫтарҙың Библияһында яҙылған: «Гад гада пожрёт». Ҡөрьәндә «Залим көндә барып етмәҫ, улар донъялыҡта бер-береһен ашар», — тип әйтелә. Шул процесс башланды беҙҙә лә — кешеләр бер-береһенә ялыу яҙа башланылар, үс алдылар, сөнки ул ваҡытта ялыу булдымы — төрмәгә ала ла китә торғайнылар. Башаҡ сүпләгәндә, Ғәйнекәй еңгәй Заһит ҡарттың ағаһы Кәли менән һуғышып китеп, мине туҡманы тип өҫтөнән ялыу яҙған Кәлиҙе Ҡыуандыҡ районының үҙәге Бәкәтәргә алып барып бикләгәндәр. Кәли милицияларға йәйен сәнсеп алып килеп, ҡотолоп ҡайтҡан.

Ферма модиренә, ферманың майын ашап, ҡотораһың тип, председателгә, үҙеңдекеләргә утынға үгеҙ бирҙең, ә минә һаман юҡ, тип өҫтәренән ялыу яҙалар ине. Ялыу тигәс, Заһит ҡарт менән бәйле бер хәл иҫкә төшә. Атайҙарҙы Себергә ебәргәс, көтөүҙә һарыҡтары тороп ҡалған (Батый әбей, Фазыл, Шәкир ҡарамағында). Бесәндә ятҡанда, әйҙә, бер һарығын һуйып ашайыҡ кулактарҙың, тип һөйләшкәндәр ҙә йыҡҡандар бер һарыҡты. Һуйғас, был Шәкирйәндеке икәне беленгән. Инле ҡолағын ҡырҡа һалып алғандар ҙа, бер кемгә лә өндәшмәгәндәр. Заһит был турала белгән. Һарыҡ бешкән, кешеләр ашарға ултырған, Заһит ултырмай, ти. «Осаһын (майлы ҡойроҡ) бирмәһәгеҙ, ялыу бирәм», — тип ҡурҡыта икән быларҙы. Кәли тигән кеше Заһитты туҡмай, уныһы һаман, әйтәм,

тип пыкына, ти, үңәсенә балта терәй, башыңды өҙә сабам, тип һыҡкыра икән Кәли, ә тегенеһе, барыбер әйтәм, тип ҡаршылаша. Шунан Кәли алып барып, һарыҡтың осаһын битенә бәргән; бөтә бите май булып, Заһит бер үҙе ҡарама төбөндә осаны ашап ултыра икән, ҡалған кеше бергә ит ашаған. Ауыл яғынан килгән Сәлим ағай: «Быға оса тотторол ҡуйғандар, ата-бабаһы күрмәгәнен күреп ултыра икән», — тип көлгән.

Шулайтып, Сталин осоронда шымсылар күбәйҙе. Кеше нәмә һөйләй икән, колхозды яманламаймы икән, милицияға нәмә тип ошаҡларға икән, тип ашҡынды күптәр. Хөсәйен исемле бер кеше: «Уй, бынау бер ямғыры ла яуманы бит, исмаһам балалар ял итер ине», — тип бесән ваҡытында әйтеп һалған абайһыҙҙан. Ул совет власын яратмай, ямғыр яуҙырып, колхоз бесәненең серегәнен ярата, тигән ошаҡ буйынса Хөсәйенде алып киттеләр. Үрнәктә Байдәүләт тигән кеше милицияға һөйләгән: «Ат ебәреп, кискә ҡайтып килә инем, фәлән-фәлән ҡарттар тыштa сәй эсеп ултырғанда Сталинды яманлап һөйләнеләр». Шул ҡарттарҙың өсөһөн дә ябып ҡуйҙылар.

Хәбәр тыңлап, кеше ошаҡлап йөрөүселәрҙән башҡа, эскеселәр күбәйә башланы һуғыш алдынан. Кейергә юҡ, ашап туймаған, ләкин иҫереп ята. Эсеп ултырыусыларҙың закускаһы бәрәү генә — ҡаты ҡорот. Ҡыҙып алһалар, маҡтаналар, мул ултырыу ошо була инде, тип ебәрәләр. Байҙарҙан үс алынды, муллалар юҡ, нишләп эсәһең, тигән кеше юҡ. Ярлының тантанаһы тип әйтергәме икән был күренеште?

Кеше үҙенең өйөндә лә хужа булмаҫҡа тейеш ине ул заманда. Колхоздың малына бесән етмәгәндә, бер әмәл уйлап таптылар. Элек кеше өйөнөң башын һалам йәки бесән менән яба ине. Яҙ етһә, колхоз малын ҡотҡарырға кәрәк тип, өйҙәрҙең ҡыйығын, һинән һорап та тормай, шатырлап менеп китеп, ҡутарып та төшөрәләр. «Алма!», — тип әйтергә хаҡың юҡ. «Ҡыйыҡһыҙ ҙа йәшәрһегеҙ, нәмә булһын һеҙгә!», — тип етем бисә-сәсәне, балаларҙы күҙ йәшенә батырып китәләр. О ҡыйыҡты киренән япмаһаң, ямғыр үтә. Йәнтеш ауылы кешеләре һуғышҡа тиклем дә, унан һуң да ҡыйыҡ япманылар. Өйөндә ҡыуыш ҡороп ултырһа ултырҙылар — япманылар; был хәл Хрущев заманына тиклем дауам итте.

Һуғыштан алдағы йыл беҙ Фәхретдин (Рамазандарҙың ағаһы) менән икәүләп колхоз малын баға инек. Бер ваҡыт беҙгә задание ҡуйҙылар – бөтә кешенең ҡыйығын ҡуптарып алып бөттөк, ә Фәйзрахман ҡарттың (Бүләкбикәнең ҡартатаһы) бер саналай бесәне бар ти, шуны алып килергә! Ҡарт – енәйәтсе булып сыға! Беҙ Фәхретдин менән үгеҙ егеп, ҡартҡа киттек. Ҡапҡа төбөнә барғайныҡ, Фәйзрахман ҡарт һәнәк менән арҡыры тора – индермәйем, ти. Бер аҙым эшләһәгеҙ, үтә сәнсәм, ти. Мин йәшәремде йәшәгәнмен, үлһәм дә үкенмәйем, ләкин бесәнемде бирмәйем, тип ҡарт үткәрмәне беҙҙе. Беҙ кире әйләндек.

Мин һуғышҡа киткәс, әсәйем янғыҙ ҡалған абыстай ҡартәсәмде күсереп алып килгән Бүрегә, әлеге Хәким ағайҙың бәләкәй өйөндә (уны Шәкир һалған ине) торғандар. Фазыл ағай һуғышта, Фатима ҡартәсәй күптән гүр эйәһе булған инде. Шул өйҙө Сәлихйән еҙнәй, беҙҙән һорамай, Байназар ауылына һатҡан. Бер заман өйҙө һүтеп алып китергә тип бер килке ылау килеп төшкән. Беҙҙең ауыл кешеләре, өйҙө бирмәй, тегеләрҙе ҡыуып ебәргән. Һуғыш һуңынан Шәкир килеп, талашып, әсәйҙәрҙән бер һыйыр алып китте шул өй өсөн. Абыстай ҡартәсәй Бүрегә килгәнен былай тип һөйләй торғайны: «Килдем, камил баҫып алғандар әсәңде. Бер һүҙ әйтергә лә ҡурҡып тора. Күрше Ғилмекәй инә лә, һораһа, һорай, һорамаһа, юҡ, әйберҙе тотоп сыға ла китә. Әсәң, кире алып кил, тип әйтергә ҡурҡа. Юҡ, улай булмай, үҙ донъябыҙға үҙебеҙ хужа булайыҡ, типем, Шәкирйәндәрҙең ғүмер буйы беҙһеҙ хәле булманы, тип яйлап әсәңде ныгыраҡ булырға өйрәттем».

Һуғыш ваҡытында әсәй колхоздың баҡсаһында эшләгән. Күп итеп кәбеҫтә сәскәндәр, картуф ултыртҡандар. Баҡса эшен элек-электән белгәс, әсәйҙе төркөм башлығы итеп ҡуйғандар. Ибраһим Шәрипов (Исхаҡ ҡарттың ағаһы) ул ваҡытта ауылда бригадир булған. Шул ир, Һәҙиә исемле ат ҡараусы булып эшләүсе ҡатынға өйләнгәс, әсәмде шул урынға ҡуймаҡ булған. Әсәм кәүҙәле кеше ине, атҡа менеп йөрөй алмайым, тип ҡыйынһынып, баш тартҡан. Бригадир, әлеге Себергә һөрәм, тип ҡурҡытҡас, Юнысова Сәбилә апай менән икәүләп ат ҡарағандар. Еңел һөйәкле Сәбилә апай: «Ат менеп, тауҙан тауға ат ҡыуа торғайным. Шәмсибаһар еңгәй таяҡ тотоп, йәйәү

...ороно. Алай ҙа һин бар, Сәбилә, ҡуйсы, ҡуйсы, еләһең дә ...һың. Ә мин Мөхәмәтйонемә бәйет сығарҙым шул ара..., — ти ҙә миңә бәйетен һөйләй», — тип Шәһизә һеңлеһенең ҡыҙы Бүләкбикәгә һөйләгән. Ә һеңлеһе Шәһизә, Һабыр ...советынан фронтовик Билалов Ғәлиулланың ҡатыны, ул ...ҡытта ус бойҙай өсөн төрмәлә ултырған.

Картосойҙең тағы бер һөйләгән тарихын иҫкә төшөрәм, ...сөнки ул тарихы колхозсының ҡот осҡос тормошон күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирә.

Минең мулла ҡартатайымдың өс ҡустыһы булған: Әхмәтшәрифулла (Сурай ауылы муллаһы), Шафиҡ (Аҡсура ауылы муллаһы) һәм Шәкир. Шәкир мулланың өс улы һуғышта һәләк булған, Мәсһүрә, Гөлфирә, Миңниса тигән ҡыҙҙары менән тороп ҡалған. Ҡарт бағымсы булған, оҫкөрөп имләгән кешеләрҙе. Шуның өсөн дә, мулла булған өсөн дә ҡартты төрмәгә ултыртып ҡуйғандар. Ҡатыны Миңзифа инәй, ураҡта йөрөгән ваҡытта бер-ике баш көнбағышты һуғып, ике кеҫәһән тултырып ҡайтып килгән ваҡытта Аҡсура бригадиры Кинйә (бөкрө Кинйә) тотоп алып, өс йылға төрмәгә ултыртып ҡуйғандар. Өс ҡыҙ бала яңғыҙ тороп ҡалған. Нисек үлмәй ҡалғандарҙыр, уныһын белмәйем. Тимәк, ул ваҡытта ла, һирәк булһа ла, ...яҡшы кеше булған.

Миңзифа инәй ултырған төрмәнең үҙ хужалығы булған, 5–6 һыйыры ла бар икән. Инәйҙе һауынсы итеп ҡуйғандар. Бер заман һимереп киттем, тип һөйләгән инәй, бабайға хат яҙғым килә, ә үҙем яҙа белмәйем. Шунан бер кешенән хат яҙҙырған: «Бабай, төрмәнән сыҡ та бында, минең янға, йөшәргә кил. Бында, төрмәлә, шул хәтлем рәхәт». Таҡмағын да яҙҙырып ҡуйған, ти:

*Ағиҙелгә ағып төшә*
*Тапуриндың йылғаһы*
*Йәшәһен Совет власы*
*Рәхәт уның донъяһы.*

Һуғыш тамамланды; халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу тигән лозунг сыҡты. Ә кеше һаман да ас-яланғас, бер тин аҡса табырлыҡ мөмкинлеге юҡ. Рәсәй халҡын һалым менән

нытк ҡыҫтылар шул заманда. Ике замоклы ҙур портфель тотҡан һалым агенттарының килеүенән халыҡ ҙер ҡалтырап ҡурҡып торор ине. Оҙон брезент плащ, итек кейгәндәр, башта бейек фуражка. Ауыл кешеһе: «Сабата ямауы ла юҡ, ҡалай һәйбәт кейемдәре», — тип ҡурҡып һөйләйҙәр ине. Кипкән сабата, мең ямалған фуфайкамы-көпөмө кейгән ауыл кешеләре алдында агенттар икенсе донъянан килгән кешеләр һымаҡ тойола торғайнылар. Боронғо шикелле өйөнә инеп, бөтә нәмәне һыпырып сығып китмәйҙәр, ғәҙел, мәрхәмәтле булып ҡыланалар. Тәүҙә киҫәтәбеҙ, шунан опись яһайбыҙ, тип иҫкәртәләр. Кешенең опискә алырлыҡ әйбере булдымы икән ул заманда? Иң ҡәҙерлеһе — әллә ҡасандан ҡалған ҡаҙан менән самауыр, унан мең ямаулы кергә ҡатҡан юрған, тышһыҙ, төҫө лә айырылмаған 1—2 яҫтыҡ, Николай батша ваҡытынан ҡалған кейеҙ. Әлеге норма — 8 кг май, 100 йомортҡа, 50 кг ит. Заем, үҙ-ара һалым тигән нәмә килеп сыҡты. Етмәһә, һарык һөтөнән эшләгән брынза тапшырырга ҡушалар ине. Брынзаң булмаһа, май бирәһең, өҫтәп.

Беҙҙә картуф булды, һөт, ҡатыҡ бар ине, шуғалырмы һалым агенттары күберәк беҙгә туҡтай торғайны. Тамаҡ туйҙыра, шунан кешеләрҙе саҡыртып ала. Бер агенттың Бүре ауылынан Шәмсиә еңгәй менән Фәрхиямал еңгәйҙе саҡыртҡанын асыҡ ҡына иҫләйем. Шәмсиә еңгәйҙең 2 ҡыҙы ҡулында, ире Муса һуғышта һәләк булған. Фәрхи еңгәйҙең Ғилманы Ленинград фронтында ятып ҡалған, улы Сәлмән Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт итә; еңгәйҙең ҡулында 3—4 бала. Еңгәйҙәр ҡабаланышып килделәр, өҫтәренә ҡарарлыҡ түгел, бахырҙарҙың: мең ямаулы көпө, ҡышҡы һыуыҡ көндә тишек сабатанан бармаҡтары күренеп тора. Баштарына алама урағандар, хәҙерге заман кешеһе күрһә, ҡурҡып ҡасыр ине. Шул ирҙәре һуғыш яланында ятып ҡалған бисараларҙан һалым түләүҙе даулайҙар, опись яһау менән ҡурҡыталар, төрмә менән янайҙар.

Минең тиңдәшем, Ғәйнекәй еңгәй менән Наҙарғолов Йәрмохәмәттең улдары Ғөбәй фронттан II төркөм инвалиды булып, тайыш ҡайтты, туберкулез менән ауырыны, етмәһә. Шуға ҡарамай, бригадир Хафиз уны ла эшкә ҡыуҙы. «Алай ҙа

шиналидмын, һалымдан ҡотолдом», – тигән Ғөбәйҙең һүҙҙәре үпә ҡыҙғаныу ҙа, власҡа нәфрәт тә уята.

Нисектер һыйырҙы тартып алманылар, 50 кг ит һалымы өсөн быҙауын бирҙе кеше. Аҡназарҙан Килдебаев Иҙрис быҙау араһында тыуып, быҙау көткән, унан һыйыр көтөүсеһе итеп «урлотелгән» Бибиһандың туғаны ине, кәләше Файза ла үк шикелле мохтаж йәшәгән ғаиләнән булды. Һалым түләй алмай киҫәтеү алгас, нисек итеп һалым түләргә тип аптырашҡаннар. Иҙрис баяғы тәүгә быҙауларга тейеш танаһын үҙе етәкләп, арттан ҡатыны ҡыуып, һалым агенты Ямалетдиновҡа алып килгәндәр, сөнки башҡа бирер нәмәһе булмаған. Аяҡта ситек иуһыҙ сабата, бармаҡтар күгәрешеп күренеп тора. «Кешенең иңгыҙ һыйырын тартып алырға тигән закон юҡ», – тигән Ямалетдинов. Колхоз председателе «30 меңсе» Ғүмәр Нагаев быларҙың һыйырын алып ҡалырға ярҙам иткән. Иҙрис Нагаевты бик ихтирам итте. «Әллә колхоз аша шул һалымды яҙҙырҙы инде, һыйырым ҡалды», – тип Иҙрис иҫкә ала торғайны председателде, – Нагаев атҡа мендерҙе, ат менән көтөү көттом», – тип үҙен даланлы һананы... Бер ваҡыт, ашарга булмагас, Нагаевҡа барғайным, биш кило иген ҡалдығы яҙҙы ла бирҙе, тип үлгәнсә һөйләне Иҙрис.

Ябай кеше ауылдағы бәләкәй генә булһа ла хужалар ҡулына ҡарап ҡала бит инде – бригадир, колхоз председателе, ауыл советы рәйесе, ферма мөдире. Миңә күп етәкселәрҙе күрергә тура килде, кешеләрҙең һөйләгәне лә иҫемдә.

Иң беренсе, һуғыш ваҡытында колхоз председателе булып эшләгән Торомтаев Мәүләмбирҙене мин тик яҡшы яҡтан ғына беләм, иң аҡыллы председатель ул булды, тип уйлайым. Ә бына Хәммәт тигәне шул хәтлем наҙан булды. Эсеп алһа: «Мин хоҙай!», – тип ҡысҡырып йөрөй торғайны. Тарихта Муса пәйғәмбәр заманында Фирғәүен, мин хоҙай, тигән, Ибраһим пәйғәмбәр ваҡытында Намрут, мин хоҙай, тигән, улар бөйөк батшалар. Ә Хәммәт ауыл кешеһенә «батша» булып йөрөнө инде, хөкөмө үҙ ҡулында булды – теләһә, ярлыҡаны, теләһә, яҡланы. Бер ваҡыт Сабира еңгәй ауырып китте. Таң яҡтырмаҫ борон председатель өй беренсә сабып, тәҙрә һуғып, кешене уятып сыҡһа ла, еңгәй эшкә бара алмаған. Бер һабандың эшһеҙ тороуын күреп ярһыған Хәммәт председатель, өйгә

атылып инеп, башын бәйләп ятҡан еңгәйҙе урынынан һөйрәп торғоҙоп, ишек төбөнә бырағтырҙы, башы «дыңҡ» итеп ҡалды. Ҡысҡырып илай-илай сығып йүгергән еңгәй йәһәтләп үгеҙен етәкләп, һабанға китте. «Еңгәй, ҡалай итеп йөрөнөң?», — тим кискеһен. «Әллә, ҡурҡышымдан ауырыуым бөттө лә ҡуйҙы», — тип аптыраны Сабира еңгәй.

Үҙебеҙҙең ауыл бригадиры Хафизды ла әйтеп үтмәй булмай. Аяуһыҙ кеше булды, ғүмер буйы кешеләргә үс тотто. Бик ярлы тоҡомдан ине, ауылдың иң ярлы Хөсәйен ҡарттың улы. Һуғыштан һуң ул бригадир булды.

Ҡар иреп бөткән ыңғайға колхозсыларҙы һыртҡа сәсеүгә сығаралар ине. Шунда ҡыуыш ҡороп, һалам менән ябып, иҫкемоҫҡо менән ҡоршап, үҙебеҙгә йоҡлар урын әҙерләйбеҙ. Үҙәктәрҙә әле ҡар ҙа иреп бөтмәгән була, йыш ҡына рашҡы (ҡар ҡатыш ямғыр) яуа. Бригадир таң һарыһы беленер-беленмәҫ торғоҙа һине. Торағыһың. Сабаталар ҡатып ҡалған, уны таяҡ менән һуғып, ҡатҡан балсығын ырғытаһың да һаламды йолҡоп алып, олтораҡ итеп һалып алаһың. Кискә һыуланып ҡайтҡан силгауҙы киптерер урын булмағас, аҫҡа түшәп һала торғайныҡ, тәнебеҙҙең йылыһы менән киптерәбеҙ, имеш. Тышта ҡараңғы, үгеҙҙәрҙе таба алмай йүгергеләйһең. Яҡтырғансы уларҙы табып, егеп алып, ҡояш ҡалҡып, сәғәт 10-дар тирәһе булғансы һөрәһең. Шунан малҡайҙарҙы ял иттереп, ашатып, үҙебеҙ ҙә ашап, сәғәт ярымдан кире эшкә китәһең. Төшкө 1—2-гә тиклем эшләйһең, тағы әҙерәк ял итәһең дә, ҡараңғы төшкәнсә тырматаһың.

Хәҙер ер ҡоромайынса, сәстермәйҙәр, ә ул ваҡытта орлоҡто батҡаҡ ер өҫтөнә һиптерәләр, тырматҡан аттар, сыға алмай, батып ята. Ер ҡата ла ҡала, игене лә шытып сыҡмай, гел ҡый үләне баҫа ла ҡуя. Аптырарға ла түгел инде — иген сәсеүҙең рәтен белгән кешеләрҙе Себергә ебәреп бөттөләр бит инде. Игенде ҡасан сәсергә, ҡасан эшкәртергә — был берәүҙе лә ҡыҙыҡһындырманы, шикелле. План, кем планды тиҙерәк үтәй, норма бирәме-юҡмы, ҡайһы бригада, ауыл, район алдынғы — ошолар «күрһәткес» булды. Ябыҡ үләкһә аттар, ығыш үгеҙҙәр менән ас колхозсылар ҡайһылайтып норма бирә икән? Кемдең кем икәнлеген асыҡлау өсөн ҡара менән ҡыҙыл таҡта уйлап таптылар: норма булдырған кешене — ҡыҙыл, тултыр-

мағанды — ҡара таҡтаға яҙҙылар. Ҡарага эләккән кеше ни эшләргә белмәй китер ине, намыҫлы ине ул ваҡытта кешеләр. Бер ваҡыт Заһиттың ҡустыһы Кәлиҙе ҡара таҡтаға яҙҙылар. Ғәрләнеп, Коли таҡтаны алып бырактырған. Быны ҙур енәйәт итеп, Колиҙе төрмәгә алып киттеләр тигәндә, ул таҡтаны йүнәтеп ҡуйып, хөкөмдән ҡотолоп ҡалды. Дөрөҫөн генә әйткәндә, колхозда эшләп йөрөүселәр төрмәләге тотҡондарға ҡарағанда бәхетлерәк булдымы икән? Азатлыҡ, туҡ тамаҡ, ботон кейем — бер нәмә лә булманы колхозда. Конвой тына юҡ ине эргәлә, ҡалғаны бер иш булды. Аҡһыйырҙан Әхмәтвәли тигән бер мәҙәк кеше булды. Ашнаҡсы Сәлмән ҡырҙа эшләүселәр арып ҡайтып килеүенә арыш өйрәһе бешереп, тигеҙләп бүлеп ҡуйған. Һәр кем үҙ сеүәтәһен таный, алып китеп ашай. Әхмәтвәли ҡарап торған да бер аҙ: «Был тағараҡтағы аш минә микән, эткә микән?!», — тигән. Лаҡап булып ҡалды шул һүҙе. Ҡол шикелле эшләүсегә ҡол үлмәҫлек кенә ашлыҡ бүленә ине.

## Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт итеү, һуғыштан ҡайтыу

Һуғыш алдынан 1941 йылдың мартында атай үлеп китте. Июндән, ботә ирҙәр һуғышҡа алынып бөткәс, эштең ауыры беҙгә ҡалды. 1942 йылдың августына тиклем мин колхозда эшләнем. Һуғыш башланғас, буласаҡ һалдаттарҙы 1—2 аҙнаға саҡыртып, ойрәттеләр. «Раз-дваға баҫырға йөрөйҙәр», тип аталды был. Әсәй Дәүләткилдин Рәхимйәндән: «Раз-дваға баҫып буламы, ҡәйнеш?», — тип һорай икән. «Раз-дваны булдырып була ла ул, рыфматикаһын булдырып булмай», — тип яуаплай ҡәйнеше. Һуғышҡа киткәндә әсәй бахыр: «Рәхимйән рыфматикаһы ҡыйын, ти торғайны, һиңә лә ҡыйын булырмы икән», — тип мине йәлләп тороп ҡалды. Мин һуғышҡа китә тип тә илауламаны, әллә минең иҫән-һау йөроп ҡайтырҙы алдан белдеме икән — әсәмдең шундай күрәҙәлек һәләте лә бар ине.

Армияла «рыфматика» менән ыҙалатманылар. Винтовкалағы 5 патронды һанай белдек. Аҡъярҙан беҙҙе, 50 егетте, Өфөгә Баҡтыбаев Ғәриф алып китте. Әптелмән олатайҙың улы Дәүләт менән бергә инек. Мәләкәстә (Ульяновск өлкәһе)

бер нисә ай өйрәткәндән һуң эшелон менән Алыҫ Көнсығышҡа оҙаттылар. Немец Волгаға килеп етте, Сталинградта эштәр насар ине, сөнки ул алынһа, японлар ҙа һөжүмгә күсергә тейеш инеләр, шуға Алыҫ Көнсығышта уға ҡаршы торорлоҡ көс тупланылар. Приморье крайында Хәрби-һауа көстәренең Тымыҡ океан флоты, 709-сы авиабаза, 66-сы линия-төҙөлөш элемтә ротаһы тип аталды минең хеҙмәт иткән урын, Владивостоктан алыҫ түгел Вторая речка тигән ҡасабала торҙоҡ. Владивостоктан Сихотэ-Алинь артылышы аша Каркалинкаға телефон линияһы һуҙҙыҡ. 1945 йылдың яҙынан японлар яғына линия тарта башланыҡ. Японияға һуғыш иғлан ителгәс, Кореяға индек, Хунчунь ҡалаһы иң тәүге азат ителгән урын булды. Унан Юки, Расин, Сейсен. Сейсен порты японлар өсөн мөһим ине, ҡаты һуғыш булды, райондан арыу уҡ кеше һәләк булды. Сейсенды юғалтҡас, Япония үҙенең капитуляцияһы тураһында белдерҙе. Һуғыш тураһында иҫләһәм, хоҙайға рәхмәт әйтәм: миңә һуғышта дошман менән күҙмә-күҙ осрашып, кеше йәнен ҡыйыуҙан азат итте.

Бында бер ай торғас, «Каталина» тигән диңгеҙ самолеты беҙҙе Вторая речкаға кире алып килеп төшөрҙө. Бында элемтә эштәре дауам итте. Эргәлә, Новонежинола, бомбардировщиктар базаһы булды. Беҙҙең частың командиры Челноков Алексей Дмитриевич, генерал Подольский ине. Һуғыш һуғыш инде ул, һин үлтермәһәң, һине үлтерелər. Һалдат кешенең йәшәгеһе килә — ата, ҡыра. Алыҫтан атышһаҡ та, ҡул һуғышына барыуҙан мине хоҙай араланы, үҙ ҡулым менән кеше ғүмерен ҡыйманым.

Һалдат булараҡ, мин тырышып хеҙмәт иттем, приказдарҙы теүәл үтәнем, тәүәккәл булдым. Һуғышта ҡатнашҡан өсөн мин Ватан һуғышы ордены, «Японияны еңеү өсөн» миҙалы һәм башҡа юбилей миҙалдары менән наградландым.

Армия минең өсөн үҙе бер тормош мәктәбе булды. Тыныс урында хеҙмәт иткәс, баҡса үҫтереү менән дә шөғөлләндек, бер умартасы ҡарт менән дә дуҫлаштым. Мин киләсәктә кәрәк булған байтаҡ нәмәләр белдем.

Армияға миңә әсәйҙәр хат яҙып торҙолар, кешенән яҙҙыра торғайнылар: әсәй ғәрәпсә генә яҙа белә ине. Ниһләптер бер тапҡыр ҙа үҙе сығарған бәйеттәрен яҙҙырып һалманы. 1948 йылдың мартында, 6 йыл хеҙмәт итеп, мин Һаҡмар Бүре-

һөйөп кире ҡайттым. Һуғыш ваҡытындағы михнәттәрен әсәм аһлап миңә һөйләй ине. Бәләкәс кенә өйҙөң башы туҙып, серәп бөткән, түшәктәренән ямғыр ҡоя. Әсәм мәрхүм мин ҡайтыуға, исмаһам, өйҙөң башын һалам менән яптырып ҡуяйым тип, колхозға бер башмағын биргән булған.

Мин ҡайттым да өйҙө бөтөнләй боҙоп ташланым. Ҡарағай-ҙы буйынан алам-һалам булһа ла ағас ташыным. Боҙоуын боҙ-ҙым, йәш саҡ бит, балта оҫталығын белмәйем, өйҙө һипләп, терәген урынын алмаштырыр кәрәк. Әбештәге боронғо балта оҫтаһы Ғәйәнсура тигән олатай бар ине ул мәлдә. Шул ҡартҡа әйттем, кәңәшләшеп ҡара әле, тинеләр. Барып һорашҡайным, атай үҙе килде. Ашарға юҡ, ҡатыҡ, ваҡ-төйәккә риза булып, өйҙө ултыртте. Өлкән ине инде, ас, хәле юҡ, шулай ҙа сер бирмәй. «Балам, мин шулай ғына йөрөһәм дә ил хеҙмәтен күп иттем, кешегә күп ҡатыштым, өс хәҙрәттең ҡулына һыу ҡойҙом», — ти. «Ҡаһарман кантон» тигән йырҙы мин шул ағайҙан һәм элек Аҡна-зар ауылынан Ғиниәт ағайҙан отоп алдым.

*Ҡыр аръяҡҡайынынан караван килә, һай кем килә,*
*Бохаранан түгел дә, Хиуанан.*

*Ҡаһарман кантонский,*
*Булмай штатыский.*
*Башҡортоский молодца ла*
*Булмай штатыский.*

*Хуш, Ырымбур ҡала, сәхрә дала.*
*Ҡарамала үҫкән дә тал икән,*
*Был донъялар беҙгә фани икән,*
*Фани донъялар ҙа беҙҙән ҡала икән.*

*Ҡаһарман кантонский,*
*Булмай штатыский.*
*Башҡортоский молодца ла*
*Булмай штатыский.*

Өй башының урам яғын ҡалған иҫке таҡта менән, ә аръяғын ҡабыҡ менән яптым. Председатель Хәммәт килеп әрләп

китте: «Донъянды ҡабыҡ менән көпләп, Ҡотой ҡарт менән Батый әбей булып йәшәмәкһеңме?», — тине. Һалам менән япһам, әрләмәç инеме икән?! Ә теге өй ҡыйығын һалам менән яптырыуға бирелгән үгеҙ колхозда ҡалды, һалым иçәбенә.

Хеҙмәттән ҡайтҡас, өйлән, тип Аҡнаҙар ауылынан Килдебаев Әйүп менән Ғәззә ҡыҙы Бибиһанды димләнеләр. Аҡһыйыр ауылында ҡартатайымдың бик ҡатышып, татыу йәшәгән, беҙҙе яҡшы белгән күршеһе бар ине. Шул Ғәббәс ағай димләне. Бибиһан уға туған тейеш — үҙенекен үткәрергә тырышҡандыр инде, һуғышта егеттәр һәләк булып бөттө, еткән ҡыҙҙар күп ине.

9 апрелдә кәләште оҙатып алдыҡ. Ҡыҙыбыҙ тыуҙы. Хәмдиә тип исем ҡуштыҡ. Бибиһан үгеҙ етәкләп, ер һөрөп һуңғы көнөнә тиклем йөрөнө, шул төндә Хәмдиә тыуҙы. Йөклө ҡатындарҙы эшкә лә һанамаҡылар. Балаға бер аҙна ла булманы, тағы эшкә ҡыуҙылар. Хәмдиә илай, әсәһе имеҙергә лә ҡайта алмай, һөтө лә юҡ. Мин һуғышҡа киткәс, әсәй Аҡһыйырҙан абыстай ҡартәсәйҙе Бүрегә күсереп алып килгән ине. Шул ике ҡартәсәй ейәнсәрҙәрен, күҙҙәренә йәш алып, бәүеттеләр. «Был баланың ҡарғыштары кемгә төшөр икән,» — тип ҡуша илашҡандар. Юнысов Саҙиҡ исемле Шөкәрәлә ат ҡараусы булып эшләгән бер кеше балаһын ҡартәсәмә күрһәтеп, баҡтырырға алып килгән бер ваҡыт. Урыç ауылында торғандарҙың әҙерәк икмәге булды ул заманда. Теге баланың ҡулында икмәге булып, төшөрөп ебәргән дә алмаған. Шул икмәк киçәген, алтындай күреп, йыйып ҡуйып, Хәмдиәгә ашатып, ҡыуанып ултырғандар әсәй менән абыстай ҡартәсәй.

Бибиһан физик яҡтан көслө булды, әсәйҙең ике һыйырынан яҙманы. Төнгә тиклем бесән сабыр ине. Бер һыйырҙың быҙауын һалымға түләйбеҙ, икенсеһе һуғымға ҡала, иркенерәккә тура килә башланы. Әсәй, көрәк менән ҡаҙып булһа ла, картуф сәсте.

Мин ҡайтҡас та колхозға эшкә төштөм. Ат ҡараусы ла булдым, үгеҙ менән ер ҙә һөрҙөм. Бибиһанға сабата кейҙермәйем тип, үгеҙ тиреһен эшкәртеп, уны имән ҡабығының һыуына һалып, һары күн килтереп сығарҙым; үҙебеҙҙең ауылдан Байбулатов Сәлихҡол ҡарт уға ла, миңә лә итек тегеп бирҙе. Оçта булды ул, ҡашыҡ та, иләк тә эшләй торғайны.

Аяҡ кейеме тиҙ генә туҙа. Шул заманда ҡыштың көнө [illegible] быймам туҙҙы. Быйманы, сүкте ишеп, табанлап ҡарамаһам, бер ике көндә тарала ла төшә. Шунан Сөрөктән Люд[illegible]кий Николай Алексеевич машина тәгәрмәсенән һыҙырып алынған резина киҫәге бирҙе. Резина менән табанланған быймамды олло күпме кейҙем!

Һуғыш бөтөп, 3 йыл үтеүгә ҡарамаҫтан, халыҡ һаман ас-[illegible] хәйерсе ине. Бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр юҡ. Көҙөн урып бөткәс, иген келәттәрендә бер нәмә лә ҡалдырмай, һыпырып алып китәләр. Кешегә ашарға һаман шул әҙ-мәҙ ҡый ашаны. Ас кешегә ышанмағандарҙыр инде, орлоҡҡа ла ҡалдырмайҙар ине ашлыҡты. Ә яҙ етһә, Һарынан йәки Федоровканан орлоҡ ташырҙар ине. Аҡъярҙа ла тәрән бункер булды. Юл ул ваҡытта таҙартылмай ине, аттар бата, үгеҙ ята ла ҡуя. Шулайтып кешене ыҙалаттылар. Хәмдиәгә ике ай тулғас, Бибиһанды Сик станына, ҡырға, эшкә ҡыуҙылар. Сик станында ат молотилкаһы менән иген баҫалар ине, молотилкаға көлтә бирен торорға кеше кәрәк тип, алып киттеләр. Бибиһандың һөйләүе буйынса, унда эшләүселәр Сик йылғаһының тәрән үҙәнендә, муйыл араһына, таш ҡул тирмәне ултыртып ҡуйғандар. Баҫҡан игендән әҙерәк алып, үҙәнгә алып төшөп, сиратлап тирмәндә тартҡандар. Шунда аҫта уҡ ут яғып, көлгә күмеп, икмәк бешереп ашағандар. Берәү әйтеп ҡуймаһын, төрмәгә ултыртып ҡуймаһындар, тип бер-береһенән ҡурҡа-ҡурҡа йөрөгәндәр. Бибиһан, яйын табып, беҙгә көлгә күмеп бешерелгән ҙур ғына икмәк ҡайтарҙы. Һуғыштан һуң беренсе тапҡыр туйғансы икмәк ашаныҡ шунда. Хәмдиәгә, ебетә һалып, имергә икмәк бирҙе әсәйҙәр.

## Шофер булып эшләү йылдары

Ошо тормоштан ҡасып, 1952 йылда 2 йәшлек Хәмдиәне әсәйҙәргә ҡалдырып, Бибиһан менән Ивановкаға килдек. Бында МТС ойошторолған ине. МТС директоры Попов Семен Васильевич эшкә ҡабул итте, ихтирам менән һөйләште һәр саҡ. Ундағы урыҫтарҙан бер ниндәй ҙә насарлыҡ күрмәнек. Беҙ торған хужабикә күршеһе сельпо председателе Шамрай-

ҙың ҡатыны менән дуҫ ине; Шамрайҙар беҙҙе лә яраттылар, гел мунсаға саҡырҙылар, Бибиһанды һатыусы итеп алырға булдылар.

Мин машинам менән бер өҙлөкһөҙ эштә булдым, колхоздарға ярҙамға ебәрҙеләр. Бер ваҡыт Саламатов Хәлит (бер аяғы юҡ ине) менән Тиргәмешкә барҙым. Переволочандан Лопаткин фамилиялы председатель миңә задание бирҙе. Ул ваҡытта ырҙын ҡырҙа була торғайны, үгеҙ менән ҡумта арбаға тейәп, һуғылған игенде ырҙынға бушаталар. Миңә шул игенде ырҙындан ауылдағы келәткә ташырға ҡуштылар; һәр рейс өсөн 30 кг ашлыҡ һиңә, тип дәртләндерә Саламатов. Мин ҡыуаныштан бөтә игендәрен бер төндә ташып бөттөм. Һуңыраҡ килеп алырһың тигәс Саламатов, ҡыш көнө МТС-тың аты менән килгәйнем, 1 ат йөгө итеп иген тейәп ҡайтарҙылар! Был шул ваҡыт өсөн ҙур байлыҡ ине. Ивановканың трактор менән эшләп торған тирмәнендә Арнольд исемле эстон игенде һалдырып бирҙе. Әсәйҙәргә 1 тоҡ он ебәрҙем!

Әбешкә ярҙамға барыуым да асыҡ хәтерҙә. Колхоз председателе Таһиров Тимербулат 3—4 километр алыҫлыҡта ятҡан Әбеш станынан ауылдағы мөгәзәйгә иген ташырға ҡушты. Игендәрен төнө буйы ташып бөттөм. Ҡайтырға йөрөһәм, Тимербулат ҡасты, урынбаҫары Шөгәйеп тә бирмәне 1 тоҡ игенде. Ырҙын мөдире Фәғилә генә, оялмайһығыҙмы, күпме игенегеҙҙе ташыны, үҙем бирәм, тип 2 ир эшләй алмағанды атҡарҙы: үҙе тултырып, 1 тоҡ игенде машинаға һалып ебәрҙе.

1952—1954 йылдарҙа мин маҡталып Ивановкала эшләнем. Эш хаҡы һәйбәт, премиялар сыға. Өҫтө бөтәйттек, яңы юрған алдыҡ. Минең тормошом сағыштырмаса һәйбәтләнде, ә халыҡ һаман ас-яланғас.

Ошолайтып аслы-туҡлы, кейемгә туймай йәшәү Сталин үлгәнгә тиклем дауам итте. Халыҡты зар илатып, 1953 йылдың 5 мартында иптәш Сталин үлеп китте. Мин ул ваҡытта Ивановкала шофер булып эшләп йөрөй инем. Сталиндың ҙур фотокарточкаһына ҡара таҫмалар ҡуйып, халыҡты йыйҙылар. Геү килеп илайҙар. Хоҙай үлде, тиҙәр, ул үлгәс, йәшәп булмай, тиҙәр. Шул ваҡытта Кривенков Виктор исемле йәш урыҫ егете: «Эх, вы, дурные люди, зря плачете», — тип ҡуйҙы. Бөтә кеше аптырап китте, ҡайһы бере ҡурҡты. Фатирыма ҡайт-

ҡайтһам, хужабикә әбей илап ултыра. Мин: «Бабушка, не плачь, лучше будет, вот увидишь», — тип уны тынысландырҙым.

Бүрелә Атингән ауылынан килеп эшләп йөрөгән Бохарбаев фамилиялы уҡытыусы бар ине. Ул, Сталин үлгәс, халыҡты йылап, илағандар күмәкләп. Бохарбай илағас, Мәхмүзә апай һөйгән дә ебәргән. Уҡытыусы илаһа ла, күҙ йәше сыҡмағас, илай белмәй, тип көлгән икән. Шунан Бохарбаев әллә нисәмә йыл буйы йыйылыш һайын: «Бына Сталин үлгәндә бөтәбеҙ илайһыҡ, Мәхмүзә апай көлдө», — тип әйтеп үтер булды. Мәхмүзә апай: «Ярар һиңә, ил илағанда әллә мин иламаған тиһеңме», — тигән булып яуаплар ине. Ә Ивановкалағы фатир хужабикәһе, тормош яҡшыра башлағас: «Мухамедьян сказал, что лучше будет. Откуда он знал, интересно?», — тип мине ҙур белемле кешегә һанап, хөрмәтләне.

Әсәйҙәрҙе йәлләп, 1954 йылда, Бүрегә кире ҡайтырға уйланым. Был ваҡытта Фәррәх улым тыуған ине инде. Сөрөккә килдек, Бибиһан Фәррәхте күтәреп, йылға буйлап ауылға төшөп киттек. Әсәй менән абыстай ҡартәсәй бер иланылар, бер көлдөләр. Һап-һары башлы Фәррәхте яратып, Аҡмулла булыр бала, Аҡмулла, тип ҡыуаныштылар, бахырҙар, беҙҙең бөтәйтелгән өҫкө, яңы юрғаныбыҙға һөйөнөп, баланың аламаһы ялпылдап ишеккә ҡыҫылып килеп инһә, нишләр инең, тиеп илаштылар.

Бүрегә ҡайтыуға «Үрнәк» колхозына машина алыу, председатель Гордеевтың мине ауылға ҡайтырға өгөтләүе лә сәбәп булды.

1954—1970 йылдарҙа «Үрнәк» (эреләтелгәс — «Һаҡмар») колхозында, хаҡлы ялға сыҡҡансы, ГАЗ-51 (самосвалда), ЗИС-5 йөк автомобилдәрендә шофер булып эшләнем.

Бибиһан, ауылға ҡайтҡас, һатыусы булып китте. Сельпо председателе Исмәғилев Ғәлимйән, Әлмөхәмәтов Әхмәтйән, ҡатыны Гөлзада иҫәп-хисапҡа өйрәттеләр. Һәйбәт эшләне, гел маҡталды, кешеләргә лә ярай белде.

Мин көн дә Сөрөккә йәйәү йөрөп эшләнем, йылға буйынан Бүрегә машина менән төшөп булманы. Көндөҙ колхоз эшендә, төндә кешегә эшләшәм — яңы өй төҙөүселәргә бүрәнәгә барабыҙ. Әҙ генә йоҡлайһың да, һикереп тороп, Сөрөккә сығып китәһең. Нисек түҙелгәндер. Әхмәтхан Сәйетханов исемле «30 меңселәр» ваҡытында ауыл хужалығын

күтәрергә ебәрелгән коммунист менән бик татыу эшләнек. Колхоз эреләтелгәс, председатель итеп ҡуйылған Ишбулды Низам улы Ҡәйепов та беҙгә туған һымаҡ булып китте.

Ауылға ҡайтҡас, урыҫ ауылдарындағыса, 6 тәҙрәһен урамға ҡаратып, йөҙлөк ҡуйып, тар, ләкин оҙон итеп (10х5), бейек нигеҙле, өй тергеҙҙем. «Совет власында ундай өй булырға тейеш түгел», — тип 3 йыл партия йыйылышында тәнҡит иттеләр мине. Сәйетханов, кеше үҙ ғүмерендә 1 өй эшләтә инде, нишләп улайтаһығыҙ, тип яҡлап сыҡҡас, саҡ ҡуйҙылар.

Сталин үлеп, Хрущев заманы килеп еткәс, тормош яйлап яҡшырҙы — һалым кәмене, кеше туйғанса икмәк ашап ҡалды, ит менән майҙың тәмен татыны. Хрущев эйәрле атҡа мендерҙе, ат егеп йөрөй башланылар, уһан машинаға күстеләр. Шул ваҡытта Сөрөк ауылынан Кирдин Иван исемле мордвин йыш ҡына минең менән машинага ултырып, төрлө яҡҡа колхоз йомошо менән йөрөй торғайны. Ул ваҡытта юлсыларҙың тамағы, ашханаларға инеп ашарға аҡса булмау сәбәпле, таныштарында туя ине. Ивандың туғандары Семберҙә лә, Һарыла ла, Орскиҙа ла күп була торғайны. Ингән бер ерҙә ҡатыны Нюраның, балдыҙы Ольганың хәлен һорашалар, тормош нисек, тиҙәр. Иван: «Живем, слава богу, во! Хлеб есть, мясо есть, масло есть, картошка есть, сапоги кирзовые есть, фуфайка есть, что нам еще надо?!», — тип ҡупырая. Ысынлап та, элекке менән сағыштырғанда, Хрущев арҡаһында күҙгә күренеп тормош яҡшырҙы. Кешенең бер быҙауын тартып алып ҡалһа ла, уның өсөн аҡса түләй башланылар. Халыҡтың барлыҡ өмөтө шул башмаҡ аҡсаһы булды, уны бирһәләр, бер ҙурыраҡ әйбер алып була бит! Башмаҡ хаҡының өстән бер өлөшө генә эләкһә лә, бушлай тартып алған кеүек түгел ине.

Атайҙарҙы алып китеп юҡ иткән милицияны яратманым бер ҡасан да. Шулай ҙа уларға оҡшамаған бер кешене осратырға насип булды.

Үгеҙ егеп йонсоған халыҡ машинала йөрөүҙе оллә ни күрҙе. Аҡъярға, бигерәк тә Медногорскиға барырға булһам, картуф йоморҡаһын йөкмәп, кузовҡа тулып китерҙәр ине. Шулайтып күмәкләшеп Медный баҙарына китеп барғанда, Кузьмин тигән милиционер тотоп алды мине. Праваны тартып алып, үҙемде милицияға алып китте. Инһәк, 2 офицер ултыра. Мин ниндәй кешеләрҙе, нәмә өсөн ҡалаға алып килгәнемде һөйләп

...йырзым. «Улар ҡалаға продукция алып килгән, һине, һинең ...ешеле туйындырырға, ә һин уның праваһын алғанһың», — ...ып Мирошников фамилиялы офицер минең документтарҙы кире ҡайтарырға бойорҙо. Шунда тәүге һәм һуңғы тапҡыр ...ының милиционерҙы осраттым.

## Ҡортсолоҡ менән шөғөлләнеү

Колхозда шофер булып 1970 йылға тиклем эшләнем дә, умартасы булып киттем. Унан алда ла ҡорт менән ҡыҙыҡһыны инем. Ғәзим Шафиҡовтың атаһы Ғәзиз Әбештә мәктәп директоры булып эшләгән еренән Бүрегә умарталарын алып килеп, ҡорт ҡарап ятты. Ҡышын ауырып киткәс, килеп әйтеп китте, бал ҡорттарын һат та, аҡсаһын ебәрерһең, тине. Мин уларҙы үҙемә алып ҡалдым; әҙ-мәҙ шунда өйрәндем.

Койепов Ишбулды Низам улының инициативаһы менән колхоз умарталыҡ асырға булды. Тәүҙә умартасы таба алманылар, шунан Аралбаев Язар мине тәҡдим иткән. Ҙур эшкә тотонорға ҡурҡтым, ризалаштым да, иртәгеһенә кире уйланым. Бибиһан мине әрләй, радикулитың менән тәгәрмәс өҫтөндә төңкәйеп ҡалырһың инде, ти. Ризалашып, тоуоккөлләнем. Колхозда электән умарталыҡ бар ине, зоотехник Әхтәмовты ҡуйғайнылар, ҡорто үлеп бөттө. Шуға Иглин районынан 50 ҡорт тоҡомо (пчелопакет) алып килделәр. Ул йылды 5 фляга бал бирҙем. Әллә ни тәжрибә юҡ, ҡыш көнө 8 умартала ҡорт үлде. Аръяғына өйрәндем, ҡорт күбәйҙе. 1978 йыл минең өсөн рекорд йылы булды: 60-лап умартанан 3,5 тонна бал бирҙем. Бөтә ғаиләм менән йәй буйы Тимербай тауының битләүендә булыштыҡ. Иртә яҙҙа ҡышлау өйөнән (омшаниктан) ҡорттарҙы сығарыуҙан башлап, ҡар күҙе төшә башлағанға тиклем биш малай, Хәмдиә, Рәшит ҡустым эшкә егелделәр. Тағы 3 умарталыҡ астыҡ, Вәзәмдә Сурин Харис, Телоуголов Хөсәйен, Төрткәндә Торошов Айса умартасы булып киттеләр. 1978 йылда Харис 8 фляга бал бирҙе.

Ҡортта 1984 йыл пенсияға сыҡҡансы эшләнем; Саҙиҡ улым гел эргәлә булды, Михайловкала умартасыға уҡыны, эште һөйбәт белде, шуға умарталыҡты уға тапшырҙым. Колхоз тарҡалгас, умартасылыҡты беҙ үҙебеҙгә ҡаратып алдыҡ.

Пенсияға сыҡҡас, Валявино ауылы эргәһендә Орскиҙың «Строймаш» заводы умарталығында эшләнем. Заманса йыһазландырып, 2 ҡатлы йорт төҙөтөп, «карпатский» тоҡомло 10 күс алып килделәр. Тәүҙә Мещеряков Геннадий Ильич – Рәшиттең дуҫы умартасы булды, тик ул йылды ҡорттары үлеп бөтөп, эштәре барып сыҡмай ҡуйҙы. Ҡабатлап ҡорттар килтергәс, мине саҡырҙылар. 3 йыл эшләнем, арыу уҡ бал бирҙем заводҡа. Эште ҡул көсө менән башҡараһың, йәш тә бара, арыта, өйҙә үҙемдең дә ҡорттарым бар, уларҙы ла ҡарарға кәрәк, тип шунда уҡ ҡарауылсы булып ҡалдым да, 20 йылдай йөрөнөм. Урыҫтар бер нәмәләрен дә йәлләмәнеләр – Т-40 тракторын, 4 тәгәрмәсле яңы арба бирҙеләр, яңы өй төҙөгәндә лә ҙур ярҙам күрһәттеләр, байыттылар. Яңы «Нива»ны ла шул заманда алдым.

Шәмсикамал ҡартәсәй 1956 йылда гүр эйәһе булды. Зәйнәп апай, һуңғы йылдарын Нефтекаманың ҡарттар йортонда үткәреп, 1984 йылдың 24 октябрендә вафат булды. 1980 йылдың 31 мартында әсәйем үлеп ҡалды.

Әсәйем шул тиклем матур ҡартайҙы. 80 йәшендә үлем түшәгенә йығылғансы, үҙен-үҙе баҡты; бер намаҙын, ураҙаһын ҡалдырманы. Таҙа булды, бер ваҡытта ла бысраҡ кейем киймәне. Ҡунаҡҡа барһа, әбейҙәр араһында үҙе бер башҡа булып, балҡып торор ине. Кейгән кейеме баҙыҡ булды, килешле, бөхтә итеп кейенер ине. Уны кисергән ауырлыҡтар сыныҡтырғандыр, тип уйлайым. Бер ҡасан да кешелек дәрәжәһен юғалтманы, ыҙғышып, кеше йәберләп йөрөмәне. Нисек кенә ҡыйын булмаһын, хоҙай үҙе урынына ҡуя ул, тип әйтер ине. Хоҙай күрә, хоҙай яҡлай, тип инанып йәшәне. Быны үҙенә күрә тормош фәлсәфәһе тип атар инем. Изге кеше булды; иң яман кеше лә унын алдында йомшарыр ине; уға килгән кеше күңеле пакланып, тынысланып, кәңәш алып китә торғайны. Үлер алдынан китаптарымды үҙем менән бергә күмерһегеҙ, тип үтенде. Тибет китабы, дини китаптары китте үҙе менән, «Хәҙер дин юҡҡа сығарылды, туҙрап-тапалып ятмаһын китаптар», – тине.

Үткәндәргә байҡау яһап, һуңғы йылдарҙағы беҙҙең ғаиләне лә урап үтмәгән мәхшәрҙе уйлап, шундай һығымтаға киләм: бер генә урыҫ, татар, еврейҙан да бер насарлыҡ күрмәнек, ә бына халҡыбыҙҙан күрҙек!

Еврей атайымды үлемдән ҡотолдорған, урыҫ мине байытты, татар Сәйетханов мине яҡланы, ярҙам итте, ә башҡорт — ярлы итте! Бөгөнгө көндә лә шул дауам итә. «Эттән эт тыуа, сүскә тыумай», тигән еврей мәҡәле бар. Ата-бабалары ниндәй булған, шул ямандарҙан яман тыуҙы, яҡшынан — яҡшы, байҙан — бай ҡалды. Миҫал итеп Мөхәмәтов Хәмит тигән кешене килтерер инем. Ул Аҡъюлда йәшәне. 1937 йылда шул тирәләге ауыл кешеләре өҫтөнән ялыу яҙып, ултыртып бөткәс, үстөн ҡурҡып, Вәзәмгә күсеп килергә мәжбүр булды. Бында ла үлгәнсә яман шөғөлөн ташламаны. Балаларын бер ҙә иген игергә, ер һөрөргә ебәрмәне, кешеләрҙе йәберләй, талай торған һөнәргә уҡытты. Улары ла хәҙер аталарының эшен дауам итеп, шунан ләззәт табып йәшәйҙәр. Теге ваҡыттағы ҡан эскестор тамырынан бер ҙә йүнле үҫентеләр үҫмәне.

## Кеше ғүмере — ҡуласа

Кеше ғүмере — ҡуласа икән ул, мәхшәрҙән башланып, мәхшәр менән тамамланырға уйлай. Тик мин бирешмәйем, быға хаҡым юҡ. Был һынауҙар беҙҙе көсәйтә генә. Ул һынауҙар булмаһа, беҙ Бибиһан менән, әсәйем ярҙамында, балаларға дөрөҫ тәрбиә бирергә, ҡаршылыҡтарҙы еңергә тырышып йәшәргә өйрәтә алыр инекме икән?! Мин ғаиләмә танып йәшәйем. Ҡатыным Бибиһан, ҡыҙым Хәмдиә, ландарым — минең терәгем. Әсәйем Шәмсибаһарҙың, атайым, картатай-ҡартәсәйҙәремдең фатихаһында йәшәнек. Ваҡытында нәҫел ебе өҙөлә яҙып, бер генә малай — мин — тороп ҡалһам да, уҡытыусы ҡыҙым Хәмдиә, районды газлы итеүсе, шул ойошманы етәкләүсе Фәррәх, электр селтәрен ойҙоусе Ғәлимйән, министр дәрәжәһенә күтәрелгән Фәтих, минең эшемде дауам итеүсе Саҙиҡ улым, үҙ эшен асып, уңышлы эшләп йөрөүсе Заһир, уларҙың ғаиләләре, 13 ейән-ейәнсәрем, 12 бүлә-бүләсәрем — бына улар тормошомдоң мәғәнәһе, минең дауамым, рухи көс сығанағым. Уларҙың тормош ҡуласаһы яҡшынан башланһын һәм бер кимәлгә өҫкә күтәрелеп дауам итһен, тип теләйем!

# ЗАМАНА ТАҠМАҠТАРЫ

Күргән-кисергәндәрҙе һүрәтләгәндән һуң мин үҙ ғүмеремдең иң фажиғәле йылдарында ишеткән йыр-таҡмаҡтарҙы яҙып киткем килә. «Йыр — ул тарихи документ», тип уҡығайным бер китапта. Бер көнбайыш ғалимының «Ниндәй халыҡ тураһында һүҙ бара, тәүҙә ул халыҡтың йырын йырлап күрһәтегеҙ», тигән фекерен дә өҫтәргә кәрәктер.

Уҙған быуаттың 30-сы йылдарында сыҡҡан таҡмаҡтар ошолай ине («Шәл бәйләйем» көйөнә):

*Тәңкәле ҡыҙ,*
*Тәңкәле ҡыҙ,*
*Тәңкәле ҡыҙ*
*Байҙарҙа (ла),*
*Алып сығып*
*Йөрөһәң ине,*
*Алып сығып*
*Йөрөһәң ине*
*Еләк бешкән*
*Айҙарҙа.*

*Һыу инә торған еребеҙ,*
*Һыу инә торған еребеҙ,*
*Һай ли, күләгә, күләгәлер, күләгә.*

*Тәңкәле ҡыҙ, тәңкәле ҡыҙ,*
*Тәңкәле ҡыҙ байҙарҙа (ла).*

*Алыҫ сығып йөрөһәң ине,*
*Алыҫ сығып йөрөһәң ине*
*Еләк бешкән айҙарҙа.*

30 сы йылдарҙа, кулактарҙы бөторөп, муллаларҙан ҡурҡмай, урамда флаг күтәреп, йырлап йөройҙәр. Комсомол булһалар ҙа, Ҡорбан байрамында өйҙән-өйгә йөрөп бутҡа ашап сыҡалар. Үҙҙәре яланғас, ҡулда флаг:

*Без барабыҙ коммунаға,*
*Ҡыҙыл кирбес ҡалаға,*
*Беҙҙең аяҡ туҙандары*
*Күтәрелһен һауаға.*

*Сит ерҙәрҙә вафат булһам,*
*Ҡәберем тәрән ҡаҙығыҙ,*
*Баш осона ташлар ҡуйып,*
*Комсомол тип яҙығыҙ.*

*Комсомолдар эшкә бара,*
*Ҡулларында көрәге,*
*Алтмыш буржуйҙы ҡурҡытҡан*
*Бер комсомол йөрәге.*

*РСФСР тип яҙалар*
*Ҡыҙыл флагтарына,*
*Совет власын бирмәйбеҙ*
*Ауыл кулактарына.*

*Шыбыр-шыбыр ямғыр яуа,*
*Түбә ҡалайҙарына.*
*Беҙҙең арала урын юҡ*
*Кулак малайҙарына.*

*Буржуй ишәк, ҡайҙан алдың*
*Ҡара тимер санаңды?*
*Ҡыҙыл ғәскәр ҡаршы килгәс,*
*Белдем инде саманды.*

*Таш ватабыҙ, таш ватабыҙ,*
*Ташты күпләп ватабыҙ,*
*Кулактарҙы, контрҙарҙы*
*Себергә оҙатабыҙ.*

35-се йылдарҙа, 1933 йылғы аслыҡтан айнып, яңы тере-леп килгәндә сыҡҡан таҡмаҡтар:

*Уфаларға барыр өсөн,*
*Автомобиль ярыша,*
*Культураға күсер өсон*
*Ударниктар ярыша.*

Ҡушымта:

*Наза, Наза, Наза-баҡыр бағана (ла),*
*Танцевала бейеп кенә*
*Китә торған замана (ла).*

*Алдар өсөн үҫтеңме,*
*Гөлдәр өсөн үҫтеңме?*
*Ударник була алмағас,*
*Силос өсөн үҫтеңме?*

Ҡушымта:

*Елбер-елбер итмәһә (лә),*
*Елдәр алып китмәһә (лә),*
*Эшкә батыр, төҫкә матур,*
*Ударница, етмәһә.*

Ҡушымта:

*Бейер инде, бейер инде,*
*Аяғы талыр инде (лә),*
*Ошо бейеүләрен күреп,*
*Коммунист алыр инде.*

*Шыбыр-шыбыр ямғыр яуа,*
*Тимер ҡапҡа буйлатып (та).*
*Һөйгәнең булһа, һөймәйем,*
*Һөйгәнеңде илатып.*
*Ботинкаһы, ботинкаһы,*
*Ботинкаһы йәшел суҡ (та).*

*Комсомол булһа — барабыҙ,*
*Комсомол булмаһа — юҡ.*

*Ботинка алдырайыммы,*
*Ботинка һалдырайым.*
*Һөйәркәһен тартып алып*
*Йөрәген яндырайым.*

*Ботинкаһы йәшел суҡ (та),*
*Ботинкаһы һыҙыҡлы.*
*Кеше йәрен тартып алып,*
*Һөйөүҙәре ҡыҙыҡлы.*

*Ботинкаһы, ботинкаһы,*
*Ботинкаһы ялт итә (лә).*
*Әллә йәшлектәре белән*
*Таштамам тип ант итә.*

Клубта шәм яғып йырланылар:

*Комсомолдар эшкә бара*
*Фургондарға тейәлеп,*
*Луҙырҙары тороп ҡала*
*Стенаға һөйәлеп.*

Бер кеше ҡаҙ ҡултыҡлап алған да, урамдан китеп бара:

*Колхоз ҡаҙ алмай микән,*
*Колхоз таралмай микән,*
*Урам тулы полномочен*
*Эттән яралған микән.*

Ҡаҙаҡтарҙың көләмәсе бар:

*Ҡәһәр ҫуҡҡыр Николай*
*Арғамаҡҡа менгеҙҙең,*
*Ҡаҙы менән ял ейгеҙҙең,*
*Ефәк күлдәк кейгеҙҙең.*
*Ҡамалы тун кейгеҙҙең.*

*Айналайым Сталин,*
*Ағас атҡа менгеҙҙең*
*Эт, пысыҡ ейгеҙҙең*
*Ҡаптый көшлөк кейгеҙҙең.*

Муллаларҙан мәсетте тартып алғас, сығарылған таҡмаҡтар:

*Беҙҙең мәсет манараһы,*
*Доньяһына ҡараған (да).*
*Комсомолдар мәсет алған —*
*Вот уныһы яраған.*

Власҡа ҡарата төртмәле һүҙҙәр ҙә әйтелде:

*Советский власть үҙе ас, үҙе ялангас,*
*Советский форма — ике ҡаҙаҡ норма,*
*Ас та түгел,*
*Туҡ та түгел,*
*Өйрәнгәс, буҡ та түгел.*

Сталин—Хрущев замандарында сыҡҡан таҡмаҡтар:

*Уфаларҙан арып ҡайтҡан*
*Ебәрсе аттарыңды (ла)*
*Грамотный кеше артынан*
*Ебәрмә хаттарыңды.*
*Ал һибәләр, гөл һибәләр*
*Станса юлдарына.*
*Үҙең уҡы ла — утҡа яҡ,*
*Бирмә ят ҡулдарына.*

*СССР-ҙың топ законын*
*Үҙе яҙған (Ы)Сталин (да),*
*Һин йәшәһәң — беҙгә рәхәт,*
*Мәңге йәшә (Ы)Сталин.*
*Әйләнәлер-бәйләнәлер,*
*Тигермәндең таштары (ла),*
*Салауат күпере кеүек*
*Сталиндың ҡаштары.*

*Самауарым ҡайнамаған*
*Күмерҙәре булмағас,*
*Ленин бабай үлеп китте,*
*Ғүмерҙәре булмағас.*

*Уфаларҙа суйын күпер,*
*Бағаналары баҡыр.*
*Ҡарағыҙ, Ленин бабайҙың*
*Кәртешкәләре матур.*

*Ҡ(ы)ҙарып ҡояш сыҡҡан саҡта*
*Нуры төшә йылғаға.*
*Ленин бабабыҙ сығарҙы*
*Беҙҙе рәхәт донъяға.*

*Ленин бабай сәс алдырған,*
*Маңлай сәсен ҡалдырған.*
*Ленин бабай үҙ(е) үлһә лә,*
*Васыятын ҡалдырған.*

*Уфа урамы быяла.*
*Таш булһа, таймаҫ ине.*
*Уф, йөрәктәрем яна,*
*Һин булһаң, янмаҫ ине.*

*Һин дә баҫтың таҡтаға,*
*Мин дә баҫтым таҡтаға.*
*Һөйгәнеңде күрҙем инде,*
*Пожалуйста, маҡтама.*

*Алай итһәң дә була,*
*Былай итһәң дә була.*
*Тарбаң-торбан иткәнеңсә,*
*Тик ултырһаң ни була.*

*Аҡ ҡуян тип атҡандары*
*Бейек тауҙың ҡатлауы.*
*Һөйгәнеңде күрҙем инде,*
*Дөйә кеүек атлауы.*

# МӨХӘМӘТЙӘН АБДУЛЛА УЛЫ ҠАҘАҠБАЕВ ТУРАҺЫНДА – ТӨРЛӨ АВТОРҘАР

*З. Кобылева,*
*өлкән зоотехник-умартасы.*

## Өлгөлө умартасы

Унынсы биш йыллыктың икенсе йылында районның күп кенә умартасылары совет власының юбилей йылына алған социалистик йөкләмәләрен үтәү өҫтөндә һәйбәт кенә эшләнеләр һәм арыу һөҙөмтәләргә өлгәштеләр. Бал – татлы аҙыҡ ҡына түгел, ҡиммәтле дауалау сараһы ла. Унда кеше организмы өсөн күп кенә файҙалы матдәләр бар. Быны беҙҙең умартасыларыбыҙ бик яҡшы аңлай.

«Һаҡмар», Салауат исемендәге, «Красное знамя» колхоздарында бал ҡорттарын аҫрау һәм продукция алыу осон районның тау-урман зонаһы шарттарын яҡшы файҙаландылар. Был урындар баллы сәскәләргә бай. Бында иртә яҙғы (үгәй инә үләне, һөтләкәй), яҙғы (ерек, саған һәм баҡса культуралары), йәйге (йүкә, ҡурай еләге, ҡарабойҙай), көҙгө һәр төрлө үләндәр үҫә.

Быйыл Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 60 йыллығында «Һаҡмар» колхозы умартасыһы Мөхәмәтйән Абдулла улы Ҡаҙаҡбаев яҡшы хеҙмәт уңышына ирешә. Былтыр балды тулайым етештереү һәр умартаға 53 килограмм тура килде, ә быйыл унан да күберәк – 62,1 килограмм. Быйыл һәр умартанан 36,7-шәр килограмм тауар балы алынды, йәғни үткән йылдың ошо уҡ осоро менән сығыштырғанда 13,4 килограмға күберәк. М.А. Ҡаҙаҡбаевтың кәрәҙ рамының һаны

рттты. Әгәр үткән йыл бер умартаға 16,3 кәрәҙ рамы тура килһә, быйыл ул — 20,7. Билдәле булыуынса, кәрәҙ рамдары бал йыйыу осоронда иң мөһим нәмә.

«Красное знамя» колхозы умартасыһы Иван Климов та кәрәҙ рамдары менән яҡшы тәьмин ителгән. Уның бер умартаға 24,4 кәрәҙ рамы тура килә.

Ленин исемендәге колхозда күп бал алыуға яҡшы ғына шарттар бар. Әммә умартасы М. Әхмәҙиев элеккесә кеүек үк, быйыл да үҙенә тапшырылған эшкә еңел ҡарай. Үҙенең бурыстарына һалҡын ҡарашы, иң ябай ҡағиҙәләрҙе күҙәтмәүе, ҡорт ғаиләләрен ваҡытында дауаламауы арҡаһында ҡорттар үлеп бөттө.

Ҡыш умартасыларҙың эшен кәметмәй. Ҡорт ғаиләләре яҡшы ҡышлап сығып, яҙын шунда уҡ эш башлауҙары һәм күберәк бал биреүҙәре өсөн көндәлек контролде яҡшыртырға кәрәк.

*«Хеҙмәт байрағы» гәзите, 1977 йыл, 22 ноябрь*

***Рәшит Шәкүр**, филолог.*

## Дала йырсыһы

Хәйбулла далалары... Ниндәй илаһи донъя һуң әле был! Ниндәй күркәмлек, иркенлек был ерҙәрҙә! Йырҙа әйтелгәнсә, Урал тауын урап, көн битләп ағып ятҡан Һаҡмарһыуҙың арғы ағынан башланып, йәйге селләләрҙә ҡыҙған мейестәй эҫеһен бөркөп ятҡан ҡаҙаҡ далаларына барып олғаша был сәхрә ялан. Дороҫ, сиҙәм күтәреү, мәңгелек сал ҡылғанлыҡтарҙы һөрөп ташлап, ерҙең ҡыртышын аяуһыҙ емертеү — һис кенә лә еңелгә төшмәгән башҡорт далаһына.

Нимәгә кәрәк булды икән гөрләп ятҡан был ерҙәрҙе һабандың тимер төрәне менән аямайынса аҡтарып ташлау, тип уйлайһың һәм был даланың боронғо йәм бөркөп ятҡан саҡтарын күҙ алдына килтерәһең.

Еребеҙ ҙә, йыр-мондарыбыҙ ҙа — ата-бабанан ҡалған иң ҙур хазинабыҙ, баһалап бөткөһөҙ байлығыбыҙ. Шуның өсөн

дә еребеҙ беҙҙең үҙе йыр кеүек, ә йыр-көйҙәребеҙҙә, ер-һыуҙарыбыҙҙың, урман-тауҙарыбыҙҙың сихри матурлығында, башҡорт рухының ысын бөйөклөгө сағыла. Беҙҙең боронғо йырыбыҙҙы, «Урал»ды, «Буранбай»ҙы, «Һандуғас»ты, ошо уҡ Хәйбулла төбәгендә, үҫәргән сәсәндәре тарафынан сығарылған «Таштуғай»ҙы тыңлағанда мин йыш ҡына: «Әллә донъяла һис бер ниндәй тиңе юҡмы икән был башҡорт моңононоң?!», — тип ғәжәпкә ҡалам.

Быуындан-быуынға, ата — улға, инә — ҡыҙға иң изге амәнат итеп тапшыра килгән халҡыбыҙ беҙҙең был йыр-көйҙәребеҙҙе, тарихи хәтеребеҙҙе. Бәрәкәтле Хәйбулла тупрағында, Һаҡмар буйҙарында тыуып үҫкән түңгәүер ырыуы башҡорто Йомабай Иҫәнбаев иһә, йыр байлығын белеүсе һәм виртуоз ҡурайсы булараҡ Башҡортостандың, Рәсәйҙең, тотош союздың сиктәрен үтеп, донъя күләмендә дан ҡаҙанған. Ошо яҡтың хәҙерге заман халыҡ йырсыһы Әсмә Усманова ете быуын ата-олаталарының хәтер хазинаһын һәм милләтебеҙ ҡото Әхмәтзәки Вәлидигә арналған «Ирмәк» йырын күңелендә һаҡлап, ваҡыт өйөрмәләре аша беҙҙең көндәргә килтереп еткергән. Ошо Хәйбулла далаһының илһамлы йырсы-сәсәне һәм аҡыл эйәһе Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев та халыҡ рухына тоғро юғары интеллектлы кешеләрҙең береһе.

Мин уның тураһында, атаҡлы башҡорт шағиры Аҡмулла шиғырҙарын яттан һөйләүсе тип, күптән үк ишетеп белә инем. Шул хаҡта һорашып, яҙып алыр өсөн уҙған йыл Өфөлә Йомабай Иҫәнбаевтың 100 йыллығына арналған байрам көндәрендә осрашып, әңгәмәләшеп ултырыу насип булды. Һөҙөмтәлә Мөхәмәтйән ағайҙың мин белмәй йөрөгән өр-яңы һыҙаттары, уның репертуарының яңы байлыҡтары асыла бирен ҡуйҙы.

Мөхәмәтйән Абдулла улы Ҡаҙаҡбаев 1924 йылдың 21 декабрендә хәҙерге Хәйбулла районы Һаҡмар-Наҙарғол (Бүре) ауылында тыуған. Туған колхозында шофер булып эшләп, пенсияға сыҡҡан. Хәләл ефете менән биш ул, бер ҡыҙ үҫтергәндәр. Әле лә үҙенең тыуған ауылында йәшәй. Үҙе хаҡында унан ишетелгән ошондай һүҙҙәр минең дәфтәремә теркәп ҡуйылған:

«Атайым, өсәйем йырсы булды. Әсәйемдең Себерҙә “Йо-соф-Зөләйха” көйөнә сығарған бәйете һаҡланған. Әсәйем 1980 йылда үлде.

Карғағай Сәйетгәрәй Ғәлиәкбәров (әсәй яғынан) Хәйбулла районы Ишкилде (Аҡһыйыр) ауылынан. Күп йырҙарҙы унан ишеттем».

Күренеүенсә, бында һөйләгәндәрҙе тағы ла ентекләберәк һорашып яҙып алырға кәрәк әле. Әсәһенең Себерҙә сығарған бәйете тураһындағы бер ауыҙ һүҙ Ҡаҙаҡбаевтар ғаиләһенең тормошондағы йән тетрәткес ваҡиғаларҙы ла эсенә ала. Мөхәмәтйән ағай асылда — башҡорт халҡының борондан килгән ижадсылар ҡатламының талантлы бер вәкиле. Ата-олатаһының йырсы булыуы менән бергә әсәһенең боронғо классик әҫәр «Йософ-Зөләйха» көйөнә бәйет сығарыуы, ай-һай, бик үк ябай күренеш түгел.

Быйыл Йомабай Иҫәнбаев көндәрендәге осрашыу ваҡытында Мөхәмәтйән ағай үҙенең бер яғы менән мине бөтөнләй аптырашта ҡалдырҙы. Шундай йыйындарҙа йыш ишетелә башлаған Ҡөрьән сүрәләрен тыңлағандан һуң ул: «Уҡый белмәйҙәр, балалар», — тип борсолоу белдерҙе, үҙенең бала сағында йәшенән кенә атайҙарҙың Ҡөрьән уҡығанын тыңлап, отоп алып ҡалған булыуын әйтеп ысҡындырҙы. «Әйтеп ысҡындырҙы» тийеүем шунан: һуңғы йылдарға тиклем йырсы ағайыбыҙ дин өлкәһендә мәғлүмәтле булыуын бик үк һөйләп бармаған. Әммә хәҙер бындай белемдең ҡиммәте бермә-бер артты. Йырсы Мөхәмәтйән ағайға моңло, яғымлы тауышы менән Ҡөрьән сүрәләрен башҡарып та халыҡҡа изгелек күрһәтеү мөмкинлеге бар.

Йырсы-сәсән репертуарының тағы бер үҙенсәлекле йүнәлеше — боронғо китап көйҙәре, мөнәжәттәр. Был йүнәлеш Аҡмулла шиғырҙарын көйләп яттан һөйләү, Аҡмулла тураһында ҡыҙыҡһыныу менән бер бөтөн күренеш булып тора. Йыйындарҙа, фольклор байрамдарында ул Аҡмулланың «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!», «Нәсихәттәр» шиғырҙарын, «Аттың ниһен маҡтайһың?» ҡобайырын башҡарып, тамашасыларҙың оло ихтирамын ҡаҙанды. Бөйөк мәғрифәтсе шағирыбыҙ хаҡында ул шофер булып алыҫ юлдарҙа йөрөгәндә халыҡтан мәғлүмәттәр белешеп, үҙе иһә шиғырҙарын уҡып ишеттерер булған. Был хаҡта ул үҙе бына ниҙәр һөйләне:

— 60-сы йылдар аҙағында Аҡтүбә аръягындағы Максим Горький исемендәге колхозда ҡаҙаҡ араһында мин Аҡмулла шиғырҙарын уҡыным. Һөйләшеп ултыра торғас, бер ҡаҙаҡ әбейе әйтеп ҡуйҙы: «Аҡмулла бездеке имес ҡой». «Аҡмулла беҙҙеке түгел ул», тигән һүҙ. Тимәк, ҡаҙаҡтар бер ҙә уны баш ҡорттан тартып алырға тырышып тормай. Ябай халыҡта гәҙеллек тойғоһо көслөрәк шул.

Аҡмулланың тормошонда Иҫәнгилде тигән бай менән бик ҡаты һүҙгә килешеүе тураһында ваҡиға яҡшы билдәле. Мөхәмәтйән ағай ул хаҡта, халыҡтан ишетеүе буйынса, бер килке үҙенсәрәк тә итеп ошолай һөйләй:

— Аҡмулла ҡаҙаҡ араһында мулла булып йөрөгән ваҡытта Иҫәнгилде тигән байҙың бер туғаны үлеп ҡала. Шуны ерләү өсөн төрлө яҡтан ҡаҙаҡ байҙары, муллалары килә. Аҡмулла табында уртала ултыра. Иҫәнгилде ҡулын артҡа ҡуйып, эре генә йөрөй. Аҡмуллаға ҡарап: «Һәй, истәк, үлән күп ердә мал симерер, үлем күп ердә мулла симерер», — ти. Аҡмулла уға яуап бирә: «Дөрөс әйтәсең ғуй, күптәнге сүз ғуй: үлән күп ердә мал симерер, үлем күп ердә мулла симерер, дау-талаш күп ердә түрә симерер, сахрада минең кеүек муллалар булмаса, синең кеүек муллалардың башын эт кимерер», — ти. Иҫәнгилде Аҡмулланың уҡыусыһы, ти, әле ул. Шунан Иҫәнгилде, был һүҙгә түҙә алмайынса, Аҡмулланы Троицкиға төрмәгә ултыртҡан.

Мөхәмәтйән ағайҙың хәтер хазинаһының өсонсо йүнәлеше — башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-көйҙәребеҙҙең риүәйәт һәм легендалары.

— Мин йырға шәп булдым. Ҡурайсылар эйәрә алмай торғайны, тын иркен була ине, — ти ул тыйнаҡ, сабыр ғына. — Йомабай Иҫәнбаевтың 95 йыллығына арналған байрамда «Мәрғиә», «Ирмәк» йырҙарын йырланым. «Мәрғиә» («Мәгри») шул уҡ беҙҙең көньяҡ башҡорттары — хәҙерге Ырымбур өлкәһе Аҡсура ауылынан сыҡҡан.

*Түңәрәккәй күлдә яңғыҙ өйрәк,*
*Атма инде, атай ҙа, алаһын.*
*Бирмәҫ ерләреңә бирҙең инде ләй,*
*Әйтмә инде, гәзиз дә балаһын.*

*Тау түшендә ултырып, мин йырлайым,*
*Ҡой күтәрә бераү аръяҡта.*
*Минең хәлләремде кеше ләй белмәй,*
*Үҙем ултырып илайым аулаҡта.*

«Наполеон Бонапарт» тигән бер көй бар ине. Юлай Ғәйнетдиновка бирҙем мин уны. Ҡурайҙа Дәүләтғәли Хәсәнов ҡарт уйнай торғайны, унан өйрәнеп алдым. Бөтөн башҡорт көйҙәрен до беләм, — ти Мөхәмәтйән ағай (Быны, бәлки, бөтөн тобок башҡорттарының йыр-көй байлығын тулыһынса белем, тип аңларға кәрәктер). — «Ҡаһарман кантон»ды миңә өҙөп йырлайһың, тиҙәр.

*Ҡыр аръяҡҡайынан карауан килә, һай кем,*
*Бохаранан түгел, Хиуанан.*
*Ник алдырҙың беҙҙе, Ҡаһарман кантунский,*
*Башҡортский молодса, булмағас штатский.*

*Хуш, Ырымбур ҡалаһы, сәхрә дала(й),*
*Ҡарама ла үҫкән дә тал икән.*
*Ҡаһарман кантунский, булмағас штатский,*
*Башҡортский молодса.*

*Был донъялар ҙа фани икән,*
*Фани донъялар ҙа беҙҙән ҡала икән.*

— Был йырҙы Әбештән Йәнсура Ишмөхәмәтов ҡарт, Аҡназар ауылынан Ғиниәт Юланов йырлай торғайны, — тип кемдән отоп алып һаҡлап ҡалыуы тураһында хәбәр итә Мөхәмәтйән ағай.

Өфөнән алыҫта-алыҫта, Йылайыр урмандары менән Хәйбулла далаларын тоташтырып ятҡан йәмле Һаҡмар буйҙарында күкрәге тулы йыр-моң һаҡлаған, атай-олатайҙар хәтерен күңел түрендә йөрөткән халыҡ йырсыһы, халыҡ уҙаманы йәшәй. Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев йырлағанда уның йөрәгенең яҡтыһы йыр һөйөүсе һәр башҡорттоң, саф уйлы барса кешеләрҙең күңелен яҡтырта, рухына кос-ҡеүәт өҫтәй. Ил өҫтөнә алыҫтағы дала ҡуйынынан, төпкөл ерҙәрҙән тарала был яҡтылыҡ. Ә, бәлки, төпкөл тигән ерҙәребеҙҙең, ҡайһы бераүҙәр-

ҙең әйтеүенсә, бер ҙә ҡараңғы түгел, киреһенсә, кешеләрҙе унда сафыраҡ та, яҡтыраҡ та, күңелдәрҙең ҡояшҡа ла, тәң регә лә яҡыныраҡ булыуынандыр был. Әлдә бар һин, халыҡ донъяһының төпкөлдәрҙән килгән, нур сәсеп балҡып торған илаһи йыр-моңдары!

*«Сыңрау торналар иле» китабы Өфө, 1996. 165–169-сы битт.*

***Кәҙим Аралбай,*** *шағир*

## Моңдарында – зары быуаттарҙың

Музыка сәнғәте белгестәре әйтеүенсә, Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев – донъяла һирәк осрай торған (уникаль) башҡарыусы, тамаҡ төбөнән сыҡҡан юғары тембрҙағы тауышлы, бик үҙенсәлекле моңға эйә йырауcы. Уның репертуарында беҙгә билдәле бөтә башҡорт халыҡ йырҙары ла бар, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ ине, сөнки ул бары тик үҙе яратып йырлаған, үҙе яҡын күргән боронго оҙон көйҙәргә оҫтөнлөк бирә: «Әрме», «Һыр», «Аҡ мәсет», «Ҡаһарман кантон», «Буранбай», «Шафиҡ», «Тәфтиләү», «Порт-Артур», «Вәхит», «Ғәзизәкәй», «Шәүрә», «Мәҙинәкәй», «Сәхипъямал», «Ике лә генә егет», «Ишемгол», «Кәмәлек», «Яҙмыш йыры», «Силәбе», «Ынйы» кеүек йырҙар, Аҡмулла ҡобайырҙарын, Ғ. Тукай, Ш. Бабич шиғырҙарын көйгә һалған күп кенә йырҙары һоҡландыра.

Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев башҡарыуында үрҙә һанап үтелгән башҡорт халыҡ йырҙарының күбеһе магнитофон кассетаһында («БТВ-Медиа». Төҙөүсеһе – ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы Юлай Ғәйнетдинов), шулай уҡ «Төн ҡараңғы», «Мәғфәрин», «Ярлыҡау», «Шәһре Рамазан мөнәжәте», «Ҡоштар бәйете», М. Аҡмулланың «Нәсихәттәр», «Аттың ниһен маҡтайһың?», «Урыным – зиндан», Ш. Бабичтың «Халҡым өсөн», «Ғазазил» кеүек көйгә һалынған әҫәрҙәре сәнғәт фәндәре кандидаты Гөлназ Галина яҙмаһында донъя күрҙе («Ватандаш», 1998, № 3).

боронго йырҙарҙы ул профессиональ артистарса теүәллек менән башҡарыуҙы маҡсат итеп ҡуймай, ә һәр бер көйҙө бары үҙенсә, халыҡсан моң менән, ниндәйҙер бер эске йылылыҡ, йомшаҡлыҡ, ягымлы тембр менән, көтөлмәгән биҙәлештәр, төрлө вәзендәр (музыкаль үлсәм, ритмик мелодика) менән солгап бирә.

Шуныһы ҡыҙыҡ: бер үк йырҙы ул бүтән ваҡытта башҡарғанда бер төрлө генә түгел, ә ниндәйҙер бер үҙгәреш менән, яңы үҙенсәлектәр индереп йырлап ҡуя. Тап ана шул яғы менән Мөхәмәтйән ағай көй импровизиторы булараҡ асыла. Уның был үҙенсәлеге (яңылыҡ индереүе) көй өлкәһендә бер булһа, икенсе йәки был йырҙың тексына ла көтмәгәндә үҙ «өлөшөн» индерә: шымарта, халыҡсан, ябай (китапса булмаған) һүҙҙәр менән алмаштыра, уның аша ҡайһы бер уй-фекерҙе лә көсәйтә. Был йәһәттән ул сәсәнлек традицияларын да үҫтерә. Ундағы сәсәнлек һәләте йыраусылығына көс-ҡеүәт бирә. Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевтың музыкаль ижадының халыҡсанлығы ана шундалыр ҙа.

Халыҡ йырсыһынан ижад биографияһындағы ҡайһы бер этаптар:

**1989 йыл** — Йомабай Иҫәнбаев исемендәге республика конкурсында боронғо башҡорт йырҙарын башҡарыусылар бәйгеһендә беренсе урын яулай.

**1991 йыл** — Башҡортостан дәүләт радиоһы ойоштороған «Башҡорт халыҡ йыры — 91» радиоконкурсында Гран-приға лайыҡ була.

**1992 йыл** — «Аҡмулла» исемле телевизион фильмда мәшһүр шағир һәм мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулла образын ижад итә (сценарий авторы Рәшит Шәкүр).

**2000 йыл** — «Урал хазиналары» башҡорт фольклор ансамбле составында Японияла 70 илдең халыҡ сәнғәте оҫталары араһында Бөтә донъя фольклор фестивалендә ҡатнаша, «Урал моңдарында — башҡорт күнеле» тигән компакт дискыһы донъя күрә.

**2004 йыл** — «Башҡорт халыҡ йырҙары» серияһында 15 оҙон көйлө йыр, мөнәжәт, ҡобайырҙарҙан төҙөлгән магнитофон кассетаһы (альбомы) донъя күрә (ҡурайҙа — Ю. Ғәйнетдинов оҙатыуында).

Быларҙан тыш, Мөхәмәтйән ағайҙың күп тапҡыр телеви-зион тапшырыуҙарҙа, төрлө конкурстарҙа ҡатнашыуы уны халыҡ араһындағы популярлығының үҫкәндәр-үҫә барыуы хаҡында һөйләй.

Мөхәмәтйән бала сағынан уҡ ҡолаҡҡа бик сос, күңеле асыҡ булып үҫә. Алты йәшендә беренсе тапҡыр йыр ишетеп, таң рәнеү кисерә. Әлбиттә, уның быға тиклем дә йыр ишеткәне булғандыр. Әммә алты йәшендә йыр ишеткәндә моң дауылы уны әсир итә, йәнен арбай. Был әсирлек тойғоһо унда ғүмер-леккә ҡала. Шунан алып һәр ишетелгән йырға уның күңел ҡапҡаһы асыҡ була: моң, зиһен ҡапҡаһынан килеп инә лә, яҙғы шифа ямғыр ергә һеңгәндәй, күңел киңлектәрендә юғ-роп ҡала.

1931 йыл. Мөхәмәтйәнгә 7 йәш. Атаһын, Абдулла Ҡотлө-гилде улы Ҡаҙаҡбаевты, яңғыҙаҡ хужалыҡ менән донъя көткән урта хәлле крәҫтиәнде, кулак тип хөкөм итәләр, ғаиләһе менән Себергә оҙаталар. Был «кулак»тың 4 аты, 2 һыйыры, ҡарағай таҡта менән ябылған ике өйө, ағас келәте, өйөндә ике самауыры – бына бөтә байлығы. Ошолар өсөн уны халыҡ дошманы яһап, Кемерово өлкәһенә һөрәләр. Кескәй Мөхәмәтйәнде генә Аҡһыйыр ауылында әсәһе яғынан ҡартатаһы Сәйетгәрәй тәрбиәһендә ҡалдырып китәләр.

Һөргөнгә ҡыуылғандарҙы Кемерово өлкәһенең Томь йылғаһы буйында кеше йәшәмәгән урынға алып барып ташлай-ҙар. Шунда урман ҡырҡып, бик ашығыслыҡ менән йорт төҙөп инәләр. Аслы-туҡлы, төрлө сирҙәрҙән яфаланып, дүрт балаһынан яҙып, ике йыл ошонда ыҙа сиккәндән һуң, улар төрлө юлдар менән тыуған яҡҡа әйләнеп ҡайта.

1937 йыл. Мөхәмәтйәнгә – 13, ҡустыһы Рәшиткә – 1 йәш. Атаһы менән Сәйетгәрәй ҡартатаһын, Ырымбур өлкәһенең Медногорск ҡалаһында балыҡ һатҡандары өсөн, яуыз уйлы кешенең ошағы менән спекулянтлыҡта ғәйепләп, йәнә ҡулға алалар, башта Сембер төрмәһенә, аҙаҡ Йылайырҙа ябып ҡуялар. Етмеште уҙған ҡартатаһы 1938 йылда – Өфө төрмәһендә, ә атаһы, һөргөндә күргән михнәттәренән сиргә һабышып, 1941 йылда вафат була.

Шулай итеп, Мөхәмәтйәнгә атай наҙын, атай хәстәрен йүнләп күрергә лә насип булмай. Һуғыш сыҡҡас инде, ун

[illegible] тыуыу менән үҙен дә 1942 йылда армияға алалар. Ошо Һуңынан ул әрме хеҙмәтендә ете йыл йөрөп, ут-һыу кисеп, [illegible] 1948 йылда ғына әйләнеп ҡайта. Әсәһе, Шәмси-[illegible], ҡартсоһо Шәмсикамал менән картуф, кәбеҫтә сәсеп, [illegible] һыйыр тотоп, колхоз эшендә лә эшләп, донъя көткән.

Мөхәмәтйән ағайҙың һөйләгәндәренән:

— Совет власы беҙҙә мәсет тирәһенә барырлыҡ итмәне. Мөнәрәләр ауҙарылды, мәсет биналары келәт итеп файҙаланылды, йә клуб итеп үҙгәртелде. Боронғо китаптар туҙҙырылды, ут ғамағына быраҡтырылды. Доға уҡыған, Ҡөрьәнде ҡулға алған кешене яратманылар. Эҙәрлекләрҙәр ине, уның [illegible] хосит таратырҙар ине: ана, ул кеше динде һөйләй, Совет власына тел тигеҙә, тип. Кешеләрҙең күңеленән мосолманлыҡ, оҙоп, иман төшөнсәләре юйылыуға дусар ителде. [illegible], аңлы, шәп кешеләр юҡ ителде.

Балалар ғына түгел, хатта ололар ҙа үҙенең ырыуын, нәҫелнәсәбен, тоҡомон белмәй. Бала сағымда Ҡөрьән Кәримде, төрлө доғаларҙы, мөнәжәттәрҙе күп ишетеп үҫһәм дә, муллаларҙың ни өсөн хөкөмгә тарттырылыуы, эҙәрлекләнеүҙәре, бигерәк тә атайымдың ҡулға алынып, алыҫ Себергә һөрөлөүе мине лә шым йөрөргә, дин тип ауыҙ ҙа асмаҫҡа мәжбүр итте. Күп нәмәне эсемдә һаҡларға өйрәндем, үҙ алдыма ғына, ауыҙ эсенән генә мөңрәп-көйләп йөрөргә күнектем. Был фиғелемә, бәлки, шофер булып эшләүем дә булышлыҡ иткәндер. Күбеһен юлда, яңғыҙым, сит-ят күҙҙәрҙән алыҫта булыуым күңел төбөндә бала саҡтан ҡалған моң-зарҙы, халҡыбыҙҙың тарихи көйҙәрен көл аҫтында ятҡан тере ҡуҙҙар кеүек һаҡлай алғандыр.

Мин башҡа төрлө күңел асыуҙы, күңел шөғөлөн белмәнем дә. 20 йыл шофер булып эшләү дәүерендә бер мәртәбә лә эсереп ҡайтманым. Бер ваҡытта ла бер кемгә лә золомлоҡ ҡылманым. Яҡшы кешене яман кеше лә ярата бит. Мине бөтәһе лә яратты.

Өйрәнергә, белергә тырыштым. Йәш саҡтағы өйрәнгәндәрең үҙең өсөн бит ул. Кеше өсөн белем — кеҫәңдәге аҡса менән бер, ал да тотон. Йомарт булырға кәрәк. Күңелең дә, ҡулың да йомарт булһа, кеше һине ярата, һиңә тартыла. Беҙ ҡапҡа асып ингән кешене бер ваҡытта ла буш сығарманыҡ.

Биргән менән кеше ярлыланмай, алған да барыбер бай китмәй.

Кешегә итәғәтле булыу күңелде үҫтерә, изгелекте ишәйт Ҡартатайым: «Балам, тәкәббер булма берүк, кеше һинән я һырамаҫ, үҙе кеүек күрер», – тип өйрәтер ине. Шул һүҙә гел иҫтә тора...

Ҡартатаһы Сәйетгәрәй Ғәлиәкбәров менән ҡартәсәһ Шәмсикамал (йыр «һандығы», табибә, Тибет китабы буйын дауалаусы, им-томсо) үҙҙәренең уҡымышлылығы, донъяға гилем ле ҡараштары менән ейәндәре Мөхәмәтйәнгә баһалап бөткөһ ҙур йоғонто яһағандар. Ата-әсәһе һөргөндә сағында алты-ет йәшлек үҫмергә иң яҡын кешеләренең тәрбиәһе – оло тормо һабағы ла, башланғыс халыҡ ижады мәктәбе лә була.

*Был донъяның барлыҡ йәме – яҡшылыҡта,*
*Ит изгелек, ҡаршы тороп шаҡшылыҡҡа.*
*Яҡшылығың күп мәртәбә кире ҡайтыр,*
*Ғүмерең үтер тыныслыҡта, хаҡсыллыҡта.*
*Был донъяла йән һаҡсыһы – күңел тигән,*
*Күңел тулы саҡта йәшәү еңел тигән.*
*Йырлы күңел – нурлы баҡса ил түрендә,*
*Йыр булмаһа, йәшәүҙәрҙән төңөл тигән...*

Мөхәмәтйән ағайҙың хәтирәләренән:

– Мин йырҙы бәләкәстән ишетеп, тыңлап үҫкәнгәме, үҙем дә мәктәп йәшендә үк йырлап ҡараным. Бишенсе класта уҡығанымда халыҡ алдына сығып йырларға баҙнат иттем. Унда ла оҙон көй булды:

*Алыҫтарҙан (уҡ) күгәреп күренеп ятҡан (уҡ)*
*Урал ғына ерҙең далаһы.*
*Ҡайҙа ла ғына (уҡ) барһа ла яу бирмәгән*
*Данлыҡлы башҡорт ата (ла) балаһы.*

Мөхәмәтйән ағайҙың әсәһе Шәмсибаһар уҡымышлы була, бик күп китаптарҙан боронғо шағирҙарҙың, философтарҙың һәм бүтән ғалимдарҙың әҫәрҙәрен, атап әйткәндә, Әбүғали-

...ини, Руми, Жәми әҫәрҙәренән өҙөктәр, Аҡмулланың, Бабичтың шиғырҙарын, мөнәжәттәрен уҡый, ятҡа һөйләй.

— Әсәйем Аҡмулла, Бабич тип йәшәне, беҙгә лә уларҙы ...ятте. Бабичтың «Башҡортостан» шиғырын ятҡа белә торғаны, минән дә ятлатты. Ә мин балаларға, тиҫтерҙәремә ...ротом. Аҙаҡ инде Бабичтың «Ғазазил»ын көйләп башҡаларға үҙем өйрәнеп алдым:

*Инде уны мәңгелә Иблес, тиҙәр,*
*Ғазазил тип өндәшергә ҡушмайҙар.*
*Билгеле, ожмахта торҙо ул элек,*
*Бар мәләктәргә имам булған булып...*
*Фирҙәүестең ынйы, мәрйен алмаһы*
*Илә зиннәтләнмеш ине сәлләһе;*
*Ысын ебәктән ине тәсбих бауҙары,*
*Тоймәһенең барыһы кәүсәр гәүһәре...*
*НиШләйһең, ҡәлбендә аҡ эҙ булмағас,*
*Кәкре бармаҡ башта уҡ төҙ булмағас,*
*Мәғлүмәт тәүфиҡ илә берләшмәгәс,*
*Выждань аҡылы илә серләшмәгәс...*

— Ғабдулла Туҡайҙың «Туған тел» шиғырын мөнәжәт көйөнө һалып йырлар инек.

Мохәмәтйән ағайҙың бер туған апаһы Зәйнәп тә йырға бик оҫта була. «Хеҙмәт армияһы» тигән һылтау менән уны Силобе ҡалаһына танк эшләү заводына эшкә ебәрәләр. Зәйнәп ҡырыу станогында эшләй. 12—18-әр сәғәт эшләп, хәлдән тайып, радикулит алып, инвалид булып ҡайта ул тыуған яҡтарына. Ҡараусыһы булмау арҡаһында Нефтекамала ҡарттар йортонда йәшәп, шунда вафат була. «Мохәмәтйән йырламаһын, йыр килешмәй, бына мин һағыш-зар менән ауырыу булдым», — тип әйтеп ҡалдырған ул.

— Мин инде шул, ас булайым, ялангас булайым, иллә мәгәр ауылдан бер ҡайҙа ла китмәйем, тип тороп ҡалдым.

*Ике лә генә егет юлға сыҡҡан,*
*Бер тин аҡса тапһаҡ та файҙа,*

тип («Ике егет»).

Тап шуның шикелле, мин дә тыуған ерҙе ташлап бер ки... ла китмәнем. Ауылда эшләмәгән эш ҡалманы. Барыһын ... күрҙек, аслығын да, яланғаслығын да. Тифын да, вабаһын ... Ғүмер буйы ябай кеше булдым. «Кулак балаһы», «дошман ... лаһы» тип йөрөттөләр. Кеше араһына инеп ултыра алман...

Бер ваҡыт шулай, әле йәш ваҡытымда, онотолоп ки... «Ҡаһарман кантон»ды йырлағаным өсөн үҙебеҙҙен түрәлор... беренсе тапҡыр тиргәлдем.

«Нишләп ул тыйылған йырҙы йырлайһың? Кантон... бөткәненә ни ғүмер, ә һин һаман шуларҙы маҡтап йыр... йөрөйһөң. Ҡара уны!..», — тип әрләп ташланы ул мине. Ш... нан кире мин «Ҡаһарман кантон»ды «Түрәкәй» тип, исем... үҙгәртеп тә, йырлап йөрөнөм.

— Был яҡтар, беҙҙең Һаҡмар-Наҙарғол ауылы, Ҡатра... Бүреһенән, унда йәшәп, донъя ҡуйған Ейәнгол (Йәнгол) ҡар... тан (йәгни атайымдың ҡартатаһынан) таралған. Ул беҙҙең ыры... шәжәреһендә лә бар...

Мөхәмәтйән ағайҙың шәжәрәһе Үҫәргән ҡәбиләһене... Шешәй ырыуына килеп ялғана. Уның ырыу тарихын... ҡағылышлы мәғлүмәттәргә туҡталырҙан алда, башта уны... шәжәрәһенә күҙ һалайыҡ.

Шәжәрәлә Ҡунаҡ тархан —Үҫәргән ырыуының ҙур... шәжәрәһендәге «Ҡунаҡтар атаһы» тип аталған ара йәки түбәне... башлығы. Унан таралмыш балалар, тора-бара ишәйеп, Аҡъюл, Ишбирҙе, Арыҫланғол (Сик), Һаҡмар-Наҙарғол (Һаҡмар Бүреһе), Һарылар (Аҡъегет), Йәнтеш (Һары-Монтай), Ғәбделмөъмин (Айыулы) һ.б. ауылдарҙа йәшәгәнлеге мәғлүм.

Мөхәмәтйән ағай Ҡаҙаҡбаевтың әле донъя көтөп ятҡан ауылы уның 7—8-се быуын ҡартатаһы Наҙарғолдоң исемен йөрөтә. Халыҡ телендә ауылды Һаҡмар Наҙарғоло йә Һаҡмар Бүреһе тиҙәр. Бының да үҙ хикмәте бар. Күрәһең, Наҙарғол ҡарттың Һаҡмар һыуы буйындағы әлеге ауылына ҡәҙәр йәнә бүтән урында ла ауылы булған. Быға асҡысты бер ауылдың икенсе исеменән дә табабыҙ — Һаҡмар Бүреһе. Ә Һаҡмарҙың түбәнендә, Ҡатралы йылғаһы буйында, Ҡатралы Бүреһе тигән ауыл да бар. Ҡатралы — Һаҡмар йылғаһынан һул яҡ ҡушылдығы. Һаҡмар Бүреһе — Ҡатралы Бүреһе — Баш Бүре: был сылбырҙар асылда — бер ырыу кешеләренең төп биләмәләре, һәм унда улар нигеҙ һалған ауылдар.




Мөхәмәтйән ағайҙың шәжәрәһе

Наҙарғол Ташбулат улының Һаҡмар йылғаһы буйҙарында иркенләп – йәйен далала һутлы үләнле урындарҙа йәйләп, ҡышын урман ышығындараҡ ҡышлау йорттарында ҡышлап йөрөгәнлегенә лә ишара был ауылдарҙың шулай төрлө урындарҙа нигеҙләнеүе. Мәҫәлән, Баш Бүре тигәнебеҙ – Һаҡмар Бүреһендә Түбәнге Наҙарғол булыр, бер аҙ үрҙәрәк – шул уҡ үҫәргән башҡорттарының ырыу аралары *бүре* һәм *ҡунаҡ*. Наҙарғолдоң икенсе йә өсөнсө быуын олатаһы – Ҡунаҡ тархан. Тимәк, әйтелгән ауылдарҙағы *ҡунаҡтар* – уның балалары, нәҫеле.

— Ейәнғол ҡартатайыбыҙ ҡурайсы булған. Ҡурайҙа уй ғанда унын моңо Һаҡмар үҙәне буйлап тарҡалып, яңғырап, ол ҡайҙа ятҡан ауылдарҙа ла ишетелер булған. Тирә-яҡта ер и кен, мул, һутлы үләнле туғайҙар күп. Бесәнде күп сапҡан Ейә гол. Бер йот йылда бер көбән бесәнгә бер байталды алм шып, аҙаҡ шул бер баш ат менән байып киткән. Байталда бер өйөргә еткән. Әбей үлгән таш тигән урын бар. Шул тирә йәйләп йөрөгәндә аттары юғалған Ейәнғолдоң. Биш йылд һуң ғына аттарын барып тапҡан. Гөбөрлө йылғаһы яғынд (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Новокиевка тирәһе) йөрөгә Йылҡы ишәйеп, өйөр күбәйеп киткән икән. Бына борон ҡала иркен — ирек булған: ер ҙә күп, кеше малына теймәгәндәр ҙ Хәҙер булһа, малыңды бер күн ҡарамаһаң, шунда уҡ ҡыуы та алып китәләр, иртәгеһенә таба ла алмайһың.

— Ерҙәрҙең күп атамалары ҡаҙаҡса: Ҡаҙаҡ төшкән үҙәге Ҡанбикә тауы, Ҡыҙылбай тауы, Сапаҡ кисеүе, Тимербай тауы, Моһал тауы, Күкәш кисеүе... Был юҡтан түгел: беҙҙең яҡта борон ҡаҙаҡтар йыш сабауыллап, баҫҡын яһап, башҡорттон малын ҡыуып алып китер булған. Ана шунан ике арала яу сыҡҡан, киткән ҡан ҡойош... Ер-һыу атамалары шул осорҙан ҡалған инде. Онотолмағандар.

— Кем күпме ҡысҡырып йырлай ала, шул шәп йырлай тип уйларға ярамай, — тип һүҙен дауам итә Мөхәмәтйән ағай. Һәр йылғаның үҙ ағышы булған шикелле, һәр көйҙөң үҙ айы-шы, үҙ моңо бар. Мөнәжәттә көйҙөң илаһилығы, ябайлығы, йөрәк түренән сығыуы менән кешенең зиһенен иләп кенә, яйлап ҡына арбап ала.

Ҡартатайҙар, «наҙан» булһа ла, мөнәжәттәрен әйтеп ултырҙылар. Уларҙың ҡайһы береһе уҡый-яҙа белмәгәндәр ҙә, әммә бөтә ғилем — уларҙың күңелендә, хәтер дәфтәренә яҙыла барған. Шуға күрә лә улар доғалыҡтарҙы, аяттарҙы, мөнәжәт, бәйет, йыр, һәр төрлө тарих вә хикәйәттәрҙе ололарҙан ишетеп, отоп алып, үҙҙәре лә яттан һөйләп йөрөрҙәр ине.

Мөхәмәтйән ағай Һаҡмар буйында миңә әллә күпме мөнәжәттәр көйләп ишеттерҙе: «Шәкерт мөнәжәте», «Хаҡҡа шөкөр», «Хыҙыр Ильяс», «Ибраһим»... Һәр береһе үҙенсә, үҙ моңо, үҙ һағышы, үҙенсә генә хис-наҙы.

*Ғилимдәрҙең һүҙен алмаҡ, нәсихәткә ҡолаҡ һалмаҡ,*
*Мәсжид сари ҡәдәм ҡуймаҡ, дусар булдым яфаларға...*
*Ҡәләм алдым тибретмәгә, күңелләрҙе йыуатмаға,*
*Монажәтемде яҙмаға, рәхим ҡылғыл, тәғали алла...*

Һаҡмар шаршылары бер туҡтауһыҙ сылтыр-сылтыр йырлай ҙа йырлай. Һаҡмар һыуының бейек ҡаяларға ҡаҡлығып ярһып боғолоп аҡҡан типһен ташлы ерендә Мөхәмәтйән ағай монажәттәрен көйләй ҙә көйләй. Уның тамаҡ төбөнән сыҡҡан тауышын да, тилбер ҙә, ярһыу ҙа, тетрәнгес тә монон ҡаршы яр ҡырындағы бейек өнһөҙ ҡаялар баш баҫып тыңлай...

*Хәсибә тауы...*
*Быҙау осҡан ҡаяһы...*
*Әбей үлгән таш...*
*Ҡанбикә тауы...*

Ҡорок урынында һуҙып-һуҙып, күкрәк түрҙәренән әкрен генә һыҙып-һыҙып йырлауындалыр ҙа уның моңо, шиғри аһәңле нескә хискә сорнап биреүендәлер ҙә йырҙың арбау көсө.

*Уралҡайым бирмәҫ ай сарсарға,*
*Йырсы бирмәҫ йырға сәсәргә.*
*Уйға батмаҫ та ғына ирҙәр булмаҫ,*
*Ғәмһеҙ ҙә генә булмаҫ сәсәндәр...*

Япон ғалимы, фольклор белгесе Танимото Кадзуйуки:

– Оҙон көйҙәрегеҙҙе юғары профессиональ кимәлдә башҡарыусы шәп йырсыларығыҙ күп. Әммә милләт моңон, башҡорттоң үҙенә генә хас, боронғо, халыҡсан йыр сәнғәтен әлегә берәү генә һаҡлай алған. Ул – йыраусы-сәсән Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев. Был кешенең моңонда халыҡ рухы, халыҡ күңеле ята. Ә һеҙҙә оҙон көй – ысын мәғәнәһендә милләттең рухи сығанағы...

Һаҡмар буйындағы бәләкәй генә Наҙаргол ауылына япон ғалимдары ике тапҡыр килә. Ауыл халҡы менән осрашып, күмәк уйын-көлкөнө, ирәбе-ихлас әңгәмәләрҙе күреп, аһәңле йыр-моңдо ишеткәс, йәнә һоҡланыуҙары арта. Профессор

Танимото фольклор йыйып, ил ҡыҙырып күп йөрөгән, күп күргән, күп ишеткән, халыҡ талантгарын күп тыңлаған.

Йыраусы Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевтың үҙенсәлекле моңон бер ғәжәпләнһәләр, уларҙы бында аптыратҡан нәмә — ер! «Был тиклем ерҙе нинә буштан-буш ятҡыралар икән?», — тип ғәжәп ҡылып, баш сайҡап йөрөгәндәр — Алыҫ Көнсығыш-тағы тирә яғын дәһшәтле диңгеҙ уратып алған утрауҙарҙа йәшәп ятҡан, ер ҡәҙерен белгән япон дуҫтар.

Эйе, башҡорт еренә кем генә һоҡланмаған да, Уралыбыҙ-ға кемдәрҙең генә күҙе ҡыҙмаған! Боронго замандарҙа ғына түгел, еребеҙгә ҡарата ошондай мөнәсәбәт, ҡараш әлеге көндә лә үҙгәрмәгән. Еребеҙгә хәстәрле һәм һаҡсыл булырға, уны һаҡларға кәрәклекте лә аңлатмаймы ни был?!

Ана бит Һаҡмар буйындағы алыҫ, бәләкәй генә төпкөл бер ауылда йәшәп ятҡан, һикһәнде уҙған Мөхәмәтйән ағай Ҡаҙаҡбаев та беҙгә был хаҡта бөйөк Бабичтың шиғырҙарын көйләп ишеттерә, иҫкәртә түгелме:

*Уралҡайҙың аҫты алтын,*  
*Өҫтө шиғыр, үҙе нур;*  
*Киләсәктә был ергә*  
*Хоҙай үҙе ҡыҙығыр...*  
*Башҡортостан — йәмбостан,*  
*Илһамыстан, шиғырстан,*  
*Шунда тыуған, шунда үҫкән*  
*Башҡорт намлы арыҫлан!..*

Төпкөл ауыл тигәндән, Наҙарғол (йәғни Һаҡмар Бүреһе), район үҙәгенән һәм тимер юл станцияларынан бик алыҫта ятһа ла, ул бер ҙә төпкөлдәге ташландыҡ, онотолған ауыл түгел бөгөн. Ауыл тоҙөк, етеш шәхси хужалыҡтар. Матур йорт-тар газ менән йылытыла, эсәр һыу хәл ителгән, урамға ас-фальт йәйелгән. Мәктәп, клуб, магазин — бөтәһе лә бар.

Ә бит уйлап ҡараһаң, тап ана шундай төпкөл ауылдарҙа халыҡ таланттары (сәсәндәр, йырауҙар, ҡобайырсылар һ.б.) күберәк һаҡланып ҡалған шикелле: Мәхмүттән — Байыҡ Айҙар сәсән, Иҙрис ауылынан — Ғәбит сәсән Арғынбаев, Балапандан — Ишмөхәмәт сәсән, Туҡһанбайҙан — Аҡмулла сәсән,

[illegible]ноҙенән — Шафиҡ Әминев-Тамъяни һ.б. Был күренеш, ул нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, тарихи-социаль яҡтан ни-[illegible], рухи йәһәттән дә аҡлана. Сәнки цивилизация шауҡы-ны уларға тиҙ генә йоғонто яһамай, һәм бындай төпкөл ауыл-дарҙағы этник аң, рухи менталитет тотороҡло, бүтән яҡтарға ҡарағанда ер, ил тойғоһо шаҡтай көслө һаҡланыусан булыу-ын да кило торғандыр. «Төпкөлдә ятҡан ауыл» тигәнебеҙ, ысынлап, ул бәләкәй ер түгел, ә оло илдең шул уҡ бер өлөшө, унһыҙ ил дә тулы булмаҫ ине. Мөхәмәтйән йыраусы-сәсән [illegible] ятҡан бәләкәй генә Наҙарғол ауылы ла — ана шундай ил кимәлендәге оло яҙмышлы ауылдарҙың береһе.

2006 йылдың көҙөндәге осрашыуыбыҙҙа Мөхәмәтйән ағай [illegible]терәк һөйләшкән һүҙҙәребеҙгә йомғаҡ яһағандай әйтеп ҡуйҙы:

— Мин бөтөн кәмселекте үҙ милләтемдән күрҙем, маҡтау-ҙы, һурлауҙы ла үҙ халҡымдан күрҙем. Үҙ алдыңа ғына йыр-лап йөрөү бер мөл килеп кешегә тынғы бирмәй башлай, үҙеңә ҡарата бер төрлө ризаһыҙлыҡ тыуа. Йән әрней. Бер ваҡыт: «Ысынлап ошо моңдар юғалып ҡалырмы икән?», — тинем үҙемә. Уйлауымса, үҙем генә белгән тиҫтәләгән боронғо көй, мөнәжәттәр, йәнә бәйеттәр... Аҡмулланың өгөт-нәсихәттә-рен, Бабич шиғырҙарын көйгә һалып башҡарҙым... Рәхмәт Юлай ҡустыға (Ғәйнетдинов), ишетеп ҡалды, килде, яҙып алды. Магнитофонына яҙҙы, телевидениенан күрһәтте. Японияһынан да ҡалдырманы... Шуға ҡыуанам: мине халҡым ишетте, тыңланы, күрҙе...

Һуңғы барғанымда ул миңә атаһынан ҡалған ағас келәтте күрһәтте.

— Атайҙан хәҙер икәү генә тороп ҡалдыҡ инде: иҫке келәт тә мин. Йәнә туҙып бөткән бер шкаф та бар, уныһын Ҡыуан-дыҡ баҙарынан һатып алған. Ә келәтте үҙе төҙөгән. Келәтте лә, шкафты ла кулак милке тип яҙып киткән саҡтары булды беҙҙең был замандың...

Иҫке ағас келәт — «кулак келәте». Ағастан һырлап-биҙәкләп эшләнгән иҫке шкаф — «кулак шкафы». Хәҙер икеһе лә үткән осорҙарҙың шаһиты — музей экспонаттары һымаҡ ҡына ҡалған.

Ләкин Мөхәмәтйән ағайҙың һөйләүендә иҫке ағас келәт, әйтерһең дә йәнле нәмә кеүек, гүйә ул — уның бер туғаны.

Иҫке келәт – уның өсөн ҡомартҡы ғына түгел, ә йәненә яҡын нәмә. Атаһының төҫө лә...

*Ғүмер ыҙандары кеүек*
*Бүрәнәнең һырҙары.*
*Бүрәнәнең һәр һырында –*
*Әсәйемдең йырҙары.*
*Һаман тигеҙ, шыма, төп-төҙ*
*Түшәменең урҙаһы.*
*Һәр таҡтала, һәр бер сөйҙә –*
*Атайҙың күҙ нурҙары.*
*Иҫке келәткә уларҙың*
*Йәндәре күскән кеүек.*
*Шуға келәт элеккесә*
*Эйә ҙур көскә кеүек –*
*Тартып тора зиһендәрҙе,*
*Әйтерһең, бер кәшәнә.*
*Әруахтарҙың шат рухтары*
*Китмәгән, гел йәшәгән...*

Сәсәнден көсө – боронголоҡ менән айырылмай йәшәү рәүешендәлер ҙә: башҡорттоң үткән замандарҙан бөгөнгәсә күсә килгән йыр-моңон, көйҙәрен онотмау; тормош тәжрибәһен, кәсептәрен һаҡлау: умарта тотоу, бал ҡорттарын ҡарау... Мөхәмәтйән агай үҙе генә белгән алымдар менән буҙа ҡоя, бал балы яһай. Уның шәхси хужалығында боронғо ата-бабалар йәшәгән дәүерҙән ҡалған бөтә кәрәк-яраҡ бар. Шуларға ҡарап ҡына ла, әйтәйек, башҡорт этнографияһын өйрәнеүсе студенттар халҡыбыҙҙың боронғо тарихынан практик курс үтә алырҙар ине.

Мөхәмәтйән ағай ғүмеренең байтаҡ йылдарын, үҙе әйткәнсә, ғәйрәтле йылдарын, техника менән эш итеүгә арнаган, шофер булып эшләгән. Хаҡлы ялға сыҡҡас инде, ысынлап бал ҡорттары ҡарауға, умарталыҡ менән шөғөлләнергә тотонған.

Бал ҡорттарын үрсетеү (дадандарын иҫәйтеү), халыҡҡа шифа вә дауа булыр бал етештереү – хәҙер уның төп кәсебе. Был шөғөл, атай-олатайҙарҙан ҡалған һәм быуындан-быуынға күсә килгән боронго кәсеп булһа ла, хәҙер уның менән күп

мине шөгөллөнә алмай ҙа, белмәй ҙә. Бал ҡорто — бик наҙлы бал эшһе. Уға ҙур иғтибар, күп хеҙмәт һалғанда ғына ҡорттар бал, сифатлы һәм тәмле бал бирә. Мөхәмәтйән ағай был эш менән хәҙер инде бык нык мауығып, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән шөгөлләнә. Ҡорттар тураһында күпте белә ул.

— Ошо хәлгә еткәнсе, йәғни бал ҡорттары менән ихласлап эш иткәнсе, күпме юлдар үттем! Хәҙер аптырайым — ниңә иртәрәк, йәш саҡтан уҡ тотонмағанмын икән был эшкә тип. Хәҙер бал ҡортоноң йәмен-тәмен татығанға әйтәмдер инде. Ләкин яҙмыштан уҙмыш юҡ. Яҙмышым шулай ҡушҡас, замана икенсерәк булғас, машина йөрөткәнмен, колхоз эше тип йүгерелгән. Ғүмер тигәнең, көтөп тормай икән — үткән дә киткән.

Үҙемде иҫ белә-белгәндән алып мин йыр менән, мөнәжәттәр менән йәшәнем. Юлда йөрөгәнемдә лә, бесән сапҡанда ла, мәжлестә ултырғанда ла йырланым. Әммә шул йырҙарҙы, мөнәжәт, бәйеттәрҙе ысынлап тороп халҡыма еткергәнсе күңел төбөндә күпме алып йөрөнөм, күпме юлдар үттем! Тәжәп инде. Һөйләһәң, үҙе бер китаплыҡ...

Шулай инде әҙәм балаһының тормошо: үҙ асылын асҡансы әллә күпме һынауҙар үтергә, әллә күпме әр ишетергә, әрнеүҙәр йотorға тейеш, һәм бары шунан һуң ғына ул үҙ асылын таба. Ғүмер бик ҡыҫҡа. Асылымды тапҡас та мин иң изге теләгем — халҡым өсөн үҙ белгәндәремде тиҙерәк еткерәйем тигән уй менән йәшәнем...

Тере тамырҙарыбыҙға һут биреүсе, беҙҙе рухи тәрбиәләүсе ул — йыраусы, сәсән телле, йор һүҙле ил аҡһаҡалы Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев.

«Йырға булған осҡон балалар күңелендә тоҡанһа — беҙҙең төп маҡсатыбыҙ шул», — тип йәшәй ул.

*«Хәтеремдең тере ҡуҙҙары» китабы.*
*Өфө, 2007. 268–281-се биттәр*

## Боронғоларҙан аманат

Хәйбулла районының Наҙарғол (Һаҡмар Бүреһе) ауылы да йәшәүсе 73 йәшлек йырсы-сәсән Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡба республикала киң билдәле кешеләрҙең береһе. Уның йыр-моң радио-телевидение аша йыш ҡына тапшырыла килә, ижад тураһында төшөрөлгән телевизион фильм тамашасылар күңе ленә хуш килде, ә инде йырсының «Аҡмулла» тигән докумен таль фильмда бөйөк шағир Мифтахетдин Аҡмулла образын төшөүе уға ысын мәғәнәһендә киң танылыу килтерҙе. Эйе Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев репертуары бик бай һәм фәһемле Ваҡытлы матбуғатта уның тураһында бер нисә публицистик очерк та баҫылып сыҡты. Һәр фольклорсы, әҙәбиәт се өсөн ул, һис шикһеҙ, уникаль информатор. Шулай булыуы ҡарамаҫтан, йырсы-сәсәнден репертуары бер аҙ яҙылып алын һа ла, ул ғилми яҡтан өйренелмәгән, хатта баҫылмаған да Шуға күрә, был мәкәләлә беҙ Мөхәмәтйән олатай Ҡаҙаҡба евтан үҙебеҙ яҙып алып нотаға һалған ҡайһы бер бәйет мөнәжәттәрҙе уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итмәксебеҙ.

Бәйет һәм мөнәжәттәр, боронғо китап көйҙәре, шулай уҡ Ҡөрьән сүрәләрен уҡыу – Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев ижадының ҡабатланмаҫ һәм үҙенсәлекле бер йүнәлеше. Уларҙы тыңлаған да башҡарыусының оҫталығына, тапҡырлығына тағы ла бер ҡат һоҡланмай мөмкин түгел. Бөгөнгө көндә дин өлкәһендә мәғлүмәтле һәм белемле, боронғо көйҙәрҙе һәм шиғырҙарҙы яттан белгән кешеләрҙе табыу, ай-һай, ҡыйын шул.

«Бөтә бәйет, мөнәжәттәрҙе, төрлө китап көйҙәрен мин ҡартатайым Ғәлиәкбәров Сәйетгәрәй Бәхтегәни улынан (ул 1870 йылғы ине), Шәмсикамал ҡартөсәйемдән һәм ҡәҙерле әсәйемдән, уларҙың берҙән-бер ҡыҙҙары – Шәмсибаһар Сәйетгәрәй ҡыҙынан (1901 йылғы) отоп алдым. Мине сабый саҡтан ҡартатайҙарым (ул заманының бик уҡымышлы муллаһы ине) үҙҙәренә, Аҡъярға алып, боронғоса дини тәрбиә бирергә тырыштылар. Бөтә белгәндәрен өйрәттеләр. Шулай итеп, бала саҡта өйрәнгән нәмәләр әле булһа хәтерҙән сыҡмай. Йырҙарҙы мин ҙурая төшкәс, үҙләштерә башланым», – тип һөйләй Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев. Шулай итеп, ул «Мөхәммәҙиә» китабының мөнәжәттәрен

...ң туғандары, таныштары ижад иткән мөнәжәттәрҙе лә отоп ...ып, беҙҙең көндәргәсә алып килеп еткергән.

Бына, мәҫәлән, элек бөтә мәҙрәсәләрҙә лә өйрәнелә торған «Мөхәммәҙиә» китабының «Мәғфәрин» («Ярлыҡау») исемле мөнәжәте:




*Наил улдым хуп ямалың*
*Ни төшөмдә күрмәгә.*
*Рөйәтеңлә йәмлә маҡсудым*
*Морадым ирмәгә.*
*Уғы бари хаҡ кибаш*
*Баш эйеп йөҙ сүрмәгә.*
*Төштө күңелем йә Мөхәммәт*
*Йәнемар дулар сәни.*
*Көйҙөрөп янымды (йәнемде) алдың*
*Ҡылманың һис илтифат.*

Был мөнәжәттең һүҙҙәре күптәргә аңлашылмаһа ла (у... Мөхәммәт пәйғәмбәрҙе данлауға арналған), уның көйө халы... күңеленә ныҡлап һеңеп ҡалған. Музыкаль практика шуны... күрһәтә: совет осоронда сығарылған бик күп бәйет... мөнәжәттәр элекке, таныш көйҙәргә көйләнгән, һо... Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевтың репертуары ла был фекерҙе би... асыҡ раҫлай.

Ҡартатаһы Сәйетгәрәй тарафынан ижад ителгән «Төн ҡа... раңғы» мөнәжәте, мәҫәлән, әле генә килтерелгән «Мәгфәрин... көйөнә һалынған һәм коммунистик режимды фашлай, хат... уға хөкөм булып яңғырай:

*Төн ҡараңғы, дөм ҡараңғы, яҡты шәм янмаҫ микән,*
*Ямғыр урынына хоҙаның рәхмәте яумаҫ микән.*
*Ҡандан эшләнгән бағаналар тамам аумаҫ микән,*
*Донъяның шайтандары етер, бер-бер бығаулаңмаҫ микән.*
*Йөҙ түбән китмәҫме афәт, аҫҡа ҡапланмаҫ микән,*
*Ҡанлы диңгеҙ фаяз*, рахман* берлә паҡланмаҫ микән.*
*Бөтә өлфәт* бәндәләрҙең тәндәрендә ҡан менән,*
*Тапһа рәхәтлек, хозурлыҡлар таба ғисьян* менән.*
*Иң түбән эттәр, бесәйләр уйнайлар ғирфан* менән,*
*Сарпушалар* мең зобаныйлар* был көн ризуан* менән.*
*Тарлана йән илә анлар йән әсеткес ғаз(а)* микән,*
*Ил ҡоторҙо, әллә инсанлар бары ханнас* микән.*
*Ер менән күктең араһын ҡапланы хур, әр* был көн,*
*Күрмәйһеңме һәр бер инсан, ки Нәкир Мөнкир* был көн.*
*Һәр сәмәуи* изгелекте тап-тап иҙҙе шәр был көн,*
*Ер йөҙөндә бер ҡиәмәт ер был, көн мәхшәр был көн.*
*Китте ерҙәр, ҡороно күлдәр, тамсы һыу таммаҫ микән.*
*Юҡ, өмөтһөҙ булмай мәле, һәр хыялым — бер өмөт,*
*Мин фәҡир булһам әгәр, күңелемдә йыуаталыр өмөт.*

Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев һөйләүе буйынса, был мөнәжәт 30-сы йылдарҙа сығарылған, уны ауыл ҡарттары йыйылышып, йәшерен генә көйләр булғандар. Сәсәндең ҡартатаһы 1937 йылда ҡулға алынып, төрмәгә китер алдынан был мөнәжәтте ҡағыҙға яҙып, үҙенең китаптарының береһенә ҡыҫтырып киткән.

Репрессия фажигәһе был ғаиләгә бөтмәҫ хәсрәттәр килтерә. Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевтың Сәйетгәрәй ҡартатаһы Өфө төрмәһендә 1938 йылдың көҙөндә вафат була, ә ата-әсәһе уға тиклем үк дүрт балаһы менән 1931 йылдың авгусында алыҫ Кемерово өлкәһенә һөргөнгә ебәрелә. Улар ике йыл эсендә бөтә балаларын аслыҡтан юғалтып, Башҡортостанға кире ҡайталар. Ете йәшлек Мөхәмәтйән ҡартаталарында йәшәгәнлектән иҫән ҡала. Себерҙә йәшәгәндә башына төшкән михнәттәре тураһында әсәһе мөнәжәт сығара һәм ғүмер буйы уны «Йософ менән Зөйләйхә» китабының түбәндәге көйөнә көйләй. Ҡартатаһы кеүек үк, әсәһе лә был мөнәжәтте дәфтәргә яҙып ҡалдыра, яҙмалары юйылғанлыҡтан, беҙ уның бер өлөшөн генә килтерәбеҙ:

**Күңелһеҙ**




*Илебеҙҙән сығып киттек иҫәнләшеп,*
*Атам-әсәм илап ҡалды бәхилләшеп,*
*Ҡайтһаҡ ине беҙ — меҫкендәр әйләнешеп,*
*Шулай итеп, хәйер доға ҡылғыл инде.*
*Сәүитеский ф(ы)лыгларын кем буяған,*
*Был сәфәрҙең оҙаҡларын кем уйлаған,*
*Хисабы юҡ был донъяла ҡан илаған,*
*Бер хоҙайым фазыл* менән ҡотҡар инде.*
*Балта, бысҡы тотоп талды беләкләрем,*
*Иҫкә төшһә, яна минең йөрәкләрем,*
*Ҡабул итһен бер хоҙайым теләкләрем,*

*Бер хоҙайым, үҙең генә ҡотҡар инде.*
*«Йософ» китап көйө менән мин көйләйем,*
*Башҡа төшкән хәсрәтемде мин һөйләйем,*
*Был хәсрәттә нисек ғүмер кисерәйем,*
*Бер хоҙайым, үҙең генә ҡотҡар инде.*
*Беҙ меҫкендән был хәсрәтләр китәр микән,*
*Хәсрәт бөтөп, рәхәт көндәр етәр микән,*
*Ҡайтып күреү шулай насип булыр микән,*
*Бер алланан шуны өмөт итәм инде.*
*Уҡырһығыҙ был ҡағыҙға яҙған һүҙҙе,*
*Бер күрергә насип булһын йөҙөгөҙҙө,*
*Был ҡазаны бирҙе беҙгә мәүләм* жәлил*,*
*Йә, хоҙайым, үҙең ярҙам биргел инде.*
*Был бәйетте мин яҙамын һеҙҙең өсөн,*
*Яна торған утҡа ҡарап ғибрәт алам,*
*Бер хоҙайым, үҙең ярҙам биргел инде.*
*Әсир булып айырылды ғәзиз башым,*
*Хәл һорарға юҡ бит минең ҡәрендәшем,*
*Туғандарым, беләгеҙме минең хәлем,*
*Хәҡиҡәт шул миҫалда минең хәлем.*

Мөнәжәттәргә үтә һәүәҫ әсәһе ологайған көнөндә лә (у… 1980 йылда вафат була) хәлен белдерткән тағы ла бер мөнәжә… сығарып, уны боронғо «Хаҡҡа шөкөр» китабының көйөн… көйләгән. Беҙҙең уйлауыбыҙса, уны «Ҡартлыҡ мөнәжәте» ти… атарға булыр ине:

**Уртаса тиҙ, зар менән**



*Ҡулына алыубән таяҡ,*
*Ҡаранубән* уяҡ-быяҡ,*
*Торол баҫырға юҡ аяҡ,*
*Баҫарса* башы әйләнә.*
*Ағырҙар йәше йөҙөнә,*
*Төшөрсө башы теҙенә,*
*Эренләр ҡата күҙенә,*
*Күргәнләр уны ерәнер.*

Күреүебеҙсә, был осраҡта ла боронго китап көйө яңы мөнәжәт сығарыуға музыкаль сығанаҡ булған.

Оло йәштәге информаторҙарҙың һөйләүе буйынса, 20–30-сы йылдарҙа совет власына, коммунист-комсомолецтарга, яңыса йәшәргә тырышҡан кешеләргә ҡаршы дин әһелдәре тарафынан әллә күпме бәйет, мөнәжәттәр, төрлө шиғырҙар сығарыла. Мәҫәлән:

*Сәллә урынына картуз кейә шәкерт, хәлфә,*
*Өҫтөндә лә ҡыҫып тора билен пәлтә.*
*Урыҫ булып күренәйем тип йөрөй халыҡҡа,*
*Һис тотмайлар был ахмаҡлар шәригәт.*

Бындай шиғырҙарҙы Аҡъярҙа йәшәгән мулла Ғәйнетдин Сағынбаев күпләп сығарган, уларҙы халыҡ араһында һөйләп йөрөгәне өсөн ҡулга алынып, һөргөнгә оҙатыла. Ә инде уның «Балаларығыҙға» тип аталган мөнәжәте киләсәк быуындарга васыят булып яңгырай, бәлки шуга ла уны күптәр отоп, көйләгәндәрҙер:

**Хәрәкәт менән**




Вариант:




*Белең иман сикез сыбу ти йәсифат,*
*Ани белмәк бәндәләргә фарзыят*.*
*Хәйер сәмигә мөкәүирә васил,*
*Һәм гәлимә, һәм мөриҙе (мөрит)*
*Мөтәкилле мөҡәдир.*
*Ике сәлбиә сифатының бери,*
*Угыл ҡаҙҙан гәйепләрҙин һәм бери.*
*Тәңре ул һис нәфсәләргә оҡшамаҫ,*
*Һис нәсрә уга даһи оҡшамаҫ.*

Мөхәмәтйән олатай Ҡаҙаҡбаев әсәһенән «Ҡоштар бәйете»н дә отоп алган. Был бәйетте элек шәкерттәр ижад иткән һәм уны төрлө йән эйәләре – сиңерткә, себен, серәкәй, баҡа, төрлө ҡоштарга арнагандар. Ул иһә әсәһенең китап буйынса көйләп укыгандарынан әҙ генәһен иҫтә ҡалдыргаи:




*Һаман да саҡыра кәкүк,*
*Ушандаҡ һәм Саҡ илә Суҡ,*
*Аның ауаздары бик хуш,*
*Ишедәнләр ула биһуш*.*
*Зәкер ҡыл дәхи* турғайга,*

*Сәнә* уҡый ки хоҙайға,*
*Ағыҙма йәште күҙләрҙән.*
*Сәхер ваҡытында күгәрсен,*
*Пәсәк кеүләренә түҙәрһең,*
*Аңы ишетеп нә түҙәрһең,*
*Сәхәр тормаҡ ни ғәҙәт ҡыл*
*Сәхәрҙә әйтһә бер алла,*
*Юяр йөҙ мең ғонаһ алла,*
*Улыр ул тәҡти дәлхә*,*
*Сәхәр тормаҡ ни ғәҙәт ҡыл.*
*Күрен күлдәрҙәге баҡа,*
*Нәсә тәсбих итәр хаҡҡа,*
*Быны ишетеп ғибрәт ал, халҡа,*
*Ки ғибрәт алһа аңларҙар.*

Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев репертуарындағы тағы ла бик ҡыҙыҡлы мөнәжәт – ул ҡаҙаҡ шағиры Мәүләкәй Йомасиков һүҙҙәренә көйләнгән «Мөхәммәт өммәтенә йә шәһре Рамаҙан» мөнәжәте. Ул Рамаҙан айында, ураҙа ваҡытында әйтелә. Мөхәмәтйән олатай уны әсәһе менән бергә 1933 йылда ауылдан-ауылға, өйҙән-өйгә, мөнәжәттәр уҡып, хәйер һораған бер ҡаҙаҡ кешеһенән отоп ала. Һуңыраҡ был мөнәжәттең һүҙҙәре булған китабы ла табыла. Ул пәйғәмбәрҙең тарихы тураһында хикәйәләй, ғөмүмән, унда ислам тарихына бәйле бик күп легендар ваҡиғалар сағылыш тапҡан. Бөгөнгө көндә дингә, боронғо мөнәжәттәргә ҡыҙыҡһыныу арта барғанлыҡтан, беҙ был мөнәжәттең тексын тулыһынса килтерәбеҙ, аңлашылмаған урындарына аңлатмалар бирәбеҙ. Был мөнәжәт шулай уҡ музыка белгестәре өсөн ҡиммәтле үрнәк була ала, сөнки башҡорттар араһында был көйҙөң төрлө варианттары тыуа:

Рухланып



*Йән биреп, иман биреп руза тотҡан,*
*Беҙләрҙә руза тотмаҡ шунан ҡалған.*
*Нух пәйғәмбәр ҡәүменә доға ҡалған.*
*Ерҙең йөҙө барсаһы һыуға тулған.*
*Шул һыуҙа күп иманһыҙ һәләк булған.*
*Пәйғәмбәрем үҙ ҡәүменә кәмә ҡылған[1].*
*Муса ирди ғасасы* йылан булған[2],*
*Тур тауында тәңрегә ғарыз ҡылған.*
*Нәмруд фажир* Ибраһимды утҡа һалған[3],*
*Ә Ябраил ул утты гөлзар* ҡылған.*
*Иманһыҙларҙың йөҙләре ҡара булған[4],*
*Етмеш йыл фәрзәнендән* йөҙә булған.*
*Йософто ағалары ҡол тип һатҡан,*
*Ул ике йыл зинданда сабыр ҡылған.*
*Ул Салих пәйғәмбәр доға ҡылған.*
*Ҡара таштан буталы* дөйә тыуған.*
*Ул дөйәне иманһыҙлар һәләк ҡылған,*
*Бутаһы боҙлай-боҙлай ташҡа кергән[5].*
*«Ҡара таштан буталы дөйә тыуған...»*
*Ул Ғайса пәйғәмбәр йыһан гиҙгән,*
*Доғаһы хаҡ ҡатында ҡабул булған.*
*Доға берлән үлеккә йән биргән,*
*Дүртенсе ҡат асманда* мәкәм тотҡан[6].*
*Дауыт ирди тимерҙе мөмдәк* ҡылған[7],*
*Әйүб ирди ҡорт эсрә сабыр ҡылған.*
*Уяғы-быяғынан сан* күренгән,*
*Шунда ла намаҙын һис ҡуймаған[8].*
*Ул Иҙрис пәйғәмбәр күккә сыҡҡан,*
*Асманда Ғазраил йәнен алған.*
*Йәне уның тәненә дәхи кергән,*
*Ошо көндә ожмахта урын алған[9].*
*Сөләймән тәхете белән күккә осҡан[10],*
*Ибраһим, ҡунаҡ килһә, ҡаршы алған.*
*Исмәғил хаҡ юлында ҡорбан булған,*
*Беҙләргә ҡорбан һалмаҡ шунан ҡалған[11].*
*Иманһыҙлар Зәкәриәгә ара тартҡан[12],*
*Юнысты һыу эсендә балыҡ йотҡан.*
*Хызыр Ильяс был донъяла тере йөрөгән,*

*Дарманһыҙға һәр ерҙә ярҙам биргән*[13].
*Һуд ҡәүмене ел белән һәләк ҡылған*[14],
*Лут ҡәүмене таш белән һәләк ҡылған*[15].
*Әүлиә ҡайсысы пәйғәмбәрҙең,*
*Искәнйәр Зөлкәрнәйын талаш булған*[16].
*Дәхи лә нәбиулла Исхаҡ булған,*
*Яхиянан ғиҙәйлек* мираҫ ҡалған*[17].
*Ябраил айғай һалып һәләк ҡылған,*
*Дузахта иманһыҙларҙың урыны ҡалған.*
*Ул Рәсүл*[18] *иманһыҙларға ғиззәт ҡылған,*
*Әбүжөһөл әмерен тотмай иманһыҙ булған,*
*Әбүбәкер пәйғәмбәргә һомра* булған*[19],
*Шеһәрйәр* Ғосман*[20], *Ғәли*[21] *арыҫлан.*
*Мөхәммәт өммәттәре* яранлары,*
*Хәсән менән Хөсәйен*[22] *уланлары.*
*Ғәли атлы алланың арыҫланы,*
*Күкрәһә, ярылыр ине иманһыҙ зәһре.*
*Көндәрҙә ни көн яҡшы — ғәйет көнө,*
*Төндәрҙә ни төн яҡшы — ҡәҙер төнө*[23].
*Өндәрҙә ни өн яҡшы — Ҡөрьән өнө,*
*Яҡшылар, ҡолаҡ һалып тыңла быны.*
*Өммәтләрем* дөйөү-дөйөү ғәләмфәхри,*
*Сөннәтен тотһа, кәрәк өммәтләре.*
*Мөхәммәт Мостафаның дарданаси*,*
*Бибифатима — пәйғәмбәрҙең ҡыҙ баласи.*
*Хәсән белән Хөсәйен уланлары,*
*Шаһит булған бер бәләлә икеләси.*
*Пәйғәмбәр Мәҙинәлә ятып торор,*
*Ҡулына кәүсәр шарап алып торор.*
*Өммәтләрем киләме, тип, баҡып* торор,*
*Атанан да шәфҡәте артып төрор.*
*Ураҙала зәҡәт бир малың өсөн,*
*Ураҙа тотоп, фытыр бир йәнең өсөн.*
*Ике урын яратҡан бәндә өсөн,*
*Ни ҡылһаң да, ҡыла күр хоҙай өсөн.*
*Бере — тамуҡ, бере — ожмах ике урын бар,*
*Яҡшы әҙәмдәр ожмахҡа тура барыр.*
*Ямандар йәһәннәмдә урын табыр.*

*Иманһыҙлар тамуҡта мәңге ҡалыр.*
*Асманда һәр йондоҙ ерҙе биҙәр,*
*Ерҙәге һәр яуаплар ерҙе бирәр.*
*Руза тотмағандан тәңре биҙәр,*
*Хабиби өсөн ожмахта урын биҙәр.*
*Рузаның сауабы күктә булыр,*
*Фытыр бирһәң, үзеңә сауап булыр.*
*Хәйере юҡ сауаптан мәхрүм ҡалыр,*
*Бохилләр ожмахлардан ҡоро ҡалыр.*
*Әүле мәүләң* һорар үлдеңме, тип,*
*Минең мәүлә икәнемде белдеңме, тип.*
*Үлмәҫтәй булып йөрөй инең үлдеңме, тип,*
*Мәңгелек тар ләхеткә керҙеңме, тип.*
*Һораһаң минең атым — ғазап, тине,*
*Бисара әҙәм килдеңме аҙып, тине.*
*Яуабыңды бирәһең яңғыҙ, тине,*
*Ҡуржыныңда ҡансалай бар аҙыҡ, тине.*
*Һораһаң, минең атым ҡәбер, тине,*
*Миндә бар йылан-саян сағыр, тине.*
*Иманлы ҡол яуабын бирер, тине,*
*Иманһыҙ ҡол ғазабын күрер, тине.*
*Тотҡанһың ураҙаны, фатыр бирең,*
*Был айҙа ялған әйтмәй тоғро йөрөң.*
*Боронғо гонаһларҙан тәүбә ҡылың.*
*Йәмәғәт, ҡолаҡ һалып тыңла быны.*
*Ураҙа тотмағандарҙы нейләгәйләр,*
*Тамуҡтың уртаһына бәйләгәйләр.*
*Төрлө-төрлө ғазап белән ҡыйнағайлар,*
*Һәр яғынан йылан, саян сәйнәгәйләр.*
*Фытырһыҙ ураҙаның файҙаһы юҡ,*
*Бохилдең ураҙа белән бер күңел туҡ.*
*Тотһам да, тотмаһам да, бер ғәмем юҡ.*
*Ураҙала моьминдәрҙең күңеле туҡ.*
*Мәккәлә бер өй бар, мең дәрәжә,*
*Хоҙайым, насип итһен бер күрергә.*
*Дәүләтегеҙ арта торһон иртә-кисә,*
*Ҡолаҡ һалып тыңла быны, и байбисә.*
*Ҡиәмәт көн яҡшы-яман ҡубыр, ирмеш.*

*Фәрештәләр иманың һорар, ирмеш.*
*Барығыҙҙан олуғ сөәл булыр, ирмеш,*
*Яҡшы-яман ҡылмышын унда күрер.*
*Ең-яғаһы юҡ тунды[24] кейәр, ирмеш,*
*Башы юҡ бер атҡа[25] менәр, ирмеш.*
*Төнлөгө юҡ бер өйгә керер, ирмеш,*
*Әжәл етһә, әҙәмләр үләр, ирмеш.*
*Ҡашығыҙҙың ҡаралығы — ҡәғбә юлы,*
*Йөҙөгөҙҙөң ҡыҙыллығы — Йософ нуры.*
*Йөҙөгөҙҙән һис китмәһен иман нуры,*
*Ағалар, ҡолаҡ һалып тыңла быны.*
*Ошо илгә, Рамазан, ҡайҙан килдең,*
*Бер нисә пәйғәмбәрҙе ауыҙға алдыҡ.*
*Сәллаһи, пәйғәмбәргә салауат бирҙек.*
*Ошо илдән хәйер-зәкәт бер нәмә биреп һалһа,*
*Дәхи лә бер яғынан тамаҡ булһа.*
*Рамазан, ҡайҙан килдең был байларға,*
*Кем килеп, кем китмәгән был айларға.*
*Хоҙайым, иманыбыҙ насип итһә,*
*Керербеҙ ожмахтағы һарайларға.*
*Рамазан, күп торһа бер ай торғай,*
*Ниәтегеҙ ошбу айҙа ҡабул булғай.*
*Яҡшы-яман ҡыйымышың* был донъяла,*
*Әхирәткә барғанда хәҙер торғай.*
*Рамазан, әйткәнем тамам булды,*
*Далала ҡаҡшағаным яман булды.*

Ошо мөнәжеттең көйөнә Мөхәмәтйән олатай Ҡаҙаҡбаев үҙе Мифтахетдин Аҡмулла шиғырҙарын талантлы башҡарыуы тураһында, уларҙы оҫта уҡыусы булараҡ киң танылыу табыуы хаҡында әйтеп тораһы юҡтыр. Ә бына көйҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ. Беҙҙең күҙәтеүебеҙсә, Урал арьяғы райондарында Аҡмулла шиғырҙарын уҡыу өсөн әллә күпме көйҙәр сығарылған, уларҙың бер нисәүе баҫылып та сыҡты. Ошо йыйылмаға беҙ ҙә Мөхәмәтйән олатайҙан яҙып алған көйҙәрен өҫтәйек. Халыҡ араһында иң таралған шиғыры — «Нәсихәттәр» М. Ҡаҙаҡбаев тарафынан бая ғына килтерелгән көйҙөң «башҡортлаштырылған» вариантына уҡыла (был шиғырҙың күп тап-

ҡырҙар баҫылғаны өсөн беҙ уның бер куплетын ғына ки[...]
рәбеҙ):




Ошо уҡ көйгә Аҡмулланың «Урыным — зиндан», «Диуан[...]
мын», «Моңло егет зарын әйтер» шиғырҙары әйтелә. Асыл[...]
был көйгә ун бер ижектән торған ниндәй ҙә булһа шиғырҙ[...]
уҡырға мөмкин.

Күрше Баймаҡ районында «Нәсихәттәр» шиғырын икенс[...]
төрлө көйгә көйләйҙәр:

**Етеҙ**




Беҙ уны Байыш ауылында Хәлисә Байсуринанан (1922 йыл-
ғы) һәм Баймаҡта йәшәүсе Разия Унғолованан (1928) яҙып

ыҙ. Күрәүебеҙсә, М. Ҡаҙаҡбаев вариантында ҡаҙаҡ кешеһе башҡарыуында булган пунктирлы ритм һәм йөнәшә-параллель квинтальностарҙың алмашыныуы һаҡлана. Аҡмулланың «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» шиғырын Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев «Нәсихәттәр»ҙең әҙ генә үҙгәртелгән вариантына көйләй, был үҙенең башҡарыусы тарафынан «башҡорттарым» һүҙенең ла шиғыр ҡабатлауынан килеп тыуа:




Ә инде шағирҙың «Аттың ниһен маҡтайһың?» шиғыры XII быуатта ижад ителгән «Баҡырган китабы»ның көйөнә йырлана:




М. Аҡмулла шиғырҙары менән бер рәттән, Мөхәмәтйән олатай Ҡаҙаҡбаев шулай уҡ Ш. Бабич һәм Ғ. Туҡай шиғырҙарын да иратып уҡый, уларҙы ла ҡартатаһы һәм әсәһе кеүек төрлө боронғо китаптарҙың көйҙәренә көйләй. Мәҫәлән, Ш. Бабичтың байтаҡ шиғырҙары әнбиәләр һәм пәйғәмбәрҙәр тураһындағы «Ҡисас-ол-әнбиә» китабының ошондай көйөнә көйләнә:

**Тантаналы**







*Ап-аҡ алтын йырҙарымды йырламам данлыҡ өсөн,*
*Йырлайым алтын илем өсөн, үҙ туған халҡым өсөн.*
*Сәскә төҫлө йырҙарымды йырламам зауҡым өсөн,*
*Йырлайым тик сәскәләй ҡыҙҙарға бай халҡым өсөн.*
*Дәртле ҡайнар йырҙарымды йырламам дәртем өсөн,*
*Йырлайым тик мәңге шат дәртле көләс халҡым өсөн.*

(«Халҡым өсөн»)

Был көйгә Мөхәмәтйән олатайҙың ҡартаталары пәйғәмбәрҙәр хаҡындағы шиғырҙарҙы көйләгән:

*Өйҙә тыуған, бармаҡ имгән*
*Тауҙа торған Ибраһим,*
*Йондоҙ аңлап, айҙы тыңлап,*
*Көнгә таңған Ибраһим.*

*Атаң дирсә, әйтер кем,*
*Кем атаңдың тәңресе,*
*Диди Нәмруд ата тәңрәсе,*
*Даю сурған Ибраһим.*

Ш. Бабичтың икенсе бер шиғыры – «Ғазазил» «Баҡырған китабы»ның көйөнә уҡыла:

**Ягымлы**



Ошо уҡ көйгә Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев Ғ. Туҡайҙың да бай-таҡ шиғырҙарын уҡый.

Мәҡәләнең аҙағында боронғо китаптарҙың береһе – «Ерҙең итәк китабы»ның көйөн килтерәбеҙ. Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев фекерендә был китаптар – ҡартатаһы һәм әсәһенән ҡалған рухи мираҫ – күпләп һаҡлана һәм бөгөнгө көндә дингә, милли йәмғиәткә иғтибар артҡан мәлдә уларҙың да әһәмиәте көсәйә. Был ҙур китаптың ике куплетын ғына баҫтырабыҙ:

Уртаса




*Замана ахры булһа, ғалимдар аҙғай,*
*Мөьминләрҙең улы-ҡыҙы йәсер булғай,*
*Кафырлар уфтанмай мин-мин тигәй,*
*Андыйлар «Тәки ғәжәп»* тыңнариуай.*

Был китапты көйләп уҡыу традицияһы башҡорт халыҡ ижадында эҙһеҙ үтмәгән. «Башҡорт халыҡ ижады» күп томлы баҫмаһының «Бәйеттәр» томында (Өфө, 1978) баҫылған «Ҡыш бәйете»нең «Ерҙең итәк китабы» йоғонтоһонда ижад ителеүе көн кеүек асыҡ, шулай булғас, көйө лә тап килеп тора:

*Ҡыш булһа, төрлө-төрлө хәлдәр булғай,*
*Ер йөҙөнә өйөм-өйөм ҡарҙар тулғай,*
*Ялангастан күп фәҡирҙең йөҙөн солғай,*
*Бына шулар йөрәк бәғерен киҫә инде.*

*Тәҙрәгә бармаҡ-бармаҡ боҙҙар ҡатҡай,*
*Фәҡир ҡарсыҡ мейес башында өшөп ятҡай,*

*Аптырағас, хәлетлеккә башын атҡай,*
*Нишләһә лә төрлө яҡтан мәжбәр инде.*

Был мәҡәләлә килтерелгән бәйет, мөнәжәттәрҙең һүҙҙәр[е] йәнле һөйләштә, йырсы-сәсән Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев уҡыуы буйынса нисек әйтелдә, шулай баҫылды, хәҙерге әҙәби нор[-] маларҙан сығып төҙәтелмәне. Беҙҙең уйыбыҙса, был уларҙың халыҡсан яңғырышын көсәйтә генә. Артабан, әлбиттә, та[-] лантлы йырсының бай репертуарын өйрәнеү эшен дауам итер кәрәк.

---

[1] «...пәйғәмбәрем үҙ ҡәүменә кәмә ҡылған» — бында һүҙ Нух пәйғәмбәр үтенеүе буйынса Аллаһы тәғәләнең юлдан яҙғандарҙы туфан менән яҙа лауы күҙ уңында тотола. Уның ҡушыуы буйынса, Нух пәйғәмбәр Аллаһы тәғәләгә иман килтереүселәрҙе кәмәгә ултырып ҡотҡарып алып ҡала. — С. Бикбулат. Дин дәрестәре. — Өфө, 1996. 9-сы бит.

[2] «Муса ирди ғасасы йылан булған...» — Аллаһы тәғәлә Муса пәйғәмбәргә Мысыр халҡын тоғро юлға өндәргә ҡушҡан, ти. Уның ҡулын да таяғы ла булған. Аллаһы тәғәләнең ҡушыуы буйынса ул таяҡ йыланға, һуңынан тағы ла таяҡҡа әйләнгән. Ошо таяҡ менән ул бик күп мөғжизәләр күрһәткән. Тур тауында Муса пәйғәмбәргә «Тәүрат» («Библия») китабы бирелгән. — Шунда уҡ, 21—22-се биттәр.

[3] «Нәмруд фажир Ибраһимды утҡа һалған...» — дини тәғлимәт буйынса, Бабил (Вавилония) иле батшаһы Нәмруд уның үҙе кеүек төрлө боттарға табынмаған һәм Аллаһы тәғәләне генә таныған Ибраһим пәйғәмбәрҙе утҡа ташларға бойора. Шул саҡ бик ҙур усаҡ яҡтылар, ти. Был уттан һауала осоп барыусы ҡоштарҙың ҡанаттары көйҙө, усаҡ шәүләһе төшкән тирә-йүн ҡайнар таба кеүек ҡыҙҙы, ти. Ибраһим пәйғәмбәр утҡа ырғытылғас, Ябраил ғәләйһис-сәләм доға уҡыны, шул саҡ ут ялҡындары гөл баҡсаға әйләнде, ти. — Пәйғәмбәрләр тарихы. — Ҡазан, 1992. 42—43-сө биттәр.

[4] «Яҡуб нәби өғзәм уты шөйлә булған...» — оло дәрәжәле Яҡуб пәйғәмбәр уғы көсло булған мәғәнәһендә. Бында Яҡуб пәйғәмбәр тормошона бәйле ваҡиғалар сағылып ҡалған. Уның ун ике улы, бик сибәр бер ҡыҙы була. Ғәд ҡәүеменән Ғәмләк исемле бер кафыр батша бер нисә мәртәбә был ҡыҙҙы ҡатынлыҡҡа һората, әммә атаһы Яҡуб та, ағалары ла кафыр кешегә ҡыҙҙы биреүҙән баш тарталар. Шул саҡ Ғәмләк батша Яҡуб йәшәгән Кинган иленә яу менән килә. Артабан китаптарҙа былай тип әйтелә: «Ябраил ғәләйһис-сәләм пәйғәмбәргә Аллаһы тәғәләнән сәләм килтерҙе һәм был Ғәмләктең ғәскәре-ние менән сүлдә харап буласағын

итерҙе. Һәм ысынлап та, улар Кинган еренә инеүгә бик көслө ел башланды, уның артынан ут килде, батшаны һәм уның һуғышсыларын яндырып көлөрҙө». — Шунда уҡ, 6–63-сө биттәр.

[5] «Ҡара таштан буталы дөйә тыуған...» — Салих пәйғәмбәр оҙаҡ йылдар юлдан яҙған кешеләрҙе Аллаһы тәғәләгә табынырға өндәгән. Әммә кафырҙар уға ышанмағандар, Салих пәйғәмбәрҙе бер таш янына алып барып: «Аллаң хаҡ булһа, мөғжизә күрһәтһен, ошо таштан дөйә сыҡһын, йөндәре ҡыҙыл булһын, быуаҙ булһын, таштан сыҡҡас та дөйә балаһы тыуҙырһын һәм шул бутаһына һөт имеҙһен. Һөтөн беҙ ҙә эсеп ҡарарбыҙ», — тиҙәр. «Сәлих ғәләйһис-сәләм доға ҡылды. Шунда таш иңрәне һәм эсенән дөйә килеп сыҡты. Оҙаҡ та үтмәй, ул дөйә лә инрәне һәм бута тыуҙырҙы, уға имсәктәренән һөт бирҙе. Был күрелмәгән мөғжизә ине. Быны күреп торған кафырҙар иман килтерҙеләр».

Күп йылдар үткәс, Ҡаддар исемле кафыр оло дөйәне ҡылысы менән сабып үлтерҙе. «Ул бутаны ла үлтерергә атлыҡты. Әммә бута Ҡаддарҙың ни теләгәнен һиҙенде лә, өс мәртәбә тауыш сығарып, инәһе сыҡҡан таш эсенә кереп ҡасты». — Шунда уҡ, 34–36-сы биттәр.

[6] «Доға берлән үлеккә йән биргән...» — Дини тәғлимәт буйынса, Ғайса пәйғәмбәр һыу өҫтөндә йөрөү, үлектәрҙе терелтеү, һуҡыр кешеләрҙе күҙле итеү могжизәһенә эйә булган. «Мин һеҙгә балсыҡтан ҡош һыны яһармын һәм уга өрөрмөн, ул Алланың ҡөҙрәте менән ҡош булыр. Алланың рөхсәте менән һуҡырҙы, ауырыуҙы һауыҡтырырмын һәм үлектәрҙе йәнләндерермен». — Ҡөрьән Кәрим. — Өфө, 1993. 44-се бит.

[7] «Дауыт ирди тимерҙе мөмдәк ҡылған» — дини китаптар буйынса, Дауыт пәйғәмбәрҙең ҡулында тимер ҡамыр кеүек иҙелгән, ул тимер эшкәртеүсе тәүге кеше булган. — Ислам: энциклопедический словарь. — М., 1991. С. 57.

[8] Әйүб ирди ҡорт эсрә сабыр ҡылган...» — дини китаптарҙан күренеүенсә, Аллаһы тәғәләгә иң сабыр пәйғәмбәр итеп һүрәтләнә. Аллаһы тәғәлә Әйүб пәйғәмбәрҙен Үҙенә бирелгәнлегенә ышаныу өсөн, уга Иблесте ебәреп төрлөсә һынап ҡараган, уның һарыҡ, һыйыр көтөүҙәрен, иген баҫыуҙарын яндырткан. Әйүб пәйғәмбәр гел генә: «Аллабыҙ үҙе бирҙе, үҙе алды», — тип кенә яуап биргән. Шунан һун Иблис Әйүб пәйғәмбәрҙең тәненә ике ҡорт төшөргән. Улар үрсеп пәйғәмбәрҙең иттәрен ашап бөткән, ул һөйәктән генә ҡалган, тәне сҫләнеп, халыҡ та ситләшә башлаган. Әммә Әйүб пәйғәмбәр барыһына ла түҙгән, сабыр иткән. Шулай ете йыл, ете ай, ете көн үткәс, уның янына Ябраил фәрештә килә һәм пәйғәмбәргә урынынан торорға ҡуша. Ул аяғына баҫыу менән ҡорттар уның тәненән ҡойолоп ташҡа әйләнәләр. Аллаһы тәғәләгә тоғролоғо арҡаһында Әйүб элекке хәленә ҡайта. — Пәйғәмбәрләр тарихы. —Ҡазан, 1992. 73–76-сы биттәр.

[9] «Берҙән-бер көн Иҙрис пәйғәмбәр янына күктән фәрештә төшә һәм төрлө тәм-том менән унын ураҙаһын боҙорға тырыша, бынын осоп емеш-еләкле баҡсаларға алып бара, уны төрлосә ҡыҙыҡтыра. Әммә Иҙрис пәйғәмбәр бер нәмә лә ашамай, ҡапмай. Фәрештә үҙенең кем икәнлеген әйткәс, Иҙрис пәйғәмбәр унан үҙен күккә күтәреп төрлө ғәжәптәрҙе күрһәтеүҙе үтенә. Фәрештә Аллаһы тәғәләнең был эшкә рөхсәтен алып уны күккә күтәрә. Шул саҡ Иҙрис пәйғәмбәр фәрештәнән үҙенең йәнен алыуҙы үтенә. Аллаһы тәғәләнән рөхсәт килә, шулай итеп Иҙрис пәйғәмбәр йән биреү әсеһен дә татый. Әммә Алла әмере менән унын йәне үҙенә кире ҡайтарыла. Аллаһы тәғәлә рөхсәте менән Иҙрис пәйғәмбәр тамуҡта ла була, унан мәңгелеккә йәннәт-ожмахта ҡала, ти. Мөнәжәттә быны ошондай легендар ваҡиғалар сағылыш тапҡан. — Шунда уҡ, 17–19-сы биттәр.

[10] Дини әҙәбиәткә ҡарағанда, Сөләймән пәйғәмбәр хайуандар, ҡоштар телен белгән. Унын оса торған балаҫы ла булған, уға йөҙ мең кеше һыя икән. Ошо балаҫҡа ултырып ул ете айлыҡ юлды өс көндә үткән. — Шунда уҡ, 101-се бит.

[11] Ислам дине буйынса, ҡорбан салыу Ибраһим пәйғәмбәр һәм уның улы Исхаҡ пәйғәмбәр исеме менән бәйле. — С. Бикбулат. Дин дәрестәре. — Өфө, 1996. 12—13-сө биттәр.

[12] Был мөнәжәт юлының мәғәнәһе аңлашылмай. Дин тәғлимәте буйынса Зәкәриә пәйғәмбәрҙең ҡатыны Аллаһы тәғәлә ҡөҙрәте буйынса ҡартайған көнөндә бала таба, унын исемен Яхия тип ҡушалар, уға ла пәйғәмбәрлек килә. Берҙән-бер көн Бәни-Исраил батшаһы бер ҡатынды күреп уға ғашиҡ була, ирен үлтереп, уны ҡатынлыҡҡа ала. Бер аҙ ваҡыт үткәс, был ҡатындың ҡыҙын да ҡатын итмәксе була, Зәкәриә менән Яхияны никах уҡырға саҡырта. Әммә улар: «Һин ҡыҙҙың әсәһе менән никахлыһың, шуға ла һиңә уны алыу фарыз түгел», — тип ризалыҡ бирмәйҙәр. Бынан һуң батша Яхияны, унан Зәкәриәне үлтертә. — Шунда уҡ, 128—129-сы биттәр.

[13] Халыҡ ҡарашы буйынса, Хызыр Ильяс кешеләргә изгелек эшләп йөрөүсе пәйғәмбәр исеме. Әммә дини әҙәбиәттә бындай исем осрамай.

[14] Дини тәғлимәт буйынса, Һуд ғәлийһис-сәләм Ғәд ҡәүеменә пәйғәмбәр итеп ебәрелә, уларҙы ҡырҡ ете йыл буйына иманға саҡыра, боттарға табынмаҫҡа өндәй. Әммә Ғәд ҡәүеме халҡы: «Аллаң беҙҙән көслө икән, ул ваҡытта өҫтөбөҙгә йәбер-золом ебәрһен», — тип яуап бирә. Аллаһы тәғәлә улар өҫтөнә ҡара болот ебәрә, унан бик көслө дауыл сыға, ул ете көн, ете төн эсендә бөтә Ғәд ҡәүемен һәләк итә. — Шунда уҡ, 29—30-сы биттәр.

[15] Лут пәйғәмбәр, дини ҡараш буйынса, Кинган ҡәүеме менән йәшәй, уларҙың батшаһы Шәндүм исемле бер кафыр була. Был ҡәүем дә боттарға

ҡалала, халыҡ араһында боҙоҡлоҡ, фәхишәлек нығ тарала. Лут пәйғәмбәр үҙенең халҡын дөрөҫ юлға саҡырып күпме өндәһә лә, уны яҡлаусы булмай. Киреһенсә, фәхиш кафырҙар уны үлтерергә булалар. Ябраил фәрештә ярҙамға килә, мосолман булған кешеләр менән ҡаланан ситкә сығырға ҡуша. Улар сығып киткәс, Ябраил фәрештә, Аллаһы тәғәлә ҡушыуы буйынса, таяғы менән ергә һуға. Шул саҡ тамуҡ ҡапҡаһы асылып китә лә, кафырҙар башына таш яуа башлай, улар барыһы ла вафат булып тамуҡҡа олаға. Улар араһында Лут пәйғәмбәрҙең кафыр ҡатыны ла була. — Ислам: энциклопедический словарь. — М., 1991. С. 148; Ҡөрьән Кәрим. — Өфө, 1993. 94-се бит.

[16] Бында Искәндәр Зөлкәрнәй, йәғни Александр Македонскийҙың (беҙҙең эраға тиклем 356—323 йылдар) хәрби походтары күҙ уңында тотола.

[17] 12-се аңлатманы ҡарағыҙ.

[18] Бында Мөхәммәт пәйғәмбәр (570—632 йылдар) күҙ уңында тотола.

[19] Әбүбәкер (572—634 йылдар) — Мөхәммәт пәйғәмберҙең көрәштәше, тәүгеләрҙән булып ислам ҡабул иткән, пәйғәмбәрҙе Мәккәнән Мәҙинәгә күсерешкән. Мәҙинәгә күскәс, Мөхәммәт пәйғәмбәр уның ҡыҙы Ғәйшәгә өйләнә. Пәйғәмбәр үлгәс, Әбүбәкер ике йыл хәлиф булып тора.

[20] Ғосман, йәки Усман (575—656 йылдар) — өсөнсө хәлиф, ул Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең Орҡоя, ул үлгәс, Зәйнәп тигән ҡыҙҙарына өйләнә.

[21] Ғәли — Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ике туған ҡустыһы һәм Фатима исемле ҡыҙына өйләнгән кейәүе, дин буйынса көрәштәше. Усман үлгәндән һуң 4-се хәлиф була.

[22] Хөсән, Хөсәйен — Ғәли менән Фатиманың улдары, пәйғәмбәрҙең берҙән-бер ейәне.

[23] Ҡәҙер төнө — Мөхәммәткә пәйғәмбәрлек бирелеп, уға «Ҡөрьән» иңә башлаған төн. Рамаҙан айының 26—27-се төнөнә тап килә. 1996 йылда Ҡәҙер төнө 4—5 февралгә тап килде. Был төндө доға уҡып, теләгән теләктәр Аллаһы тәғәлә тарафынан ҡабул ителә, тип фарыз ителә. — С. Бикбулат. Дин дәрестәре. — Өфө, 1996. 70-се бит.

[24] Бында кәфен хаҡында һүҙ бара.

[25] Мәйет һалынған носилка күҙ уңында тотола.

## Һүҙлек

Асман — күк йөҙө

Баҡып, баҡыр — бағып, ҡарап, ҡарар

Баҫарса — баҫыу менән

Биһуш — иҫһеҙ, һушһыҙ

Бута (ҡаҙаҡса) — дөйәнен ҡолоно

Ғиҙәйлек — ярлылыҡ, Яхия пәйғәмбәр — иң хәйерсе пәйғәмбәр булған

Гөлзар – гөл баҡса
Ғаза – изге һуғыш
Ғарыз – үтенес, аңлатма
Ғасасы – таяҡ, таяғы кәрәк саҡта йылан булған мәғәнәһендә
Ғирған – аң, белем
Ғисьян – насарлыҡ, этлек
Дарданаси – вариҫ
Дузах – тамуҡ
Делхә – гонаһһыҙ сабый бала
Дәхи – һәм, тағы ла
Жәлил – бөйөк, оло дәрәжәле
Зобаныйлар – тамуҡта гонаһлы кешеләрҙе утлы суҡмар менән туҡмаусы фәрештәләр
Ҡаранүбән – ҡаранып
Ҡыйымыш – эш итеү
Мөмдәк – йәмшек
Мәҙәт – көс, ҡеүәт
Мәүлә – хоҙай
Нәби – пәйғәмбәр
Нөкир, Мөнкир – мәйетте ҡәбергә күмеү менән унан һорау алып торған фәрештәләр
Рахман – мәрхәмәт итеүсе
Ризуан – ризалыҡ, күңел хушлығы, йәннәт баҡсаһы һаҡсыһы
Сан – һөйәк
Сарпушалар – теттерәләр мәғәнәһендә
Сәмәүи – был донъяла, был йыһанда
«Тәки ғәжәп» – боронғо китап исеме
Өлфәт – берҙәмлек, дуҫлыҡ
Өммәт – пәйғәмбәргә эйәреүселәр, милләт
Фажир – аҙғын ир, уйнашсы
Фазыл – инсаф, намыҫ, кешелеклек
Фарзыят – фараз итеүгә ҡоролған
Фаяз – йомарт, нигмәт
Фәрзәнд – нәҫел
Ханнас – шайтан, аҙҙырыусы
Һомра – тоғро
Шәһәрйәр – көрәштәш
Әғзәм – бик бөйөк, дәрәжәле

Ошиф — ҡәләм
Ор — әрнеү
Охбәп — һөйөклө дуҫ һүҙенең күплек формаһы

*«Ватандаш» журналы, 1998 йыл, № 3*

*Юлай Ғәйнетдинов, Башҡортостандың халыҡ артисы.*

## Йырлайым халҡым өсөн

Хәйбулла районының Һаҡмар Бүреһе ауылында йәшәүсе һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Мөхәмәтйән Абдулла улы Ҡаҙаҡбаевтың исеме башҡорт музыкаль фольклорына битараф булмаған замандаштарыбыҙға яҡшы таныш.

Мөхәмәтйән ағай 1989 йылда үткәрелгән Йомабай Иҫәнбаев конкурсында халыҡ йырсылары бәйгеһендә 1-се урынға, 1991 йылда «Башҡорт халыҡ йыры — 91» республика радиобәйгеһендә Гран-приға лайыҡ булды. Бәйгелә урын алыу бер ни ҙурлыҡ күрһәткес, әлбиттә, әммә халыҡ сәнғәте маһирының башҡарыу кимәлене баһа бының менән генә билдәләнмәй. Мәҫәлән, хәтеремдә, 1990 йылда Йылайыр районында үткәрелгән республика күләмендәге мәҙәни сара — Ишмулла Дилмөхәмәтов конкурсында (ә унда ҡурайсылар һәм шулай уҡ халыҡ сәнғәтенең башҡа төрлө жанрҙары оҫталары, шул иҫәптән халыҡ йырсылары, бәйгеләре булды) Мөхәмәтйән ағай жюри ағзалары эргәһенә килеп: «Ҡустылар, Ишмулла хөрмәтенә сәхнәнән бер йыр йырлайым, тик уңайһыҙ булһа ла әйтәйем, бер үтенесем бар — миңә, зинһар, урын бирмәгеҙ, башҡаларға бирегеҙ», — тине.

Ошо миҫалда Мөхәмәтйән ағайҙың халыҡҡа, килер быуындарға ата-бабаларыбыҙҙың ауазын еткереү өсөн ынтылышы ла, шул уҡ ваҡытта ғәжәп баҫалҡылығы ла сағылғандай.

Ә баһаға килгәндә инде, мәҫәлән, башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың «Ирәндек моңдары —98» төбәк бәйгеһендә, «Шафиҡ» йырын иҫ киткес аһәңле йырлап, «халыҡсан йырлаған өсөн» тигән махсус призды Фәттәх ҡусты Аралбаев

яулағайны. Ул йырҙы Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев телевизион тапшырыуҙа йырлауы буйынса отоп алдым, тип әйтте. Ошо үҙе халыҡтың баһаһы тураһында һөйләмәйме ни? Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа республика кҮләмендә үткәрелгән халыҡ сәнғәте байрамдарында Мөхәмәтйән ағай йыраусы һәм сәсән, йәғни йырау булараҡ киң танылыу яуланы. Күптәр иҫләйҙер, 1989 йылда үткәрелгән Республика башҡорт халыҡ ижады байрамы – «Йыйын»да Мөхәмәтйән ағайҙың Аҡмулла шиғырҙарын боронғоса, йәнле рәүештә башҡарыуы байрамдың кульминацион нөктәһе булды.

*Эй, ризыҡ тигән әҙәмде ҡыймылдатыр,*
*Йыя торған ризҡын әҙәм йөрөп татыр.*
*Маңлайына хаҡ яҙғанын күрмәй ҡалмай*
*Кәрәк солтан, булһын кәрәк император...*
*Яҡшыны яманлауҙан аты китмәҫ,*
*Яман һүҙҙең йөрәктән даты китмәҫ,*
*Саф алтынды нәжескә буяһаң да,*
*Нәжес китер, алтындың заты китмәҫ.*

*Кәкре уҡ атҡан менән тура китмәҫ,*
*Яман һүҙҙең күңелдән хуры китмәҫ.*
*Ҡоторған эт һауаға ҡарап өргән менән*
*Асманда торған айҙың нуры китмәҫ.*



Шуныһы ла игтибарга лайыҡ: Мөхәмәтйән ағайҙың башҡарыу сәнғәте бөгөнгө көндә халыҡ-ара кимәлдә өйрәнелә. Эйе, бында һис тә арттырыу юҡ.

1998 йылдың апрель аҙаҡтарында алыҫ Япониянан башҡорттоң оҙон көйөн фәнни өйрәнеү маҡсаты менән профессор Танимото килгәйне. Мөхәмәтйән ағайҙың йырлауын тыңлағас, уның бөгөн минең иң бәхетле көндәремдең береһе, тип күҙенә йәш алыуының шаһиты булырға тура килде. Профессор Танимото етәкселек иткән «Айну халҡы мәҙәниәте үҙәге»ндә япон иленең төп халҡы һаналған 20 мең самаһы айну халҡының мәҙәниәте менән бергә тамырҙары оҡшашлығы тойомланған мәҙәниәттәр, әйтәйек, япондың ойвакэһына яҡын монголдың уртындуһы, башҡорттоң оҙон көйө кеүек рухи хазиналар ҙа өйрәнелә. Һәм халыҡ-ара билдәле (мәҙәниәт өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн профессор Танимото Венгрия Республикаһы ордены менән бүләкләнгән. — *Ю.Г.*) ҙур ғалимдың, Мөхәмәтйән ағайҙың башҡарыу сәнғәте ни хәтле халыҡсан, тәрән тамырлы булыуын тойоп, күңеле тулыуы гәжәп түгел.

Халыҡ йырсыларының башҡарыу сәнғәте — үҙе айырым тикшеренеүҙәр талап иткән өлкә. Халыҡ йырсылары тигәндә, әлбиттә, радио-телевидениенан, пластинкаларҙан артистарҙың йырлауынан отоп алып йырлаусылар түгел, ә конкрет ерлекле, сәнғәте тәрән тамырлы, үҙ төбәгенең быуындан-быуынға күсеп килгән халыҡ йыр сәнғәте мәктәбе традицияларын һаҡлаусы һәм дауам итеүсе ысын мәғәнәһендә халыҡ профессионалдары күҙ уңында тотола.

Мөхәмәтйән ағайға килгәндә, мин айырыуса өс үҙенсәлекте билдәләр инем: иң беренсе, уның оҙон көйҙәр башҡарыуына эпик ҡолас хас. Әйтерһең, ул быуаттар төпкөлөнә үтеп, тарихи хәл-ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнай, шул тарихты көйләп һөйләгәндәй, күҙ алдына килтерерҙәй, образлы, аһәңле итеп башҡара.

Икенсенән, мәғлүм булыуынса, һәр төбәктең үҙенә генә хас башҡарыу манераһы, һәр көйҙөң үҙенә генә хас бөгөлөшбиҙәктәре була. Мөхәмәтйән ағайошо үҙенсәлектәрҙе юғалтмай, шул уҡ ваҡытта йырҙың динамикаһын, тотош бөтөнлөгөн тәрән тойоп башҡарыу маһирлығына эйә.

Өсөнсөһө: Мөхәмәтйән ағайҙың тауыш тембры ифрат яғымлы. Минә тәүге тапҡыр уның йырлауын магнитофон яҙмаһынан тыңларға насип булғайны. «Кәмәлек» йыры ине ул



*Ятмасы ла, иркәм, яр ситендә,*
*Кәмәлеккәй ташып та һыу алыр.*
*Һөйләмәсе, иркәм, хәсрәт үк хәлең,*
*Йөрәк башҡайына һары алыр.*

Йырҙы тыңлай башлау менән ирекһеҙҙән күҙҙәр йомолдо, эргә-тирәне ниндәйҙер яҡтылыҡ солғап алғандай булды, күҙгә күренмәҫ йылы тулҡындар күңелдә йыйылған юшҡынды йыуып, вай-төйәк ығы-зығылар онотолоп, зарҙар таралып төшкәндәй булды.

Туң күңелдән йылы моң сыҡмайҙыр ул. Ғәжәп, бер ҡасан да күрешмәһәк тә, мин Мөхәмәтйән ағайҙы танып белгәндәй булдым, ҡиәфәт-сырайы ниндәйҙер һыҙаттар аша моңонда сағылғандай булды. Һәм танышҡанда ул шулай булып сыҡты ла: иҫ киткес мөләйем, саф күңелле, әйтерһең, барлыҡ булмышынан изгелек нурҙары бөркөлә.

Мөхәмәтйән ағай башҡорт халҡының йыр классикаһын аҡыны белеүе һәм башҡарыуы менән бергә Һаҡмарҙың түбәнге ағымы мөхитендә йәшәгән үҫәргәндәр ижад иткән рухи хазиналарҙы һәм шулай уҡ ҡанбабалар тәрбиәһе традицияларын һаҡлаусы ла. «Мәғри», «Силәбе», «Ғәзизәкәй», «Сәхипъямал», кеүек һирәк йырҙар, «Ҡаһарман кантон» йырының гәжәп үҙенсәлекле варианты, «Ирмәк», «Ынйы», «Вәхит», «Шафиҡ», «Кәмәлек», «Мәҙинәкәй», «Һыр» йырҙарының ҡабатланмаҫ башҡарылышы. «Наполеон Бонапарт», «Муса Мортазин» кеүек уникаль марштар, бихисап мөнәжәттәр, боронғо китаптарҙы үҙ көйө менән көйләп уҡыу, Аҡмулла, Бабич, Туҡай әҫәрҙәрен улар йәшәгән дәүерҙәгесә, йәнле рәүештә башҡарыу өлгөләре беҙҙең көндәргә килеп етеүе менән беҙ Мөхәмәтйән ағайға бурыслыбыҙ.

«Бер ҡарттың туғыҙ улы булған. Туғыҙ улым туғыҙ бүре һымаҡ, тип әйтә торған булған ул. Ауылыбыҙҙың исеме шунан килә», — ти Мөхәмәтйән ағай.

— Үткән быуат аҙаҡтарында урыҫ күпләп күсеп килеп ерҙе ала башлағас, бөтәбеҙ ҙә Һаҡмар соҡоронда ятып ҡалмайыҡ, тип, беҙҙең ауылдан Башбүре, Ҡатралы Бүреһе тигән ауылдар бүленеп сыҡҡан. Ҡатралы Бүреһе бөттө инде, Башбүре хәҙер Ырымбур өлкәһендә. Беҙҙең атайҙың ҡартатаһы Йәнғол ҡарт ҡурайсы булған, ағай-энеләре хәлле булған, улар Ҡатралы Бүреһенә нигеҙ һалған. Бер өс йыл үткәс, туғандары килеп, «Йәнғол, алып китәбеҙ, әйҙә, беҙҙең эргәгә», — тигән. Ҡурайсы бит инде, халыҡтың күңелен аңлап, рухын күтәреп йөрөгән кеше. Шунда Ҡушый тигән бер ҡарт: «Ҡуй, Йәнғол беҙҙән дә бер бәхетле бала тыумаҫ микән. Киткәс китһендәр, беҙ һине ебәрмәйбеҙ», — тигән.

Йәнғол йыл да бесәнде күп сапҡан, йыл да кәбәндәре ултырып ҡалған. Бер йылы бесән булмай малға йотлоҡ булып киткәндә килгән кешегә бер тайға бер кәбән биргән. 12 байталы булып, шул йылҡы үрсеп, байып киткәс, беҙҙең ҡартатайҙы — Ҡотлогилдене Һаҡмар буйында Ҡотой бай тип йөрөткәндәр. Шуның өсөн, урта хәлле генә крәҫтиән булһа ла, атайымдарға әләкте лә инде, нәҫел-нәсәбебеҙҙе ҡоротоп бөтә яҙҙылар, тип һөйләй Мөхәмәтйән ағай.

Атайымдың ҡулынан килмәгән эше булманы: ул һәйбәт тимерсе лә булды, тире лә иләне, балта оҫтаһы булды, бынамын итеп донъя көтә торған кеше ине.

Әсәйем яғынан ҡартатайым Ғәлиәкбәров Сәйетгәрәй Бәхтегәни улы үҙ заманының иң ғилемле кешеләренең береһе булды. Ғәрәпсә китаптарҙы һүҙмә-һүҙ тәржемә итеп ултыра торғайны. Урыҫса ла яҡшы белде, килгән һәр кемгә кәңәш биреп, ҡағыҙҙар яҙып йөрөгән кеше булды. Ҡартәсәйем Шәмсикамал Сәғәҙи ҡыҙы ла белемле кеше ине. Үҙҙәре йәшәгән Аҡһыйыр (икенсе исеме Ишкилде) ауылында өйҙәренең бер яғында ҡартатайым — ир балаларҙы, икенсе яғында ҡартәсәйем ҡыҙҙарҙы уҡытты, шулай, алла хаҡына. Әсәйем Шәмсибаһар уларҙың яңғыҙ ғына ҡыҙҙары булды. Миңә йәш тулыр-тулмаҫтан ҡартатайымдар үҙҙәренә алып тәрбиәләне. Мине бик белемле итергә тырышып ҡаранылар, тик хыялдары хыял булып ҡалды, белгәндәренең 5 кенә проценты йоғоп өлгөргәндер, яҙмыш шулай булды...

1931 йылдың 6 авгусында, раскулачивание тип, атайҙарҙы Себергә һөрҙөләр. Октябрь айында Кемерово өлкәһенең Кузнецкий районына тайгаға алып барып ташлағандар. Еүеш, һыуыҡ, ас-яланғас, аҙыҡ юҡ, бура бурап, ҡышҡа саҡ бөтөрөп ингәндәр, күптәре үлеп бөткән. Маһира апайым, Шәмсинур, Рауза һеңлеләрем шунда үлеп ҡалған. Тамам астан ҡырылып бөтөп барғанда атайым менән әсәйем ҡулында бер бала ҡалған, уныһына ла һыуыҡ тейеп, ауырыу Мөхәмәтхан ҡустымды йөкмәп ҡайтып килделәр. Ҡустым йүнәлә алманы, үлеп ҡалды. Мин ҡартатайымдарҙа булғанға ғына, осраҡлы рәүештә тороп ҡалдым. Ҡартатайым тарихты ныҡ белә ине. Атайымдарҙы Себергә ебәргәндә, «Кешелек аҡылына һыя торған эш түгел был, тарихта бындай әхлаҡһыҙлыҡ, насарлыҡ ҡылынғанын ишеткәнем юҡ, киләсәккә ғибрәт булһын» тип, «Төн ҡараңғы» тигән мөнәжәт сығарҙы:

*Төн ҡараңғы, дөм ҡараңғы, яҡты шәм янмаҫ микән,*
*Ямғыр урынына хоҙаның рәхмәте яумаҫ микән.*
*Ҡандан эшләнгән бағаналар тамам аумаҫ микән,*
*Донъяның шайтандары етер, бер-бер бығауланмаҫ микән.*



Себерҙә саҡта әсәйем бәйеттәр сығарған. Бына шуларҙың береһе:

*Был бәйетте яҙамын мин һеҙҙең өсөн,*
*Йөҙҙәребеҙ һарғайҙы бит һеҙҙең өсөн.*
*Балта-бысҡы тотоп талды беләктәрем,*
*Иҫкә төшһә, яна минең йөрәктәрем.*
*Ҡабул итһен бер хоҙайым теләктәрем,*
*Бер хоҙайым үҙең генә ҡотҡар инде.*



Себерҙән саҡ ҡайтып йығылғайнылар, атайҙы тағы һөргөнгө ебәрҙеләр, Беломорканал төҙөргә. Унда астан ҡүтөртеп, хәлһеҙ ятҡанда, бригадирҙары яҡшы кеше булып, бер нисә көн ял биргән, эшкә сыҡты, тип билдәләгән, шулай үлемдән ҡалған. Өс йыл йөрөп, тамам йонсоп ҡайтып инде. Колхозда бик һәйбәт итеп, алдынғы булып эшләп йөрөй ине, оҫтөнән яҙып, 37-се йыл тағы алып киттеләр. Йылайыр төрмәһендә өс ай ултырғас, ғәйебе юҡ, тип сығарҙылар. Камил үҙәгенә үтеп, ауырып, ҡайтып йығылды ла шунан эшкинә алманы. 41-се йылдың мартында үлеп ҡалды.

Ул йылдарҙың шауҡымы ҡартатайымдарҙы ла урап үтмәне. Өс мәртәбә инеп таланылар, өй эсендә бер генә нәмә лә ҡалманы.

Ҡартатайымдың шул саҡта сығарған бер йыры:

*Йәшел саналарға яҡшы ат егеп,*
*Йөрөһәң ине Һаҡмар буйында.*
*Мал-милкемдән айырылып,*
*Йәйәү йөрөү*

*Һис юҡ ине минең уйымда.*
*Урмандарҙан үтә юлдар түтә,*
*Автомобиль — арба юлы үтә.*
*Йәйәү генә йөрөп,*
*Арбаларҙы һөйрәү —*
*Ғәзиз йәндәремә шул үтә.*

37-се йыл йәше 70-кә еткән ҡартатайымды ла алдылар. Йылайыр төрмәһендә атайым менән хушлашҡанда ул, бүтән бер нәмәгә лә ҡайғырмайым, Мөхәмәтйән уҡый алманы, тип илап ҡалған, ти. Ғүмер буйы кешегә тик изгелек эшләп йәшәгән кеше, йәбер-золомға дусар ителеп, Өфө төрмәһендә үлеп ҡалды.

Өйҙә бер нәмә лә ҡалмағас, коммун Сабирйән тигән берәү инеп, китап кәштәһе артынан бер һөртөш сепарат майы табып, кеҫәһенә һалып сығып китте, икенсе берәүһе, Усман тигәне, аяҡ аҫтынан алама бер кәҙә балаҫын ҡултығына ҡыҫтырып сығып китте. Күрше Бибикамал тигән апай, абыстай инәй,

беҙзең изгелектәрегеҙҙе онотмайбыҙ, тип, бер сеүәтә ярма алып килде. Ҡартәсәйем бик шәпле табип булды, шуның арҡаһында ғына беҙ тороп ҡалдыҡ...

Аҡъюл ауылында йөрөп уҡып, 5 класты тамамлаған Мөхәмәтйән ағайға 1937 йылда уҡыуын ҡалдырып, Һаҡмар Бүреһенә ҡайтырға, өлкәндәр менән бер рәттән колхоз эшендә эшләргә тура килә, ә Аҡһыйырға ҡартәсәһенә терәк булып Һәйпәп апаһы бара.

Мөхәмәтйән ағай 1942 йыл армияға алына, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. 1948 йылда әйләнеп ҡайта, тәүҙә колхозда төрлө эштә, 1957 йылдан шофер булып, һуңынан хаҡлы ялға сыҡҡансы умартасы булып эшләй. Эштә алдынғы булғаны өсөн тиҫтәләрсә маҡтау ҡағыҙы менән бүләкләнгән. Армиянан ҡайтҡас, өйләнеп, Бибиһан еңгә менән 1 ҡыҙ, 5 ул үҫтергәндәр, бөтәһе лә башлы-күҙле, 16 ейән-ейәнсәре бар.

Был оло ғаиләлә ҡанбабалар тәрбиәһе традициялары күсәгиләнлеге — тәбиғи күренеш. «Ҡыҙыбыҙ Хәмдиә, атай, һин балаларға әйтеп йөрө, барыбер һеңеп ҡала ул, кәрәк саҡта иҫкә төшә ул, тип үтенә», — ти Мөхәмәтйән ағай.

— Ҡартатайым былай тип өйрәтә торғайны, — ти ул, — балам, яҡшы бул, яҡшы кешене яман кеше лә ярата; таш менән орғанда ла аш менән ор: әгәр ҙә һин үҙем өсөн йәшәйем, тиһәң — йәшә кеше өсөн, тиер ине. Үҙе лә кеше өсөн йәшәне, үҙ ғүмерендә өс етемде аҫрап үҫтереп, кеше итеп ебәрҙе. Алдама, хурлама, тәкәббер булма, бына иблис Ғазазил тигән фәрештә булған, шул үҙенең мин-минлеге, тәкәбберлеге арҡаһында ожмахтан ҡыуылған ти ҙә, көйләп күрһәтә:

*Тәкәббер хәтереңә килһә филхәл,*
*Ғазазил ҡиссаһын алдыңа ал.*

Бабичтың «Ғазазил» тигән шиғырын ятлата:

*...Нишләйһең ҡәлбеңдә аҡ эҙ булмаһас,*
*Кәкре бармаҡ баштан уҡ төҙ булмағас.*
*Мәғлүмәт тәүфиҡ менән берләшмәгәс,*
*Выжданы аҡыл менән серләшмәгәс...*

Нәфселе булма, яман кеше менән ҡатышма, яҡшы менән ҡатыш. Еҫле май, хушбуй магазины эргәһенән үткәндә һиңә бер тамсыһын да буш бирмәйҙәр, әммә танауыңа еҫе инә. Шуның шикелле, яҡшы кеше менән ҡатышһаң, хушбуй еҫе сыҡҡан һымаҡ, һиңә уның яҡшылығы, шарафаты керә; яҡшынан үрнәк ал, ямандан ғибрәт ал; яҡшының шарафаты, яман-дың касафаты:

*Кеше булыр кешенең*
*кеше менән эше бар,*
*Кеше булмаҫ кешенең*
*Кешелә ни эше бар, —*

ти торғайны.

— Белем тураһында: балам, бел дә эсеңә һал да ҡуй. Кеҫәлә ятҡан аҡса менән бер ул, ҡайһы ваҡытта кәрәк, алаһың да тотонаһың, белем дә шулай. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.

Инәнән тыуған берәүҙәр, эсһәм, ашаһам, ултырһам, ти, уларҙа — тән ҡомары. Икенселәре, күрһәм, белһәм, ойрәнһәм, ти, быларында — йән ҡомары, тиер ине. Ҡурайсылар ҡурай уйнай, йыраусылар йырлай, алдынан тарихын һөйләйҙәр, ҡалғандар бүлмәй, алдына сыҡмай шым ғына тыңлап ултырырҙар ине. Йән ҡомары алдын булды.

Ҡартатайымдың календарында үҙ ҡулы менән яҙып ҡуйылған Аҡмулланың шиғыры бар ине.

*Халҡы — болғар булһа булһын,*
*Йорто болғар булмаһын.*
*Донъяһы тар булһа булһын,*
*Күкрәге тар булмаһын.*

Байлыҡ — ул, һөрһә, илдеке, һөрһә, яуҙыҡы. Иң ҙур байлыҡ — рух байлығы, тиер ине, — тип иҫләй ҡартатаһының тәрбиәһе тураһында Мөхәмәтйән ағай.

— Рух байлығы булмаһа, Салауаттар булыр инеме? Әхмәтзәки Вәлидиҙең «Хәтирәләр»ен уҡып сыҡтым, исмаһам, бер хыянатсы, бер эскесе тураһында һүҙ юҡ. Уларҙа рух бай-

ығы зур булған. Рух юҡ икән, дүрт аяҡлы мал һин. Аҡмулла да әйткән бит:

*Булмайыҡ дүрт аяҡлы мал шикелле,*
*Ҡыуарған япраҡһыҙ тал шикелле.*

Халҡыбыҙҙы әскелектән йолоп алып, рух байлығын кире ҡайтарырға кәрәк, ти ул.

– Бәләкәйҙән йырларға яраттым. Мөнәжәттәрҙе белеүем – әсәйемдән, боронғо йырҙар йырлауым – Аҡһыйыр ауылынан, 15–20-ләгән генә өйлөк ауыл булды ул, халҡы татыу йәшәне, өй һайын йыраусы булдылар. Минән саҡ ҡына өлкәнерәк Нәбирә тигән апай, Ғәли ағайҙар булды, «Әрме», «Һыр», «Кәмәлек», «Ирмәк», «Сәхипъямал», «Силәбе» һәм башҡа күп йырҙарҙы уларҙан оттом, үҙемдең бер туған апайым Зәйнәптән өйрәндем, ти Мөхәмәтйән ағай.

*Ике лә генә егет юлға сыҡты,*
*Бер тин аҡса тапһам да файҙа, тип.*
*Бара ла ғына торғас, илаштылар*
*Илаһи тәҡдир беҙгә лә ҡайҙа, тип.*

(«Ирмәк»)




(«Ирмәк» Әхмәтзәки Вәлидиҙең гәскәрендә яратып йырланған йыр булған. Был йырҙа шул мәлдәрҙәге алдағы билдәһеҙлек, милләттең киләсәге өсөн борсолоуҙар зар булып сағылғандай. – *Ю.Г.*)

– Кем, ҡайҙа, нисек йырлай, берәйһенәң йыр, көй отоп алмаҫмын микән, тип аңлыным да йөрөнөм.

Бер мәжлестә Йәнтеш ауылынан Һаҙый ағай Моталов бар ине. «Урал»ды уның йырлауы буйынса отоп алдым: Аҡъюл ауылында 5 класта уҡығанда 12 йәшемдә беренсе тапҡыр сәхнәгә сыҡтым, шунда «Урал»ды йырланым:

*Турысайға менеп, әкрен атлатып,*
*Йөрөһәң ине Урал буйлатып.*
*Көрәгәләр тултырып, дуҫтар йыйып,*
*Ултырһаң ине ҡурай уйнатып.*

*Алыҫтарҙан уҡ күгәреп күренеп ятҡан*
*Урал ғына еренең таулары.*
*Ҡайҙа ла ғына барһа ла яу бирмәгән*
*Данлыҡлы ла башҡорт балаһы.*

*Сәхипъямал ҡайҙа, гөл баҡсала,*
*Һыу һибәлер Сәхип баҡсала.*
*Сәхипъямал кеүек матур ҡыҙҙы*
*Сәсеп үҫтереп булмай ҙа бит баҡсала,*
*Һатып алып булмай бит аҡсаға.*







Аҡъюлда ла өй беренсә йыраусы, ҡурайсылар булды. Ишемголов Шәрәф тигән олатай бар ине. Арыҫлан кеүек дүрт улы булды, көслө ҡурайсылар ине, өсөһө фронтта ятып ҡалды. Шәрәф олатайҙы «Шүрәле» тип йөрөттөләр. Йәш сағында шаян булған, йәйләүҙә йылға буйында шыр ялангас сисенеп ҡойоға буялған да, һыуға килгән ҡатын-ҡыҙҙы ҡурҡытҡан. Шәрәф олатайҙан «Ғәзизәкәй», «Шафиҡ» йырҙарын отоп алдым.

*Ике лә генә аҡҡош, ай, һауала,*
*Ғәзизәкәй,*

*Ыласын ҡоштар ятмай ҙа ояла.*
*Ир арыҫланы тип үк йөрөһәң дә,*
*Ғәзизәкәй,*
*Мәңге йәшәп булмай донъяла.*
*Ап-аҡ та ғына ап-аҡ ҡарҙар яуа,*
*Ғәзизәкәй,*
*Ҡаршылағы тауға үңергә.*
*Ат парлап та ҡыуып етеп булмай,*
*Ғәзизәкәй,*
*Үтеп тә генә барған ғүмергә.*

Әбеш ауылынан Йәнсура олатай һәм Аҡназар ауылынан Ғиниәт ағайҙан «Ҡаһарман кантон» тигән йырҙы отоп алдым. Бала ғына саҡта йырлап йөрөй инем, бер ағай: «Һин, малай, нишләп был тыйылған йырҙы йырлап йөрөйһөң, нишләп кантон тураһында йырлайһың, беҙ һине ултыртып ҡуябыҙ икән», – тип ҡурҡытҡайны, көйөн бик ратҡас, онот тиһәләр ҙә онотманым, ике генә куплетын иҫемдә ҡалдырҙым да көйөнө «Түрәкәй» йырының һүҙҙәрен ҡушып йырланым да йөрөнөм.

Әбеш ауылынан шул хәтлем шәпле ҡурайсы, йыраусы Дәүләтғәли Хәсәнов булды. Атайҙар уны бик яратты, бер мәжлестән дә ҡалдырманылар. Ул уйнар алдынан ҡурайына ныҡ итеп бер өрөп алыр ине, тәндәр эҫеле-һыуыҡлы булып китер ине. Уйнай, һуңынан йырлап, тарихын һөйләй торғайны.

Аҡъярҙа Абдрахман Нураев тигән бик абруйлы кеше булды, атайҙар уның менән ҡоҙа булышҡандар. Туйға Дәүләтғәли Хәсәновты ла алғандар. Кешегә лайыҡлы баһаһын биреп ҡәҙер итеү онотолмай. Дәүләтғәли еҙнә ғүмеренең буйына һөйләне инде: Нураев ҡарт шунда шул көйҙө һораны. Фәлән-фәләндәрҙең туйында фәлән көйҙөң тарихын һорап уйнаттылар... Боронғо заман, халыҡтың үҙ еренә хужа булып, матур йәшәгән сағы. Башҡорт шулай-былай булған, тиҙәр, башҡорт шул хәтлем ярлы булмаған бит ул. Күргәҙмәләрҙә сабата элеп ҡуйған булалар, башҡорт сабата киймәгән, сабата кейгән кеше – урыҫ, тип көлгәндәр. Үҙенә күрә итекселәре лә булды, итек, сарыҡ кейҙеләр, тапочкаһын да тектеләр.

Дәүләтғәли Хәсәновтан «Наполеон Бонапарт», «Муса Мортазин» (был ике көй тураһында материалдар «Башҡортостан»

...итендә баҫылып сыкты. — *Ю.Ғ.*), «Йәнтилә ҡашҡа» марш-...арын, «Мәгри» йырын отоп алдым, ти Мөхәмәтйән ағай.

Хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы Аҡсура ...ауылында бер ҡыҙҙы икенсе ҡатынлыҡҡа биргәндәр ҙә шул ...ҡыҙ йыр сығарған:

*Түңәрәккәй күлдә яңғыҙ өйрәк,*
*Атма инде, атай, алам, тип.*
*Бирмәҫ ерҙәреңә бирҙең инде,*
*Әйтмә инде, ғәзиз балам, тип.*
*Тау түшенә ултырып мин йырлайым,*
*Көй күтәрә берәү арьяҡта.*
*Минең хәлдәремде кеше белмәй,*
*Үҙем ултырып илайым аулаҡта.*

(«Мәгри»)




Әбеш ауылынан «Кәкүк Ғәлимйән» тигән берәү бар ине. «Кәкүк» тигән бик матур бер йырҙы һөйләп, көйләп, аҙаҡ бейеп китер ине. Шуға «Кәкүк» тип исем ҡушҡандар инде. Шул йырға иғтибар бирмәгәнемә һаман үкенәм, йыры ла, көйө лә китте, әрәм булды, — ти сәсән.

Бына ошо үкенеүҙә бер ни ҡәҙәре Мөхәмәтйән ағайҙың ижад ҡомары, йән ҡомары сағылғандай. Мөхәмәтйән ағай

башҡорт телендә ваҡытлы матбуғатты, башҡорт яҙыусыларының китаптарын уҡып бара. Күңеленә оҡшаған әҫәрҙәрҙе хәтеренә беркетеп ҡуя, тормошта тап килгән урында яттан һөйләп биреү уға бер ни ҙә тормай.

18 быуатта йәшәгән француз философы Ларошфуко: «Ниңәлер берәү ҙә аҡылым юҡ, тимәй, хәтерем юҡ, ти», – тип әйткән. Ысынлап та, зирәк хәтер зирәк аҡылда ғына булалыр ул. Мөхәмәтйән ағайҙың зирәк хәтерендә һаҡланмаһа, күпме хазиналарыбыҙ юғалған булыр ине!

– Үҙеңдең йәшеңә ҡарағанда йәшерәк күренәһең, тиҙәр, – ти Мөхәмәтйән ағай. – Әгәр шулай икән, мин тик йырҙан, тип уйлайым. Мин ҡайғылы ваҡытта ла йырлайым, ҡыуаныста ла. Йырһыҙ мин йәшәй алмайым. Йыр – ул минең өсөн ғүмер.

Мәшһүр Бабичтың «Халҡым өсөн» тигән шиғырын Мөхәмәтйән ағай айырыуса яратып, аһәңле итеп башҡара. Күңелендәге уй-тойғоларҙы сағылдырғаны өсөндөр, моғайын:



Мөхәмәтйән ағайға ошо көндәрҙә 75 йәш тула. Ошо уңай менән башҡорт моңон яратҡан бөтә ғаләм исеменән уны ихлас ҡотлағы һәм иң изге теләктәр теләге килә... Ҡомартҡыларың менән бергә исемең дә мәңге буласаҡ, Мөхәмәтйән ағай!

Йөҙ йәшә, ил ағаһы!

*«Шоңҡар» журналы, 1999 йыл, № 6*

*Шәйхелислам Айсыуаҡов,*
*«Башҡортостан» гәзитенең үҙ хәбәрсеһе.*

## Башҡорт моңо ҡояш сығыштарында

Кешене яҙмыш йөрөтә, тиеүҙәре дөрөҫтөр. Бына Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевтың да Япония сәхнәһенә сығып йырлап йөрөрмөн тип ете ятып бер төшөнә лә инмәгәндер. 1942 йылдың 18 авгусында һуғышҡа алынғас, ул Тымыҡ океан флотының эләгә һәм Алыҫ Көнсығышты япон милитаристарынан азат итеүҙә ҡатнаша. Хәрби шофер булып Маньчжурияның Хуньчунь ҡалаһын, Кореяның Юки, Расен, Сесин порттарын алына; Японияның 1945 йылдың 3 сентябрендә һис һүҙһеҙ капитуляция яһауы тураһында актҡа ҡул ҡуйыуы күңеленә мәңгегә һеңеп ҡала. Икенсе бөтә донъя һуғышы тамамланыуға 55 йыл үткәндә... Японияға саҡырыу ала. Ярты быуат элек Тыуған иленә үлемесле һуғыш менән янаған японлар иленә фестивалгә. Ғүмеһә, йәше лә етмеш алтыла. Оҙайлы сәфәргә, Ҡояш сығышына... Бында Мөхәмәтйән ағай ҡаушаңҡырап ҡала. «Дошманлыҡ хисе һаҡланманымы икән, ниндәйерәк халыҡ ул японлар? Ишетеп белеүемсә, төрлө яҡлап үҫешкән, алға киткән ил. Ана, былтыр Хоккайдо префектураһынан профессор Танимото Кидзуйуки Һаҡмар-Наҙарғолға үҙе мине эҙләп килде ләһә! Шул килеүендә саҡырып ҡайтҡаны, һүҙендә тәки торған икән. Был Юлай Ғәйнетдиновтың әрһеҙлегелер инде», — тип уйланды ул.

Башҡортостандың халыҡ артисы, данлыҡлы ҡурайсы, «Башҡортостан» телерадиокомпанияһының «Хазина» тапшырыуы етәксеһе Юлай Ғәйнетдинов менән Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевты башҡорт йырҙары таныштыра. Мөхәмәтйән ағай республикабыҙҙа иң боронғо, һирәк осраған йырҙарын күңелендә һаҡлаған киң билдәле йыраусы.

— Халыҡ араһына сығыуыма Юлай уҙаман булышлыҡ итте, «Наполеон Бонапарт», «Мортазин маршы», «Мәғри», «Ирмәк», «Ҡаһарман кантон», «Силәбе», «Ғәзизәкәй», «Сәхипъямал», «Ынйы», «Урал» (варианты — *Ш.А.*) көйҙәрен яҙып алып репертуарға сығарҙы, видеотаҫмаға төшөрҙө, — ти ағай.

Тағы ла бер нәмәне әйтмәй китеү оло яҙыҡ булыр. Мөхәмәтйән ағайҙың сәсәнлеге, йырлау ҡеүәһе хаҡында байтаҡ

йыллар элек филология фәндәре докторы, профессор Рәшит Шәкүр, музыка белгесе Гөлназ Галина, фәнни баһа биреп ҙурлап яҙып сыҡҡайны. Ана шуға күрә Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевтың тәржемәи хәленә, башҡорт халыҡ ижадында тотҡан урынына артыҡ туҡталмайса, инде танылған йыраусы, сәсән булараҡ, Японияла үткән халыҡ-ара фольклор фестивалендә ҡатнашып, унан алған тәьҫораты хаҡында бәйән итмәксемен.

Халыҡ-ара фольклор фестиваленә Башҡортостандан алты кеше — Юлай Ғәйнетдинов (етәксе), Учалынан — Рәйес Низаметдинов (ҡурай), Розалия Фәйезова (бейеү, йыр, ҡобайыр), Белореттан — Мөхәмәт Түләбаев (ҡурай), Баймаҡтан — Ташбулат Дәүләтшин (ҡурай, йыр), Хәйбулланан Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев (йыр, сәсәнлек) юлға сыға. Башта телгә алғанса, Японияның фольклорсы-ғалимы бынан алда килгәнендә лә башҡорт халыҡ йырҙары һәм уны башҡарыусы йырауҙар, сәсәнлек, ҡобайырҙар менән ныҡ ҡыҙыҡһына, Мөхәмәтйән ағайҙың өйөндә ҡунаҡта булғанда уның бик күп йырҙарын магнитофон таҫмаһына яҙып ала. Башҡорт ҡурайының моңон уғата оҡшата.

— Шереметьево аэропортынан Токиоға осоҡ. Башта алыс сәфәрҙән шикләнеңкерәһәм дә, аҙаҡ тынысландым. Алтыбыҙ бер ғаилә балалары һымаҡ, өймәкләштек. Иң олоһо — мин. Ҙурлап, хөрмәтләп кенә торалар. Тик мине бер генә нәмә борсой — сәхнәлә ҡаушамаһам, тауышым һығылмаһа ярар ине, тип Хоҙайҙан һорайым, — тип башланы һүҙен Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев ағай үҙенең юл тәьҫоратын. — «Боинг» самолетында Токиоға туғыҙ сәғәттә осоп килеп еттек. Бик ҙур, бөтә уңайлығы булған һауа лайнерында үҙемде ожмахтағы һымаҡ тойҙом. Хисемде юлдаштарыма бигүк белдермәһәм дә; һоҡланыуымдың сиге юҡ ине. Ғүмер буйы колхоз эшенән бушамаған, сирек быуат самаһы шофер булып эшләгән кешенең күңелендә ни булһын?! Сит ҡитғала нисек ҡабул итерҙәр икән, тип уйлап киләм, эстән генә көйләп алам, мөнәжәт-нәсихәттәремде күңелдән барлайым. Ҙур сәхнәгә сығам бит. Уйландыра...

Токио аэропортында беҙҙе ҙурлап ҡаршыланылар. Япондарҙың донъяһы үҙҙәренсә, беҙҙекенән ныҡ айырылғанын күреп, хайран ҡалдым. Баш эйеп, йылмайып, бик кеселекле

һәм өҙәпле ҡаршылайҙар икән. Тауыш, шау-шыу тигән нәмә юҡ. Аэропорттары төҙөк, матур, ялт итеп тора, юлдары, автомобилдәре, кунаҡханалары — һәммәһе кеше ҡулланһын, рәхәтләнһен, тип тәғәйенләнгәне асыҡ сағыла.

Токионан Осакаға юлландыҡ. Беҙҙең делегацияны профессор Танимото ҡатыны менән үҙе килеп ололап ҡаршыланы. Ҡунаҡханаға урынлаштырҙылар. Юка исемле йәш кенә матур ҡыҙ тәржемәсебеҙ булды. Ул университет тамамлаған. Әле аспирантурала уҡып йөрөй. Урыҫса, инглизсә һәйбәт һөйләшә. Килгәс, аптырап торманыҡ. Кемдең ниндәй маҡсат менән килгәнен, юл сәфәре программаһын алдан белеп, әйҙүкләп кенә торалар. Барыһы ла алдан уйланылған, йөҙ ҡыҙартырлыҡ түгел. Урамға сыҡһаң да, ҡунаҡханаға ҡайтһаң да, ресторанға ашарға инһәң дә — яҡты сырай, мөләйем һәм эскерһеҙ ҡарашҡа юлығаһың. Күрәһең, был тәртип-тәрбиә японларға ғүмерҙән борон уҡ ҡан аша бирелә торғандыр... Минә япондарҙың йәш сырайлы, ыҡсым кәүҙәле булыуҙары таң ҡалдырҙы. Ололомо, йәшме икәнен ҡапыл ғына әйтеүе ҡыйын. Тағы шунһы: урамда шау-шыу юҡ. Автомобилдәр, әйтерһең дә, ҙур тиҙлектә шыуып ҡына йөрөй, газ еҫе лә килмәй. Тимәк, япондар үҙҙәрен тәрбиә итеүгә, әйләнә-тирә мөхиткә талапсан. Ерҙәре тар булһа ла, күңелдәре киң икән, тигән уй күңелемә һеңде. Ысынлап та шулай. Япондар ерҙе ныҡ ҡәҙерләй белә. Өс көн эсендә мин шул хәҡиҡәткә тамам инандым.

Фестивалгә 70 илдән килгәндәр. Рәсәйҙән беҙ һәм Тыва милли округынан биш кеше ҡатнашты, башҡа төбәктәрҙән вәкилдәр булманы. Халыҡ-ара фольклор тамашаһын 130 ил делегацияһы ҡараны. Ошо һандарға ҡарап ҡына ла был фольклор сараһының ни тиклем әһәмиәткә эйә булғанын фараз итеүе ҡыйын түгел.

Беҙҙең сығыш Вьетнам Республикаһы фольклор ансамбле менән ҡатарҙан барҙы. Сәхнәбеҙ һыу осҫтөнә ҡоролғайны. Биҙәлешен һүрәтләп бирерлек һүҙ таба алмаҫмын, ахырыһы. Юлай ҡусты бер һөйләр әле. Көндә икешәр концерт бирҙек. Буш торорға форсат теймәне. Беҙ япондарға башҡорт мәжлесен күрһәттек. Мин — тирмә хужаһы, оло аҡһаҡал. Доға уҡыным, Ш. Бабичтың шиғырҙарын яттан һөйләнем, «Халҡым өсөн»дө йырланым. Юлай Ғәйнетдиновтың ҡурайына

«Вәхит», «Урал» (яңы вариантын) йырҙарын атҡарҙым. Ҡурайсыларыбыҙ Мөхәмәт Түләбаев, Ташбулат Дәүләтшин һәм Рәйес Низаметдинов йырға ла бик оҫталар икән, тамашасылар күңеленә хуш килде сығыштары. Розалия Фәйезова иһә бейене, йырланы, ҡобайыр әйтте, һәр сығышын алҡышлап оҙаттылар. Шуныһы: япондар тамаша залында үҙен тота белә, һыҙғырып-ҡысҡырып түгел, ә сама белеп алҡышлай, нык оҡшаһа, аяғүрә баҫалар.

Кешегә иғтибарлылар, тигәйнем. Барғас, бер-ике көн үткәс, тамағыма һалҡын алдырҙым. Концерт сараһын өҙәм инде, тип ҡурҡтым. Белеп ҡалғандар: табибы килә һалып еткән. Итмәгән дауа, әмәл ҡалманы. Тәки сәхнәгә сығыр хәлгә еткереп, күңелемде тынысландырҙылар. Иғтибар итмәһәләр, бәлки, сығышым өҙөлөп тә ҡуйыр ине...

Быназушлашыу концерты бирер көн дә етте. Һәр ил сәхнәлә үҙенең һөнәрен күрһәтеп ҡалырға теләй. Әммә ул бәхет барыһына ла эләкмәне. Ун илде генә һайлап алдылар йомғаҡлау концертына. Башҡортостан шулар араһында булды. Нык ғорурландыҡ. Тимәк, япон тамашасыларына хуш килгәнбеҙ.

Концерт ҡарарға Хоккайдо утрауы префектураһы губернаторы һәм «Айну халҡы мәҙәниәте үҙәге» директоры профессор Танимото, Осака ҡалаһы мэры үтте. Ҡала мэры тороп ҡотлап, башҡорттарҙың талантына баш эйҙе. Беҙҙән япон журналистары өс тапҡыр интервью алды. Һис арттырыу түгел, япондарҙың иң ҡәҙерле ҡунағы беҙ булдыҡ.

Бүләк бирештек, иҫтәлеккә фотоға төштөк, видеотаҫмаға ла яҙҙылар. Профессор Танимото минең йырҙарҙы компакт дискыға яҙҙырған. Ҡайһы арала өлгөргән тиерһең!.. «Урал моңдарында — башҡорт күңеле» («The soul of Baskir — in the melodies of Ural») тип атаған уны, минең менән Юлай Ғәйнетдиновтың төҫлө һүрәтен ҡуйып биҙәгәндәр тышлығын. Шулай уҡ Ю. Ғәйнетдиновҡа компьютер бүләк иттеләр.

Әлбиттә, беҙ ҙә буш ҡул менән тороп ҡалманыҡ. Ю. Ғәйнетдинов губернаторға, ҡала мэрына, интервью алған өс журналисҡа ҡурай бүләк итте. Шулай уҡ йүкәнән эшләнгән сувенир һауытҡа Һаҡмар буйы туғайҙары сәскәләренән йыйылған бал һалып алып барғайныҡ. Оло ҡунаҡтарыбыҙға шуны бүләк иттек. Башҡорт балы япон дуҫтарыбыҙға оҡшаны.

Япондар һәр беребеҙҙе ҡосаҡлап, арҡабыҙҙан ҡағып, дуҫтарса оҙатты. Тәржемәсебеҙ Юка илап тороп ҡалды. Бына шулай, Японияға фольколор фестиваленә сәфәребеҙ тамамланды. Беҙ башҡорттоң рухи күңелен, моңон, милли һынын Көньяк сығышы иленә алып барып, бөтә донъя гәменә күрһәттек. Шуға һөйөнөп бөтә алмайым. Японияға сәфәр ҡылырға мөмкинлек тыуҙырған Башҡортостан хөкүмәтенә, район хакимиәттәренә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ, — тип тамамланы һүҙен Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев ағай. Унан тағы өҫтәне:

— Йыр йырлап, мөнәжәт көйләп, баш ҡала һәм ауыл сәхнәләрендә, һабантуй табындарында, мәжлестәрҙә күп сығыш яһалды. Әммә япон сәхнәһе мине ныҡ ҡанатландырҙы. Ана шуға ошо сәфәрҙе ойоштороусыларға мең рәхмәтлемен. Йырҙың сиге юҡ. Ул ҡитғаларҙы яҡынайта, халыҡтарҙы дуҫлаштыра, йырға тәржемәсе лә кәрәкмәй. Уны тамашасы, кем булыуына ҡарамаҫтан, күңеле менән тоя. Япондар ҙа беҙҙең моңдо, ҡурайҙы үҙ итте. Шуға ҡыуанам.

... Ярты быуат элек ҡулына ҡорал тотоп Алыҫ Көнсығышта япон самурайҙарына ҡаршы сыҡҡан, Тыуған иленең азатлығын ҡурсалаған һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, йыраусы һәм сәсән Мөхәмәтйән ағайҙың бөгөн япон халҡына ҡарашы бөтөнләй икенсе төрлө. Япондарҙы ул дошман тип түгел, ә дуҫ итеп белә, эскерһеҙ ҡаршылап, оҙатып ҡалғандарына һөйөнөп бөтә алмай.

— Сәйәсәтте сәйәсмәндәр тыуҙыра, илдәр араһындағы һуғыш-талашҡа ла улар сәбәпсе. Ябай халыҡ бер ваҡытта ла үҙ-ара низағлашмай. Йыр, мәҙәниәт кешеләрҙе яҡынлаштыра, туғанлаштыра. Японияла фольклор фестивалендә булып ҡайтыу миңә күпте белергә, аңларға ярҙам итте, — тине аҡһаҡал юл сәфәренә һығымта яһап.

*«Башҡортостан» гәзите,*
*2000 йыл, № 189*

## Йыраусы

*Йыраусы-ағай*
*Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевҡа*

### *I. Аҡһыйыр хаҡында йыр*

*Яҙмышыңа ул йыр булып ингән —*
*Һаҡмар буйындағы Аҡһыйыр.*
*Ауыл бөткән.*
*Әммә аға Һаҡмар.*
*Мәңге тынмай шулай аҡһын йыр.*

*Ошонда һин тәүләп йыр ишеттең,*
*Әсир булдың бала көйөңә.*
*Берәү йырлай ине кис эңерҙә,*
*Һығылдырып оҙон көйөнә:*

*«Менгән генә атым, эй, ҡыҙыл күк,*
*Егеп кенә сыҡтым, шул, эңерҙүк.*
*Ҡайғы ғына хәсрәт бөтөр микән,*
*Әллә китер микән ғүмергүк?..»*

*Ишетте лә йырҙы Мөхәмәтйән*
*Ҡалды ҡатып баҫҡан ерендә.*
*Йырлағыһы килде малайҙың да —*
*Ҡыбырлап уҡ ҡуйҙы ирендәр.*

*Күкрәгендә сәнсте әллә нәмә,*
*Әллә нәмә унда һыйманы,*
*Һандуғастай ҡапыл бер талпынды,*
*Ҡарлуғастай берсә туланы...*

*Шул йыр һине,*
*Аҡһыйырҙан алып,*
*Оҙата бара ғүмер буйына.*

*Һағыштарың,*
*ергә төшкән ҡарҙай,*
*Ҡороша ла иреп быу була.*

*Ҡайғыларың,*
*дауыл ябырылғандай,*
*Ҡағып тора — Һаҡмар ағымы,*
*Ҡаҡлығып та китә күкрәгеңдән,*
*Ҡалҡан һымаҡ ҡалҡҡан сағында.*

*Шул йыр инде,*
*Аҡһыйырҙан башлап,*
*Күңеленә күпме уралды,*
*Тәгәрмәстән ҡасҡан юлдар булып,*
*Ашып китте күкшел Уралды.*

*Атлы башҡорт, ерен-илен һаҡлап,*
*Гиҙмәгән һуң ҡасан, ҡайҙарҙа?!*
*Йыры уға мәңге юлдаш булған,*
*Йыр йыуаныс булған яуҙарҙа.*
*Һине лә бит*
*Аҡһыйырҙа тыуған*
*Моңло-зарлы йырҙар оҙатты.*
*Алҡымыңдан ҡайғы алған саҡта*
*Ғүмереңде лә йырҙар оҙайтты...*

*«Һыр йылғаһы буйы һары ла ҡамыш,*
*Араһынан килә бер тауыш.*
*Боролоп-боролоп аҡҡан йылға кеүек,*
*Беҙҙең хәсрәт, беҙҙең был һағыш...»*

*Һаҡмарыңда уны ишеткәндә*
*Уйламаның әле алдыңды,*
*Ҡайҙа ғына барып сығырыңды,*
*Ватаныңа бирер антыңды.*

*Ә яҙмышың һине ете йылға*
*Тыуған еркәйеңдән айырҙы.*

*Бер нәмә лә алып киталманың,*
*Алып киттең бары моң-йырҙы.*

*Йыр менән тук,*
*тулы күңелкәйең,*
*Ташламаның һис бер ваҡытта:*
*Көйләнең һин уны окоптарҙа,*
*Йырланың һин уны походта.*

*Тана һөтө менән түгел инде,*
*Ана һөтө менән һеңгәнгә,*
*Йыр — серҙәш тә,*
*ҡоралдаш та булды*
*Фашистарҙы илдән һөргәндә.*

*Әсәң һөтө менән ингәнгә шул*
*Һаҡланы йыр һине бетеүҙән.*
*Аҡһыйырҙың изге аҡ һөтөндәй,*
*Ҡурсаланы,*
*гел дә иҫкәртте ул*
*Донъяларҙан иртә китеүҙән...*

*Яҙмышыңа ул йыр булып ингән —*
*Һаҡмар буйындағы Аҡһыйыр.*
*Ауыл бөткән.*
*Әммә Һаҡмар аға.*
*Мәңге тынмай шулай аҡһын йыр...*

***II. Сәсәндең һамаҡлағаны***

*Урман ҡыҙырып барғанда*
*Урман — минең һөйгәнем.*
*Ҡеүәт алам йәнемә,*
*Һәр ағасҡа һөйәлеп.*

*Тау бауырлап барғанда*
*Тауҙар — йырлы төйәгем.*
*Ҡуйған һымаҡ шауҙырлап*
*Батырҙарҙың һөйәге.*

*Һиҫкәндерһәм йылғаны,*
*Йылға — йырлы серҙәшем.*
*Йор тулҡын теле менән.*
*Сәләмләй рух ҡәрҙәшем.*

*Айҡаһам сал даланы,*
*Дала — сикһеҙ моңдашым,*
*Ҡалҡҡандай һәр убанан*
*Буранбайҙар юлдашы.*

*Сыҡһам ҡырға ирәйеп,*
*Тын китә иркенәйеп.*
*Һәр әрәмә, һәр сәскә*
*Тыңлай моңом кинәнеп.*

*Шунан китә йырылып,*
*Йыр быуаһы урғылып.*
*Йыр — ул йәндең ҡурғыһы,*
*Ҡурғының да нурлыһы.*

*Байығансы ҡояшың,*
*Йыр донъяңды ялмаған.*
*Бына шуға ла башҡорт*
*Йырһыҙ йәшәй алмаған.*

***III. Юлдарҙың йырлағаны***

*Юлың оҙон, башҡорт йыры кеүек,*
*Йырың оҙон ерҙә юлдарҙай.*
*Юлдарҙа һин таптың йәшәү гәмен,*
*Йырҙар менән юлың уңырҙай.*

*Олатайҙар йырын койләй-көйләй,*
*Ерҙә күпме юлдар ураның!*
*Йырҙар кеүек, юлдар бөгөл-бөгөл,*
*Һайламаның юлдың тураһын.*

*Йырҙар ғына ҡанат ҡуйҙымы икән —*
*Гел талпынып ҡайттың юлдарҙан.*

*Үҙең кеүек эшһөйәрҙәр үҫте,*
*Ил алдында уңдың улдарҙан.*

*Юлдарыңды йырлап уҙғанғалыр,*
*Иркенәйҙе тының юлдарҙа.*
*Юлдар — һинһеҙ, һин юлдарһыҙ ҡалһаң,*
*Етемһерәр ине йырҙар ҙа.*

*Юл башынан алып йыр башлаһаң,*
*Көй күтәрҙе мәғрүр Шайтантау.*
*Оҙатып барҙы йырҙы Һаҡмар һылыу,*
*Күтәреп тә алды дала, тау...*

*Әллә һинең заман аты менән*
*Ярышамы дала ҡурғаны,*
*Әллә йырың менән ҡауышамы*
*Ҡурайҙары, ҡомош ҡылғаны?*

*Йәнеңә йыр инеп оялағас,*
*Камил әсир төштөң моңдарға.*
*Шуғалыр ҙа уйсан күңелкәйең*
*Тартылды ла торҙо юлдарға.*

*Күңелеңдә ҡоштар һайрап барғас,*
*Ҡорос атың алғыр йомолдо.*
*Оҙаҡ ебәрмәне һине юлдар,*
*Ташлай алмағандай йыр-моңдо.*

*Һиндәге дәрт, осҡор хыялдарҙы*
*Аңлай алмай күптәр йонсоно.*
*Һин үҙең дә*
*йырһыҙ, юлһыҙ ҡалһаң,*
*Аунап сығыр инең тонсоғоп...*

### *IV. Ҡобайыр Сәйетгәрәй Ғәлиәкбәровҡа*

*Был донъяның төп тотҡаһы — инсан тигән,*
*Инсандарҙың бар донъяһы иман тигән.*

*Донъялыкта бар иманын юғалтҡандар*
*Тамуҡтарҙа көлфәйәкән яныр тигән.*

*Был донъяның барлыҡ йәме — яҡшылыкта,*
*Ҡыл яҡшылыҡ, ҡаршы тороп шаҡшылыҡҡа.*
*Яҡшылығың күп мәртәбә кире ҡайтыр,*
*Ғүмерең үтер тыныслыкта, хаҡсыллыкта.*

*Был донъяның кәмселеге — фәкирлектә,*
*Фәкир йәне китек була тәкдирлектә,*
*Ғүмере уҙа ят тупһала әсирлектә,*
*Ризалыкһыҙ китә бәндә баҡыйлыҡҡа.*

*Был донъяла йән һаҡсыһы — күңел тигән,*
*Күңел тулы саҡта йәшәү еңел тигән.*
*Йырлы күңел — нурлы баҡса ил түрендә,*
*Йыр булмаһа, йәшәүҙәрҙән төңөл тигән.*

*Бар ғаләмдең бер эйәһе — Аллаһ тигән,*
*Аллаһ һүҙе — ғаҡыл булыр, эйәр тигән.*
*Бар гәмәлде Аллаһ менән атҡарһаң һин,*
*Өлөшөңә рәхимлектәр тейер тигән...*

### V. Танимотоның Моң илендә булғаны

*Танимото — көйгә ғашиҡ ғалим*
*Килеп күрҙе йырсы бишеген —*
*Башҡортомдоң серле йәнтөйәген,*
*Моң иленең асты ишеген.*

*Уралымдың армыт-армыт ятҡан*
*Тауҙарынан төшөп түбәнгә,*
*Үтеп богәл-бөгәл урман юлын,*
*Килеп инде хозур биләнгә.*

*Симпозиум, ҙур форумдар менән*
*Шаҡ ҡатырыу уны ҡыйындыр.*

*Аһтар итте ҡунаҡ*
*Наҙарғолдоң*
*Күреп халҡын, ихлас йыйыпын.*

*Аптыраны япон, ғәжәп ҡылды:*
*«Ғүмер күргән юҡ та бындайҙы!*
*Хужаһы ла, ҡорттары ла бөтмөр,*
*Бында йәшәү мәңге тынмайҙыр.*
*Донъя шуға тигеҙ хәрәкәттә,*
*Моңда, көйҙә — үҫеш асылы.*
*Был ер — ғәжәп сихри төбәк тә ул!*
*Ере үҙе йырлай асылып...*
*Ҡарттар нәмә?!*
*Ҡорттары ла бында*
*Йырлап йыя балын, һитәһен.*
*Көнләшерлек...*
*Ожмах — башҡорт ере!*
*Хоҙай биргән, ни хәл итәһең...»*

**VI. Ойвакэ менән оҙон көйҙөң ярышҡаны**

*Йыр ҡеүәте һине күтәрҙе лә*
*Төшөрмәне ҡабат иңенән.*
*Йыр ҡанаты һине алып килде*
*Алыҫ Танимото иленә.*

*Япония — дарья уратҡан ил,*
*Күҙ күреме етмәҫ сал офоҡ.*
*Сыҙам халыҡ... Ғүмере — ҡыл өҫтөндә,*
*Нисек арымайҙар алышып...*

*Ҡуныр ер тапмаған аҡсарлаҡтай,*
*Осто айну йыры — ойвакэ.*
*Диңгеҙ иңләп осто сал бөркөттәй*
*Уралымдан килгән оҙон көй.*

*Башҡорт йыраусыһы көлөмһөрәй:*
*«Йырлап алышабыҙ... Мәрәкә...*

*Булды заман — бынан самурайҙар*
*Әҙ һалманы йәнгә йәрәхәт...»*

*Иҫенә төшә йәнә Һары диңгеҙ,*
*Күп башҡортҡа ҡәбер — Порт-Артур...*
*«Имен генә торған был донъяны*
*Тағы кемдәр килеп болартыр?..»*

*«Һыу буйҡайында, ай, һыуһар күп,*
*Ҡойроҡтары уның йофар күк.*
*Хас дошмандар беҙҙе,*
*ай, йотар күк,*
*Йота алмаҫтар — ерҙә дуҫтар күп...»*

### VII. Йыраусының иҫке келәткә әйткәне

Сосән, йыраусы Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевтың атаһы Абдулла Ҡотлогилде улын, кулаклыҡта ғәйепләп, 1931 йылдың 6 авгусында Наҙарголдан Себергә һөргөнгә ебәргәндә, уның шәхси хужалығындағы милкен тартып алғандар. Бына ул — кулактың топ матди байлығы теркәлгән милек исемлеге: «Ике һыйыр, ике тана, 4 ат, 8 баш һарыҡ, 200 иҙән таҡтаһы, 200 бүрәнә, 200 ҡыйыҡ таҡтаһы, ике ҡарағай ой (таҡта менән эшләнгән), 4 ултырғыс (ҡамыштан эшләнгән), бер һандыҡ, бер стена сәғәте, бер стена көҙгөһө, бер өҫтәл, ике самауыр, алты һарыҡ тиреһе, бер һыйыр тиреһе, бер фургон (арба), 15 ҡаҙаҡ ябаға, 20 ҡаҙаҡ көҙгө йөн, бер тимер ҡаҙан, ике күнәк, биш горилкә, бер ат косилкаһы». Боғон ошо «кулак» байлығының берҙән-бер мираҫы — иҫке келәт һәм шул замандың берҙән-бер тере шаһиты булып Мөхәмәтйән ағай ғына тороп ҡалған...

* * *

*Атайҙан беҙ ҡалдыҡ икәү:*
*Мин дә һин, Иҫке келәт.*
*Миңә генә һин — асыҡ ой,*
*Бүтәнгә бикле келәң.*

*Йылдар сүктергәнгә тора*
*Бер мөйөшөң ауышып.*
*Һәр бүрәнәңә һеңгәндер*
*Атайымдың тауышы.*

*Бүрәнә биҙәктәрендә —*
*Әсәйемдең күҙ нуры,*
*Ҡолаҡтарыма салына*
*Ягымлы, талғын йыры.*

*Шөкөр, бигүк бирешмәнек,*
*Ауһа ла ғүмер кисе.*
*Шыңғырап тора стенаң,*
*Яңғырап тора эсең.*

*Донъя көткәс, ғүмер буйы*
*Кәрәк-яраҡ йыйылған.*
*Өйгәндән өй ойолгандай,*
*Фаиҙаға тип ҡуйылған.*

*Әсәйемдең килен булып*
*Төшкәндәге һабаһы,*
*Ҡул тирмәне, ағас киле,*
*Етеле шәм, ҡабаһы...*

*Бүре, айыу ҡапҡандары,*
*Атайымдың суҡмары,*
*Тәгәрмәс, дуға, ыңғырсаҡ,*
*Ышлыяның суҡтары...*

*«Бары хәләл мал!..» —*
*Атайым*
*Индермәне артығын.*
*Һәр нәмәнән йүн тапҡанға,*
*Келәт тә — ҡот һандығы.*
*Келәт шаһит атайымдың*
*Арҡандар ишкәненә.*
*Арҡаны — юл: киләсәктә*

*Ут-һыуҙар кисәренә.*
*Хәтерҙә: уның келәттә*
*Сыбыртҡы үргәндәре;*
*Сыбыртҡыһы арҡаһына*
*Яҙған бар күргәндәрен...*

*Хәтерҙә келәткә инеп,*
*Әсәйҙең моңланғаны:*
*Келәт мөйөшөнә боҫоп,*
*Йырҙарын тыңлағаным.*
*Их, келәт! Һин иҫләйһеңдер*
*Йәшлек кистәремде лә;*
*Һеңдергәнһең стенаңа*
*Ҡайнар хистәремде лә...*

* * *

*Иҫке келәт! — Гел серҙәшем,*
*Һин дә минең ишеме?*
*Мин дә һиңә оҡшағанмын —*
*Боронғолоҡ ишеге.*
*Беҙҙең яҙмыш уртаҡ хәҙер —*
*Иҫкелектең тишеге.*
*Буш урынға ғына шулай*
*Ҡарайҙар бит тишелеп.*
*Беҙҙе инде был тормошта*
*Алмаҫтар ҙа ямауға.*
*Ямаулыны кейер заман*
*Күптән ауған канауға.*
*Ә былай, йөрөп ятабыҙ,*
*(Һин төшөмдә йөрөйһөң!)*
*Ҡамасауыбыҙ теймәй.*
*Мин дә ҡай саҡ ярап ҡуям,*
*Кәрәк булғандай төймә.*

*Һин тик тора тип уйлайҙар,*
*Ҡарап тороуға шулай*
*Күҙле бүкәндәргә. Мин дә*

*Кәрһеҙ ҡарт көйө ҡулай:*
*Дәғүәм дә юҡ, һорауым да,*
*Талымһыҙ, бер зарарһыҙ.*
*Уларға ни: кеше уңай —*
*Булған һайын сараһыҙ,*
*Булған һайын күрмәлекһеҙ,*
*Күҙгә эленмәгәне,*
*Һорамаған, алмағаны,*
*Әммә әләкләгәне,*
*Күршеһе хаҡында уға*
*Килеп ошаҡлағаны...*
*Күргәнең бармы ғәйбәтте*
*Кемдең ашатлағанын?*

*Һинең ғәйебең юҡ, Келәт,*
*Бөгөнгө алдында ла*
*Элеккеләр әйтер миңә:*
*«Аҡылың алтынданмы? —*
*Келәтеңде күсергәнһең*
*Өй алды бүлкәтеңә,*
*Ниндәй хөрмәт күрһәткәнһең*
*Кулактың мөлкәтенә?!*
*Күҙ алдында тормаһын.*
*Ал*
*Был иҫкелек ҡалдығын.*
*Йә үҙеңде ошо келәт*
*Тағы ҡулға алдырыр,*
*Баструктарға һалдырыр ҙа*
*Ҡара ярлы ҡалдырыр.*
*Ул бит мираҫ атайыңдан, —*
*Ә атайың кем ине? —*
*НКВД ҡармағына*
*Иң беренсе ем ине!*
*Белә-күрә, күҙ алдына*
*Келәтен дә ҡуйғанһың.*
*Себер юлын хәтереңдән*
*Бик тиҙ генә юйғанһың...»*

* * *

*Былары — кисәге көндәр,*
*Иҫкә төшһә, күңелһеҙ...*
*Ул замандың золомонан*
*Әҙәм инде төңөлһөн.*
*Шөкөр, сыҡтыҡ та ирекҡә,*
*Хыялдан оя үрҙем:*
*Һине күсереп ултыртҡас,*
*Талпынғаныңды күрҙем,*
*Ҡалҡынғаныңда шәйләнем*
*Атайым ҡыуанғанын:*
*Әруахтары риза булып,*
*Күңеле йыуанғанын.*
*Һине күсереп ултыртыу*
*Алға — ҡапҡа эсенә —*
*Атай өсөн мир алдында*
*РЕАБИЛИТАЦИЯ!*
*Ул булды — хәтер еңеүе,*
*Сауап — иҫ яңыртыуға,*
*Атай рухын һанлау аша*
*Namыҫты таҙартыу ҙа.*
*Замандаштары ҡалманы,*
*Әммә тора хәтерҙә:*
*Уны өнәмәгән шымсы*
*Тере кеүек хәҙер ҙә.*

*Һинең өсөн, Иҫке келәт,*
*Бик тә риза атайым.*
*Атайым инһә төшөмә,*
*Һинең янға атлайым.*
*Кимерә алманы Ваҡыт —*
*Үҙәгең тулы сайыр.*
*Шул беше ҡарағайҙарҙы*
*Яҡһа, тик иҫәр ягыр...*

* * *

*Айҙай яҡты уйҙар менән*
*Мин дә яҡтырам кеүек.*

*Илгә яҡшылыҡтар юрап,*
*Таңдар аттырам кеүек.*
*Киләткә инһәм, яңынан*
*Йәшәреү һиҙәм кеүек,*
*Йәшлегем шунда үткәндәй,*
*Ҡартлыҡ та биҙә кеүек.*
*Иҫке киләт ап-аҡ итеп*
*Эс яғынан аҡланған,*
*Иманлы, ҡотло йорт кеүек*
*Таҙарынған, сафланған.*
*Ғүмер ыҙандары һымаҡ*
*Бүрәнәнең һырҙары.*
*Һәр һырына һеңеп ҡалған*
*Әсәйемдең йырҙары.*

*Һаман тигеҙ, шыма, төп-төҙ*
*Түшәменең урҙаһы.*
*Һәр бер сөйҙә, һәр таҡтала —*
*Атайҙың күҙ нурҙары.*
*Иҫке киләткә уларҙың*
*Йәндәре күскән кеүек.*
*Шуға киләт элеккесә*
*Эйә ҙур көскә кеүек.*
*Тартып тора зиһендәрҙе,*
*Әйтерһең бер кәшәнә.*
*Әруахтарҙың*
*шат рухтары*
*Китмәй бында йәшәгән...*

* * *

*Атайымдан мираҫ булып*
*Тор әйҙә, Иҫке киләт!*
*Миңә генә түгел,*
*Илгә*
*Именлек, ырыҫ теләп.*
*Атайымдың төҫө булып,*
*Көнгә баҡ, илгә ҡара —*
*Сүгәм тип ҡурҡма.*

*Бер заман*
*Һәр нәмә ергә бара...*

*Атайҙан беҙ икәү ҡалдыҡ:*
*Һин дә мин,*
*Иҫке келәт!*
*Атай беҙҙә оҙагыраҡ*
*Йәшәһен — шулдыр теләк!*

### VIII. Сихри симфония

*Геү киләләр ана бал ҡорттары,*
*Күренмәй уй-хыял ҡорғаны.*
*Ул бер йыр икән дә!*
*Ғәжәп бер хор!*
*Сихри симфония торғаны.*

*Бал ҡорттары дәррәү кәрәҙ төҙөй,*
*Нигеҙ ҡора йортҡа, йәшәүгә;*
*Кәрәҙ — яңы күскә нигеҙ, оя,*
*Кәрәҙ — ҡортҡа иләү, шәжәрә.*

*Күстә инә була. Иләү ҡорто.*
*Донъя көтөү аныҡ көйләнгән,*
*Күстәр хәҙер эшһеҙ йәшәй алмай.*
*Күстең көсө уға бәйләнгән.*

* * *

*Мәж киләләр шуға бал ҡорттары...*
*Гөж киләләр — йырлап талпынғандай;*
*Йүнде белгәнлектә — берҙәмлектә*
*Бөлгөнлөк тә ситкә тайпылғандай.*

*Кеше лә бит, онотолоп китеп,*
*Йырлап ала эше ырағанда.*
*Йыры бер дәрт, эшенә йәм бирә,*
*Тынысланa, күңеле бушағандай.*

*Көйгә һала йөрәк һағыштарын,*
*Бил яҙып та бер мәл хәсрәттәрҙән.*
*Моңға манып ғүмер ағыштарын,*
*Бер кинәнеп изге хәстәрҙәрҙән.*

* * *

*Бал ҡорттары һымаҡ*
*Йыр ҙа оса,*
*Йән аҙағы тейәп кемдәргә —*
*Күңелдәре асыҡ әҙәмдәргә,*
*Сулдай ҡорғаҡһыған йәндәргә...*

*Умарталығында йөрөй сәсән*
*Һаҡмар бөгәлендә туғайҙа.*
*Уйҙар күсе ҡайнай башҡайында,*
*Йөрәгендә ташып тулай ҙа.*

*Бар булмышы менән моңда йәшәп,*
*Йыр-моң йомғағына әйләнгән.*
*Йыр ҙа хәҙер унһыҙ йәшәй алмай,*
*Йыр яҙмышы уға бәйләнгән.*

*Шул тынғыһыҙ, мәңгелек моң-эштә,*
*Кешем,*
*Һин — әйҙәүсе, дирижер:*
*Яңы күстең көсө — нигеҙендә,*
*Кәрәҙ үҙе — тере шәжәрә.*

*Ғүмер, ғүмер...*
*Баҙлай тандыр күмер...*
*«Уҙа ғүмер аҡҡан һыу һымаҡ,*
*Һыҙа икән ғүмер йыр булып та,*
*Әйҙәй икән йыр ҙа тыу һымаҡ...»*

*Бәйлелек бар Йыһан асылында;*
*Уртаҡлыҡ бар ерҙә йәшәүҙә:*
*Ҡорттар — бал — күс — дадан — кәрәҙҙәр:*
*Кеше — бала — тормош — шәжәрә.*

*Бал ҡорттары оса таңдан алып,*
*Ҡыҙарып ҡына ҡояш батҡансы,*
*Кеше аяҡтары һил булғансы,*
*Ай нурҙары ерҙе япҡансы.*

*Бал ҡортоноң теле — йәшәү теле,*
*Кәрәҙ үҙе — тере шәжәрә.*
*Күс айырыу — яңы ғаилә короу,*
*Ул — ҡояшҡа гимн, йәшәүгә.*

*Бер-беренән кәрәҙ ныгытышып,*
*Һәр беренән таяй, терәшә.*
*Ҡорттан алып фәһем, балдан — ғәйрәт,*
*Башҡорт,*
*Бал ҡортондай ишәй, арт, йәшә!*

**IX. Йыраусының әруахтарға өндәшкәне**

*Был донъяла күпме ғүмер һөрә торғас,*
*Әсе-сөсө, хаҡ-нахаҡын күрә торғас,*
*Сәскән-урған емештәрем тирә торғас,*
*Аҡыл һандығымда нәмә тупланымдыр.*
*Был донъяға килгәнемдән һеҙҙән алдым:*
*Ҡартатайым Сәйетгәрәй, — алтын аҡыл;*
*Ҡартәсәйем Шәмсикамал, — йырға асҡыс;*
*Ғәзиз әсәм Шәмсибаһар, — йәшәү-ялҡын;*
*Әле килеп һеҙҙе, ахыры, юҡһынамдыр.*

*Донъялыҡта алғанымды донъялыҡта*
*Ҡайтарайым, ҡара ғүргә юл ябыҡта.*
*Миңә сыраҡ һондоғоҙ, бер табыҡ юҡта,*
*Рәхмәттәрем һеҙгә күпер булһын инде.*
*Мөхәббәтем бүлеп бирҙем балаларға,*
*Моң-зарымды бушаттым сал далаларға.*
*Илтифатым яуҙы йәнде дауаларға,*
*Изгелектәр һеҙҙең йортҡа тулһын инде.*

*Булһын тинем ошбу бәйет, әруахтарым,*
*Һеҙҙең яҡты рухығыҙға бер рәхмәтем.*

*Һеҙҙең затҡа ҡағылмаһын сир-зәхмәте,*
*Аллам үҙе бирһен инде бар рәхәтен.*
*Бер рәхмәт — ул ҡотҡарыр, ти, мең бәләнән,*
*Яҙмышыбыҙ һеҙҙең юлға тиң бәйләнгән.*
*Татығанға ил хөрмәтен, көн рәхәтен,*
*Һеҙҙең яҡты рухығыҙға гел рәхмәтем!..*

### *X. Ваҡыт толпары*

*Әй был донъя!*
*Илаһи ҡөҙрәт менән*
*Өйөп биргән моңдо әҙәмгә.*
*Ваҡыт ағымында күпме хис, наҙ*
*Ағып китер ине әрәмгә,*
*Ул тыумаған булһа...*

*Тыуғас әле*
*Йылы тапмай, тәне боҙ булһа,*
*Йә, аслыҡтан миктәп, шытып ҡуйһа,*
*Йә, һуғышта янып, ҡуҙ булһа?..*
*Шөкөр, Аллаһ!*
*Башҡорт бәхетенә*
*Йыраусыһын ерҙә һаҡлаған.*
*Моңо менән илгә таныттырып,*
*Хаҡ-ғәҙеллек иткән тантана.*

*Донъя тигеҙ генә булмағанда,*
*Күңелендә әрнеү тулғанда:*
*«Донъялары менән,*
*ҡорто менән!..» —*
*Тигән мәлдәре лә булғандыр...*

*Ғүмер елә ваҡыт толпарында,*
*Үҙ асылын кеше тапҡансы.*
*Кеше аса күпме сит ишекте,*
*Үҙ ишеген табып асҡансы.*

* * *

*Кис.*
*Һаҡмар.*
*Ай яҡтыһында*
*Йылға өҫтө көҙгөләй.*
*Көҙгө тоноҡ,*
*шомбай,*
*бойоҡ,*
*Серле, уйҙы өҙгөләй.*
*Сихри кис.*
*Илгәҙәк Һаҡмар.*
*Тынып ҡалған ил ҡарты.*
*Уҙған ғүмере эсендә*
*Хәсрәт эсеп,*
*уй тартып.*

*Һыуҙың уйы һыймай уға,*
*Баҫмай вайым-һағышты.*
*Йылға ағышынан тилбер*
*Йырҙың ҡанат ҡағышы:*

*«Һаҡмарҡайым бирмәҫ, ай, сарсарға,*
*Йырсы бирмәҫ йырға сәсәргә.*
*Уйға батмаҫ та ғына ирҙәр булмаҫ,*
*Ғәмһеҙ ҙә генә булмаҫ сәсәндәр...»*

*Аға Һаҡмар талғын, йәйрәп, тулып,*
*Шаршыларҙа шаулап, ишелеп,*
*Пи ғүмерҙәр инде тынмаҫ йырҙы*
*Ҡая-таштар тора ишетеп!*

*Ҡушыла йыр йылға ағышына.*
*Йырылғандай күңел даръяһы.*
*Башҡортомдоң унда сал тарихы,*
*Бар булмышы, рухи ҡалҡаны.*

*Йыр йылғаһы —*
*Мөхәмәтйән сәсән —*

*Ярға баҫҡан. Иркен һулышы:*
*Ҡобайыры,*
*бәйет,*
*мөнәжәте*
*Ҡаяларға ҡаға,*
*урғылып...*

*«Һайланма әҫәрҙәр» китаб...*
*2 т. Өфө, 2011. 342–359-сы бит...*

***Ю.И. Гайнетдинов**, народный артист Р...*

КАЗАКБАЕВ Мухамедьян Абдуллович (р. 22.12.1924, д. Сакмаро-Назаргулово Зилаирского кантона БАССР, ныне д. Сакмар-Назаргул Хайбуллинского р-на РБ), певец, сказитель. Участник Вел. Отеч. Войны. В 1949–84 работал в к-зе «Сакмар» Хайбуллинского р-на. Один из самых самобытных представителей башкирской традиционной исполнительской школы. В репертуаре свыше 100 узун-кюй: «Шагибарак», «Шаура», «Шафик», уникальные варианты «Кагарман-кантон», «Камалек», «Сырдарья» и др., малоизвестные образцы башкирского музыкального фольклора: «Ғәзизә» («Газиза»), «Мәғри» («Магри»), «Силәбе» («Силябе»), марши «Муса Мортазин» («Муса Муртазин»), «Йәнтилә ҡашҡа» («Янтиля-кашка») и др., стих. Акмуллы, Ш. Бабича, Г. Тукая, произв. классиков вост. поэзии, старинные мунажаты и баиты. Участник Всемирного фольклорного фестиваля «Вашнои» (г. Осака, Япония, 2000). Лауреат Респ. праздника нар. иск-ва «Йомабай Иҫәнбаев көндәре» («Дни Юмабая Исянбаева», с. Акъяр Хайбуллинского р-на, 1989), Респ. радиоконкурса «Башҡорт халыҡ йыры» («Башкирская народная песня»; Уфа, 1991; Гран-при). Награжден орд. Отеч. Войны 2-й ст. (1985).

*«Башкирская энциклопедия». Т. 2.*
*Уфа, 2006. С. 196*

*Сәриә Ишемғолова, журналист.*

## Ололар тәбрикләнеләр

Һакмар-Наҙарғол ауыл мәҙәниәт йортонда ауылдаштар Мөхәмәтйән Абдулла улы Ҡаҙаҡбаевтың юбилей кисәһенә йыйылды. Был сараны район хакимиәте һәм мәҙәниәт бүлеге ойоштторҙо.

Мәҙәниәт йортонда йылы һәм йәмле, тәҙрә төптәрендә күп еҫле гөлдәр ултыра, әйтерһең дә юбиляр өсөн генә сәскә атҡан. Урындағы мәҙәниәт йорто һәм мәктәп хеҙмәткәрҙәре тарафынан М.А. Ҡаҙаҡбаев тураһында стенд әҙерләнгән, өҫтөнә 1965 йылдан бирле уға тапшырыла килгән күп кенә Почет грамоталары һалынған.

Байрам кисәһендә юбиляр исеменә ҡарата ҡотлау һүҙҙәре күп әйтелде. Район хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Ю.Д. Сиражетдинов:

– Районда бик күп төрлө саралар үткәрелә, һәм Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы юбилярҙарҙы ҡотлау ҙа изге традицияға әүерелде. Мөхәмәтйән Абдулла улы ауылдаштары тарафынан күрһәтелгән бындай оло хөрмәткә лайыҡ кеше. Ул тырыш хеҙмәткәр, ихтирамлы ғаилә башлығы, сәсән булараҡ ҡына түгел, ә башҡорт халыҡ ижадын һаҡлаусы, быуындан-быуынға мираҫ итеп тапшыра килеүсе булараҡ та район һәм республикала ғына түгел, унан ситтә лә танылған кеше. Уның тормош юлы күптәр өсөн үрнәк булырлыҡ. Мөхәмәтйән Абдулла улының халыҡ ижадына тос өлөш индереүен иҫәпкә алып, район хакимиәте ике йылға бер тапҡыр Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев исемендәге сәсәндәр конкурсын үткәрергә ҡарар итте.

Хөрмәтле ил ағаһы, беҙ Һеҙҙе юбилейығыҙ менән ысын күңелдән ҡотлайбыҙ һәм ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер теләйбеҙ.

Артабан ул республика Президенты М.Ғ. Рәхимовтың юбилярҙы ҡотлап ебәргән телеграммаһын уҡып ишеттерҙе.

Кисә ике сәғәттән ашыу дауам итте. Юбилярҙы мәҙәниәт бүлеге мөдире Л.Р. Мәмбәтова, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарының район советы рәйесе А.И. Сабин, район хәрби комиссары Е.Н. Кутузов, Әбеш ауыл советының ветерандар советы

рәйесе Ф.А. Сурин, ауыл мәҙәниәт йорто мөдире Р. Сәйфуллина ҡотланы һәм бүләк тапшырҙы. Район үҙәгенән һәм Йәнтеш ауылынан килгән һәүәҫкәр артистар Н. Ҡыҙрасова, В. Биктимерова, Р. Сынбулатова, С. Асҡарова, Ф. Арсланова һәм мәғариф бүлеге хеҙмәткәрҙәре Ф. Аллағолов, Р. Аҡбалин, «Ҡош юлы» ансамбле артистары бик матур концерт күрһәттә. Ҡотлауҙар йыр һәм бейеүҙәр менән алмашынды. Кисәне алып барыусы Сәриә Асҡарова ваҡыты-ваҡыты менән Мөхәмәтйән олатайға һәм уның тормош юлдашы Бибиһан инәйгә килеп, уларҙан йәшлек йылдарын, нисек танышыуҙарын, балаларына ниндәй тәрбиә биреүҙәрен, балаларының нисек үҫеп етеүҙәре тураһында иҫкә алып һөйләүҙәрен һораны. «Йәштәргә әйтер һүҙегеҙ бармы?»— тигән һорауға олатай ҙа, инәй ҙә бер тауыштан: «Эшләргә, эшләргә һәм эшләргә. Әгәр кеше эшкә бирелгән икән, унда яҙыҡ уйҙарға ваҡыты ла, теләге лә ҡалмай!», — тип яуап бирҙеләр.

Мөхәмәтйән Абдулла улы оло иғтибар күрһәтелеүгә ҡыуанып бөтә алманы һәм шундай һәйбәт байрамды әҙерләп үткәреүгә көс һалған район хакимиәтенә һәм ҡатнашыусыларға ысын күңелдән сикһеҙ рәхмәтен белдерҙе.

*«Яңы тормошҡа» гәзите. 2004 йыл, 21 декабрь*

***Сәлимә Байгилдина**, «Яңы тормошҡа» гәзите хәбәрсеһе.*

## Йыр-моңдо юлдаш иткәс, донъя тағы йәмле булып күренә

Әҙәм балаһының ғүмере ғәжәп бер серле донъяға тиң. Әгәр ҙә кеше күңеле менән сәнғәткә ғашиҡ икән, әйтеп тораһы ла түгел. Мөхәмәтйән ағай Ҡаҙаҡбаев менән нисәмә тапҡыр осрашырға тура килһә лә, ул һаман да замандаштары өсөн асылып бөтмәгән сер булып ҡала бирә. Халыҡтың, йөҙ мәртәбә ишеткәнсе, бер мәртәбә күргәнең артыҡ, тигән аҡыллы һүҙе менән ҡоралланып, Мөхәмәтйән ағай йәшәгән, илһамланып донъя көткән Хәйбулла районының иң хозур төбәгенә — Һаҡмар-Наҙарғол (Бүре) ауылына юл тотабыҙ.

*Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан,*
*Урал тауы буйлап көн битләп, –*

тигән юлдар күңел ҡылдарын сиртеп үтә, йылан һымаҡ борғоланған юлдарҙан урап-урап тау төшкәндә.

Хазиналар аяҡ аҫтында тапалып ятмай, уларҙы тәбиғәт тә, халыҡ та төпкәрәк йәшерә икән, тигән уйҙар менән аяҡ баҫабыҙ Һаҡмар буйында урынлашҡан Бүре ауылына.

Олпат кәүҙәһе менән ғорур Урал бөркөтөн хәтерләтеүсе, сал сәсле башын һәр ваҡыт юғары тотоусы алсаҡ күңелле ир уҙаманы Мөхәмәтйән ағай менән әңгәмәләшәбеҙ.

–Донъяға мин икенсе бала булып килгәнмен. Әммә халыҡтар яҙмышын тетрәндергән 30-сы йылдарҙағы ваҡиғалар беҙҙең ғаиләне лә урап үтмәне. 1930 йылда атай-әсәйем Себергә оҙатыла. Шул сәбәпле миңә Аҡһыйыр ауылында ҡартатайым Сәйетгәрей тәрбиәһендә үҫергә тура килде. Ә инде 1937 йылда уны ла алып киттеләр. Шул китеүҙән ҡайта алманы. 80 йәшлек сағында Өфө төрмәһендә үлеп ҡала. Атайымды Себерҙән ҡайтҡас, тағы ике тапҡыр алып китәләр. Тамам үҙәгенә үтеп, ауырып 1941 йылда үлеп ҡалды, – тип хәтерләй Мөхәмәтйән ағай бала саҡтағы күңелһеҙ хәлдәрҙе иҫләп.

Уҡымышлылар ҡатламынан сыҡҡан Мөхәмәтйән Аҡъюл мәктәбендә уҡыған осорҙа иң алдынғы уҡыусыларҙан һанала. Иң шәп уҡыусы тип атап, уға Мәжит Ғафуриҙың китабын бүләк итәләр. 5 класты тамамлағандан һуң, 1937 йылда уҡыуын ҡалдырып Бүре ауылына ҡайтырға, 13 йәше тулыр-тулмаҫтан олкәндәр менән бер рәттән колхозда ең һыҙғанып эшләргә тура килә үҫмергә.

Унан һуң армия, Бөйөк Ватан һуғышы йылдары... 1948 йылда ғына әйләнеп ҡайта тыуған яҡтарына.

Ата-олатайҙарҙың хәтер хазиналарын беҙҙең көндәргә килтереп еткереүсе Мөхәмәтйән ағай менән әңгәмә дауам итә:

– Мин иҫ белгәндән үк йырланым, ерҙә берәйһе йырламаҫмы икән, тип өмөтләнеп көтә лә йөрөй инем. Аҡһыйыр ауылы халҡы, ғөмүмән, тотошлайы менән йырсы халыҡ. Өй һайын йыраусылары булды. Тарихи йырҙарҙың күбеһен мин уларҙан өйрәндем. Мөнәжәт, бәйеттәрҙе әсәйемдән оттом.

Бик күп кенә йырҙарҙы Нәбирә апай, Ғәли ағайҙарҙан, бер туған апайым Зәйнәптән, Һаҙый ағай Моталов, Дәүләт... ағай Хәсәновтарҙан да өйрәндем.

Йырсы-сәсән Мөхәмәтйән ағай репертуарының тағы бер үҙенсәлекле йүнәлеше – боронғо китаптарҙы көйләп уҡыу. Аҡмулла, Туҡай, Бабичтарҙың әҫәрҙәрен уларҙың заманында ... рындағыса йәнле итеп башҡарыу оҫталығы. Ошо өлгөләр... беҙҙең көндәргә килеп етеүенә беҙ сәсәнебеҙгә бурыслыбыҙ.

– Ғүмеремдең иң онотолмаҫ көндәренең береһе – профессор Танимото саҡырыуы буйынса 2000 йылда Японияла донъя халыҡтары фестивалендә булып ҡайтыуым, – тип әңгәмәне дауам итә. – Ундағы таҙалыҡҡа, бөхтәлеккә, мәрхәмәтлеккә хайран ҡалып ҡайттым. Урамда тәмәке тартыусы, сүп ташлаусы йәки эскән кеше осратмаҫһың. Танимото үҙе лә икенсе тапҡыр беҙҙә ҡунаҡта булып китте. Бер осрашыу ваҡытында Юлай Ғәйнетдиновҡа: «Был Мөхәмәтйән ағайҙа ысын халыҡ йыры, халыҡ моңо ята, уға нота ла кәрәк түгел», – тип әйткән. Был минең ижадыма ысын баһа тип уйлайым.

Хәтер ептәрен ашыҡмай һүтә-һүтә олпат сәсән тағы ла һуғыштан һуңғы йылдарға әйләнеп ҡайта:

– Һуғыштан ҡайтҡас, шофер һөнәрен ташламаным. Армияла ла, һуғышта ла руль артында булдым. «Студебеккер», ЗИС автомашиналарында йөрөнөм. Шофер булып 20 йыл эшләгәс, 1968 йылда умартасылыҡҡа күстем һәм пенсияға сыҡҡансы шунда эшләнем. 7 йыл рәттән районда «Иң яҡшы умартасы» исемен йөрөттөм. 1979 йылда 80 умартанан 3 тонна бал алдым, – тип уртаҡлаша хәтирәләре менән юбиляр.

Күп һанлы дәүләт наградалары уның лайыҡлы үткән хеҙмәт юлын сағылдыра. Кеше ғүмеренең гүзәл бейеклектәренең береһен – 80 йәшлек юбилейын билдәләй бөгөн данлыҡлы сәсәнебеҙ. Ғүмерлек тиң юлдашы сабыр, изге ҡатын һәм әсә Бибиһан инәй менән иңгә-иң терәшеп матур ғүмер кисерә улар. Ғорурланып һөйләрҙәй биш ул, бер ҡыҙ үҫтергәндәр.

– Алты балам – алты холоҡ. Тик барыһында ла оҡшаш бер һыҙат бар – кешеләргә яҡшылыҡ эшләү, – тип ғорурланып һөйләй Мөхәмәтйән Абдулла улы. Ғөмүмән, ул үҙенең тормош фәлсәфәһен түбәндәге һүҙҙәр менән аңлатты: «Әгәр

һин үҙең осон йәшәргә теләйһең икән, кеше өсөн дә йәшә». Үҙ исемына ла, балаларының яҙмышына ла орлоҡ итеп һала торған ул ошо алтын һүҙҙәрҙе. Лайыҡлы, оло юбилейығыҙ менән ҡолтайбыҙ һеҙҙе, хөрмәтле ил ағаһы!

*«Яңы тормошҡа» гәзите. 2004 йыл, 21 декабрь*

***Шафиков Г. Г.**, писатель.*

## Несостоявшийся фильм об Акмулле
(художественно-документальная повесть)

Как-то мне уже приходилось писать о том, как однажды, так лет тридцать назад, словно само собой возникла идея создания художественно-документального (а если окажется возможным, чисто художественного) фильма о великом поэте просветителе XIX века Мифтахетдине Акмулле.

Если быть точнее, идея эта родилась в недрах Казахской киностудии. И не только потому, что она была в ту пору достаточно развитой и выпускала совсем даже неплохие художественные фильмы, а еще и потому, что там около двух десятков лет трудился режиссером выходец из Абзелиловского района Башкирии, троюродный племянник Заки Валиди и наследный родственник выдающегося башкирского просветителя, основателя и неизменного главы знаменитого Троицкого медресе Зайнуллы Расулева – Малик Якшимбетов. Он был одним из любимых учеников Григория Чухрая, являлся одним из прогрессивных деятелей Казахской киностудии; создал около двух десятков художественных, художественно-публицистических и документальных фильмов. Но его тянуло на родину, несмотря на то, что часть жизни Акмуллы прошла в Казахстане и казахи считали его своим национальным акыном, он знал, что Акмулла – выходец из башкирской деревни Туксанбаево (Миякинский район) и желание Малика создать о нем фильм было своеобразным решением так называемого «гомерского» вопроса, желанием примирить борьбу за нацио-

нальную принадлежность Мифтахетдина Акмуллы. В поста-
новке художественного фильма о нем он видел самое опти-
мальное решение этой отнюдь не такой уж простой пробле-
мы. Создание такого фильма должно было решаться на уров-
не правительства — и Казахское, и Башкирское правительства
вносили свой финансовый «вклад» в съемки, предоставляли
необходимые для этого площади и аксессуары, выделяли сво-
их лучших актеров. Вот Малик и приехал в Уфу в качестве
своеобразного парламентера, чтобы навести первые мосты
возможного фильма о великом сэсэне.

Мы были хорошо знакомы с Маликом с того времени, когда
он приезжал на стажировку из Москвы в Башкирскую студию
телевидения, где в ту пору работал и я. В моем лице он видел
сценариста фильма об Акмулле «с башкирской стороны». Наша
первая беседа с Маликом затянулась надолго. Дошло до того,
что мы стали определять состав действующих лиц, среди ко-
торых, разумеется, на первом месте стояла роль главного ге-
роя фильма — Акмуллы. Мы как-то сразу пришли к мысли,
что роль эту должен исполнять башкирский актер. Пошли
предложения и с моей стороны, и с его стороны. Это было, в
какой-то степени, похоже на игру...

И тут меня осенило!

Мне вдруг представился человек, не имеющий к теат-
ральной сцене, и, тем более, к кинематографу, никакого от-
ношения. Разве мало фильмов, на которые режиссеры-по-
становщики приглашали совершенно далеких от искусства
людей?

«Да, да, только он! — повторял я про себя. — Только он!..»

* * *

В 1956—57 годах, в силу того, что не поступил в Московский
институт международных отношений (МИМО), мне пришлось
вернуться туда, где жили мои родители — в село Абишево
Хайбуллинского района. Его можно было бы считать самой
южной точкой республики, если бы «всесоюзный староста»
Калинин, определявший границы автономных республик, за-
хватил своим вещим карандашом башкирский городок Ку-
вандык. А так, по воле этого деятеля, он как бы автоматичес-

ии перешел в состав Оренбургской области и между ним и Аминевым образовалась «ничейная», изумительной красоты поляна, где когда-то то и дело возникали сражения между башкирами и посягавшими на их земли захватчиками. В такие времена вода в не менее прекрасной реке Сакмар меняла свой цвет, из бирюзово-зеленоватой становилась алой от крови.

Не менее удивительные перемены происходили и в немногих деревнях, расположенных в этих местах: они переходили из рук в руки, захватываемые то казахами, то русскими, и тогда истинные их хозяева — башкиры — передвигались к северу, селились на новых местах, чтобы в один прекрасный момент вновь совершить неожиданный «марш-бросок» и вернуть свои законные владения. Вот почему эта поляна, в 40 километров длиной, издавна служила одновременно и «демаркационной линией», и яблоком раздора.

В конце концов, деревни разделились и обрели свои названия: в Оренбургской области осталось село Баш Буре, отделившееся от аула Сакмар-Назаргулово (Сакмарский Буре), сошла на нет. С тех пор аул Сакмар-Назаргулово, где проживает наш герой Мухаметьян Казакбаев, существует своей тихой и спокойной жизнью. Именно Мухаметьян-агай вспомнился мне, когда мы с Маликом Якшимбетовым раздумывали над тем, кто же должен сыграть роль Мифтахетдина Акмуллы.

* * *

Я не буду вдаваться в подробности родословной Мухаметьяна Казакбаева, в их семейной шежере, где обозначены имена чрезвычайно интересных людей. К примеру, один из его предков, по имени Янгул, был искусным кураистом, но при этом и состоятельным человеком; у него было 12 байталов (нежеребившихся кобыл). А когда они принесли жеребят, то он превратился в местного бая. И хотя Казакбаевы всегда являлись крестьянами среднего состояния, в период раскулачивания им досталось по полной катушке из-за того, что они приходились родственниками Янгулу.

Со стороны матери Мухаметьян-агая дед его, Саитгарей Бахтегареевич Галиакбаров, был самым образованным чело-

веком в округе: слово в слово переводил арабские книги, на русский язык. Образованной женщиной была и его жена Шамсикамал Сагадеевна. Они жили в деревне Акхыйыр (Белая корова), имевшей еще одно название — Ишкильде. В одной стороне дома дед Саитгарей учил мальчиков, а в комнате, что с другого конца, девочек обучала Шамсикамал-апай. Мухаметьян-агай воспитывался у них с младенческого возраста, но в связи с трагическими делами, связанными с революцией и последовавшими за ней событиями, ему удалось получить лишь пятиклассное образование. И это — у самых образованных людей этого края, которые выучили детей стольких односельчан!

Признаюсь сразу: все эти сведения о родителях моего героя я почерпнул от большого знатока башкирской народной музыки, неутомимого искателя народных талантов Юлая Гайнетдинова, который за эту свою деятельность в 2002 году получил Государственную премию РБ имени Салавата Юлаева. Я же в своей документальной повести о Казакбаеве, которого знаю с 1957 года и, как обычно бывает, никогда не интересовался его родословной, хотел коснуться совсем иных сторон его жизни и личности, которые и стали темой этого произведения, если его можно так назвать. Статья же Юлая Гайнетдинова под названием «Пою ради народа своего» (так называется одно из замечательных стихотворений Шайхзады Бабича) напечатана в шестом номере журнала «Шункар» за 1999 год.

* * *

Скажу сразу: задуманного фильма о Мифтахетдине Акмулле не получилось. Да и получиться не могло. В ту пору Башкирская киностудия только-только нарождалась, здесь создавались лишь документально-публицистические фильмы; были среди них удачные, получившие призы не только «в своем Отечестве», но и за рубежом (к примеру, в Будапеште золотой медали удостоился фильм «Башкирский мед»). Но на художественные фильмы здесь едва-едва замахивались.

Мне представляется удивительным, что фильм об этом великом сэсэне и акыне, народном поэте-просветителе не поставлен и поныне. Может быть, потому, что ныне нет та-

ких режиссеров-патриотов, как Малик Якшимбетов, который при невыясненных обстоятельствах скончался в одном из номеров гостиницы «Агидель».

А ведь много десятков лет назад на том же «Казахфильме» была осуществлена постановка замечательного фильма «Джамбул», который с большим успехом прошел по экранам страны. Правда, тогда – Советской страны. Вполне возможно, кинокартина об Акмулле, импровизаторский талант которого несомненно превышал талант Джамбула Джабаева, не может родиться потому, что он «иштек» («истек» – истеками казахи называют башкир), хотя казахи считают его свои акыном.

Так вот, я хочу начать свой рассказ с обычной деревенской пирушки, на которой, по какой-то причине, оказался и Мухаметьян-агай, проживавший в соседнем ауле. Я же работал здесь «избачом». Незадолго до этого колхозный бухгалтер соизволил отпустить деньги на покупку гармошки, называемой «хромкой», на которой я худо-бедно научился играть, и потому стал непременным посетителем почти всех сборищ и посиделок. И не только посетителем, но и потребителем «бала из бала» (медовухи из меда) или обыкновенной кислушки. Недавно, читая книжку о Чингисхане, я удивился тому, что великий каган, наряду с заморскими винами, угощал своих гостей именно «балом из бала», т.е., медовухой. Порой я потреблял ее так, что однажды чуть ли не до смерти напугал свою хозяйку, в доме которой квартировался: она увидела меня распластанным во дворе своего дома на снегу. Рядом со мной валялась купленная недавно гармошка. При виде этой картины она подняла такой истошный вой, что на крик прибежали люди из соседних домов. Общими усилиями они подняли меня на ноги и ввели в дом хозяйки.

Но это – между прочим.

Так вот, на этой пирушке все шло так, как было здесь принято: пили «бал из бала», угощали друг друга жирным казылыком, запивая его обжигающей шурпой (бульоном); потом пели песни – и соло, и хором; отпускали плоские шутки. Наконец, черед дошел и до меня. Я играл неважно, и, может быть, меня никто не стал бы приглашать в гости, если бы я не был единственным гармонистом на всю деревню. Но и того, что я выжучивал из мехов, вполне хватало для каких-то пьяных песен и

плясового топота. При этом каждый пляшущий, завершая свой танец, кидал передо мной на пол рублевку или трешку, выражая тем самым свою благодарность за мой труд. Иногда этих брошенных купюр набиралось до тридцати или даже сорока рублей. Я стеснялся и не хотел брать. Но мне говорили: «Если стесняешься, отдай хозяйке, уж она-то стесняться не станет». Это был золотой совет: если б вы видели, как светилось ее лицо, когда она забирала комок собранных мною денег!

Но вот кто-то сказал, что слово следует дать гостю, то есть, Мухаметьян-агаю. Он не стал кочевряжиться и спел какую-то протяжную народную песню. Меня удивила не сама песня, а голос певца. Он звучал необыкновенно пронзительно, порою на грани надрыва, и, казалось, вот-вот оборвется, как обрывается нитка при грубом шитье. Во-вторых, песня мне была незнакома (здесь обычно пели одни и те же протяжные песни) и слова ее были необыкновенно осмысленные, я бы сказал, глубоко философские. Может быть, мне так показалось на мою разгоряченную голову? Когда он кончил, раздались недружные подбадривающие крики, свойственные при таких случаях. Кто-то прокричал:

— Давай Акмуллу!

Но другие его не поддержали, и Мухаметьян-агай не стал продолжать.

«Акмулла! Акмулла!» — забилось в моем виске. Знакомое, близкое мне имя. Но где я его слышал? Ну, конечно, вспомнить его мне мешает хмель. А все-таки... А все-таки... Уф-ф, вспомнил! Разумеется, это то самое имя, которое я столько раз слышал из уст своей матери. Более того, она читала какие-то строчки, которые где-то обрывались недочитанными... Много лет спустя, уже учась в университете, я вспомнил те места и пытался перевести на русский язык. Получилось что-то пустое: «Над водою тростник головою поник; на его кожуре — сахар, весь в серебре...»

Конец — дрянной.

Выходит, этот незнакомый мне Мухаметьян-агай поет песни на слова Акмуллы? Любопытно.

Но вскоре он уехал в свой аул Буре на своем грузовике-развалюхе и довольно долго не появлялся у нас. А потом по-

...чилось так, что я сам оказался в его ауле. Наш бригадир Гариф-агай предложил мне как-то съездить в этот самый Буре «для компании».

— Кажется, ты никогда там не был, хотя он всего в семи километрах от нас, — сказал он шутливо. — Погоди, грянут выборы, тебя туда первым погонят агитатором.

Я с радостью согласился на его приглашение.

Мы сели на его телегу, свесив ноги, и лошадь пошла ленивой рысцой. Как всегда, болтали о всякой ерунде. Но меня вдруг осенило.

— А кто такой этот Мухаметьян-агай? — спросил я, как бы между прочим, готовясь получить такой же необязательный ответ, вроде «Ну, мужик мужиком, на развалюхе столько-то лет ездит, тем и примечателен». Но в ответ мне было довольно продолжительное молчание. Это меня удивило, и я с любопытством посмотрел на Гариф-агая — может быть, не расслышал моего вопроса? Однако увидел нечто совсем иное: бригадир вдруг стал сосредоточенно серьезен: между жидкими, рыжеватыми бровями (из-за этого наиболее безбоязненные бабы звали его «рыжим» и еще — «урусом», ибо, как я узнал потом, существовала легенда, что истинным отцом его был русский мужик-мельник) пролегли две глубокие морщинки. Это было ново. Обычно я привык видеть его угреватое лицо всегда благодушным. А тут...

